ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КИСКЕ ӨФӨ

8-14 апрель (алағарай) 2017

№ 14 (744)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Бәхетлеләр күберәк булһын!**



3

**Балалар һәм...**

асарбаҡ әсәләр



6

**Ир кеше өсөн...**

әсәһе менән ҡатынының дуҫ булыуы - ярты бәхет



8-9

**Балаңа ярҙам ит -**

виртуаль тормошҡа башкөллө суммаһын



12

**ТВ-программа** 14

***Өйләнеүҙең маҡсаты - балалар тыуҙырыу. Аллаһы Тәғәлә ҡаршыһында тәҡдир ҡылынған ваҡыт эсендә нәҫел ҡалдырыуға хеҙмәт итеү, ғаиләнең бәхетле булыуын тәьмин итеү. Ҡатынһыҙ, йәғни яңғыҙлыҡта йәшәүселәр һис бер ваҡытта бәхетле булмай. Ни тиклем дәүләтле һәм мул тормошло булһа ла, ундай ир тоғро бер ҡатынға, ә ҡатын-ҡыҙ иһә шундай бер иргә мохтаж. Яңғыҙаҡтар ни ҡәҙәр рәхәттә йәшәһәләр ҙә, үкһеҙ булып ҡалалыр. Ирһеҙ ҡатын күләгәһеҙ ағас кеүектер.***

***"Мосолман шәхесе" китабынан.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Халыҡ медицинаһына ышанаһығыҙмы, уның дауалау ысулдары менән файҙаланаһығыҙмы?

***Миңлеғәле БОХАРБАЕВ, Хәйбулла районы Аҡъяр район дауаханаһы табибы:*** Ата-бабаларыбыҙ быуаттар буйы ҡулланған, шифаһы һыналған, һөҙөмтәле халыҡ дауалау ысулдарына ышанам, шулай уҡ уларҙы ауырыуҙарға ла кәңәш итәм. Мәҫәлән, ДЦП менән сирле балаларҙың хәлдәрен рәсми медицина дауалауынан тыш, традицион булмаған һәм халыҡ дауалау ысулдары менән дә күпкә еңеләйтергә була. Ус һәм аяҡ табандарындағы махсус нөктәләргә тәьҫир итеү юлы менән дауалаусы Су-Джок ысулының файҙаһы ҙур улар өсөн. Шифалы батҡаҡ, Залмановтың скипидар ваннаһы, һоло, дарыу үләндәренән ванналар ҙа билдәле. Тик быңдай ысулдарҙы ҡулланыр алдынан табип менән кәңәшләшеү мотлаҡ. Үкенескә, халыҡ имселәре хәҙер һирәк күренеш, ә шулай ҙа әллә ҡайҙарҙан уларҙы эҙләп килеүселәр ағымы туҡтамай. Тимәк, халыҡ уларға ышана, һөҙөмтәһен күрә. Мәҫәлән, Иҫәнгилде ауылында быуын ултыртыусы шифа ҡуллы бер инәй йәшәй ине, бик күптәргә ярҙам итте ул. Хәҙер белмәйем, иҫәнмелер ул, юҡмы... Үкенескә, ундай бағымсылар бик һирәк хәҙер. Ә бына үҙҙәрен экстрасенс тип иғлан итеүселәр менән бик һаҡ булырға кәңәш итер инем, сөнки уларҙың күбеһе еңел аҡса артынан ҡыуыусы шарлатандар. Быуындар һыҙлауын, радикулит кеүек сирҙәрҙе ҡорттан саҡтырып дауалауҙарын да яҡшы беләбеҙ. Һөлөк һалыу үҙе генә етмеш сирҙән дауа. Ә бына онотолоп барған бер ысул - ҡан сығарыу, йәки хиджама тигән халыҡ әмәле ҡан баҫымын көйләй, тиҙәр. Тик был ысулдарға мөрәжәғәт итерҙән алда, ҡабатлайым, табиптар менән кәңәшләшеү мотлаҡ, юғиһә, кемгәлер уларҙың килешеп бөтмәүе, хроник сирҙәрҙең ҡуҙғыуы, аллергия кеүек хәүефле йоғонтоһо булырға ла ихтимал.

***Зөлфиә ИСКУЖИНА, хаҡлы ялдағы уҡытыусы:*** Халыҡ медицинаһын табиптар танырға теләмәһә лә, халыҡ уны рәсми медицинаға ҡарағанда яҡыныраҡ күрә һәм уға йышыраҡ мөрәжәғәт итә. Дөрөҫөн әйткәндә, былай ҙа бит инде көн дә тип әйтерлек халыҡ дауалау ысулдарын ҡулланабыҙ: мәтрүшкәләп-баллап сәй эсеү булһынмы ул, ҡайын, имән миндектәренә шифалы үләндәр ҡушып, мунсала сабыныуымы, иртәнсәк һайын Иванов ысулы менән һыу ҡойоноумы, таңғы ысыҡ ярып яланаяҡ үлән кисеүме һ.б. Себен теймәҫтән дә сер итеп дауаханаға йүгерә һалмай бераү ҙә. Айырыуса ауыл ерендә. Берҙән, был мөмкин дә түгел, сөнки хәҙер ауылдарҙа участка дауаханаларын, хатта бәләкәй генә медпункттарҙы ла ябып бөттөләр бит. Ҡайҙалыр тағы ла уҡығайным - ауылын оноттом инде - хатта бала табыу-акушер бүлегенә тиклем ябып ҡуйғандар икән, тип. Кемгә ҡамасаулағандыр инде улар - аңламаҫһың... Хәҙер ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ боронғоса өйҙә бала таба башлаясаҡ, күрәһең - бына бит ниндәй замандар етте: алға барабыҙмы, тиһәң, киреһенсә, артҡа тәгәрәйбеҙ. Шулай булғас, ниңә әле беҙгә ата-бабаларыбыҙ быуаттар буйына һынаған халыҡ дауалау ысулдарын ҡулланмаҫҡа? Район үҙәгенә аптекаға йөрөүсе лә һирәк беҙҙә хатта, йәшел аптекабыҙ йәшәһен. Ауылыбыҙ урман, гөл-сәскә араһында ултыра. Яҙҙан алып, көҙгә тиклем дарыу үләндәре йыйемеш-еләген тир - бөтәһе лә бар, бөтәһе лә бушлай. Ә аптекаға бит яҡын барырлыҡ та түгел хәҙер: хаҡтар шундай ныҡ "тешләшә", ярты пенсияңды ҡалдырып сығырға тура килгән саҡтар ҙа була.

(Дауамы 2-се биттә).

ИЖАДХАНА

# БӨЙӨК БАБИЧТЫ...

## кинола кәүҙәләндереү бәхете - Таһировта!

**Актер өсөн театрҙа йәки кинола бөйөк шәхестәрҙе уйнай алыу мөмкинлеге - уңышлы билет тартып сығарыу менән берҙер, моғайын. Башҡортостандың 100 йыллығына арналған һәм ошо көндәрҙә тамашасы иғтибарына тәҡдим ителәсәк "Бабич" фильмында ялҡынлы шағир, билдәле йәмәғәт һәм дәүләт эшмәкәре, Башҡорт хөкүмәте ағзаһы Шәйехзада Бабич ролен башҡарған актерҙың был ролгә илткән юлы ла, үҙенең шәхесе лә күптәргә ҡыҙыҡтыр. Шуға ла М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры актеры Илгиз ТАҺИРОВ менән әңгәмәбеҙҙә уның үҙенең күңел донъяһын асырға тырышырбыҙ.**



(Дауамы 11-се биттә).

12+

✓ Башҡортостаныбыҙ ере шифалы үлән-сәскәләргә бик бай. Хатта ҡый үләндәре лә дарыу ул, уның рәтен, ҡәҙерен белгән кешегә, тик үҫемлектәрҙең файҙалы һәм зарарлы үҙенсәлектәрен өйрәнеп, дөрөҫ файҙаланырға ғына кәрәк.



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# МОҢҺОҘҒА ӘЙЛӘНМӘЙЕК!

***Гөлшат ЗАКИРОВА, Архангел районы башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе, "Инйәр" гәзитенең баш мөхәррире:*** Халҡымдың киләсәге тураһында уйлаһам, борсоуға һалған һәм әрнеткән нәмәләр бик күп. Туған телебеҙҙең яҙмышы ла, йәш быуынды рухлы, тәртипле итеп тәрбиәләү мәсьәләһе лә борсой. Бигерәк тә милләттәштәрҙең мәҙәниәтебеҙгә, йыр-моңдарыбыҙға битарафлығын ҡабул итә алмайым.

*"Әҙәм түгел, хатта таштар миңә*
*Әйтә алмаҫ һин, тип, шапыртма.*
*Һынар өсөн бәлки, Хаҡ Тәғәлә*
*Моң ҡеүәтен биргән башҡортҡа"*, - тип яҙа Хәсән Назар бер шиғырында. Беҙҙең халыҡ борон-борондан бөтә тормош ауырлыҡтарын, ауыһыҙ яуҙарҙы ла күңелдәрен дәртләндерер, яҡты киләсәккә өмөт тыуҙырып, рухи көс бирер, йыуатыр йыр-моң менән күтәргән. Байрамдарҙа ла, яу ҡырында ла ҡулынан ҡурайын төшөрмәгән, шатлығын да, ҡайғыһын да йырға һалған. Бөгөн иһә, үҙ иркебеҙ менән ошо быуындан-быуынға тапшырыла килгән йыр-моңобоҙҙан баш тартабыҙ. Ауылға башҡорт халыҡ көйҙәрен яңғыратҡан, үҙебеҙҙең оҙон көйҙәрҙе башҡарған күпме йырсы килә - тамашасылар йыйылмай. Яңыраҡ ҡына ла "Караунһарай" музыкаль эстрада-фольклор төркөмө килгәйне, залда утыҙ-ҡырҡ кеше лә булманы. Башҡорт кешеһе моңға сарсап, башҡорт йырҙары яңғыраған концертҡа килер урынға һыпырылып башҡаларҙың йырын тыңларға китә. Бының сәбәбен белешһән: "Башҡортса аңламайым, тынлап өйрәнелмәгән, аҡса ла юҡ", - тигән яуап алаһың. Сәбәп телде белмәүҙә лә, аҡса юҡлыҡта ла түгел ул. Инглизсә йырҙарҙы бер һүҙен аңламаһа ла ихлас тыңлайҙар бит әле. Милләттәштәр үҙебеҙҙең мәҙәниәткә, рухи ҡиммәттәргә битараф. Сараларға һәм концерттарға эштән "Мотлаҡ барырға!" тигән ҡушыу буйынса ғына, йәки бушлай билет булһа ғына йөрөргә күнегеп барабыҙ.

Мостай Кәримдең һүҙҙәре иҫкә төшә: "Моң тынмаһа, ғаләм һәләк булмаҫ", - тигән ул. Башҡорт халҡының рухи донъяһы һәләк булмаһын тиһәк, сит милләттәрҙең йырын тыңлап моңланыуҙы туҡтатырға кәрәк. Моңһоҙ кеше - ғәмһеҙ, бер нәмәне лә хәстәрләмәгән әҙәм бит. Йыр-моң менән бергә милләттең киләсәге тураһындағы борсолоуҙарҙы, хәстәребеҙҙе лә юғалтып ҡуймайыҡ. Үҙебеҙ генә түгел, балаларҙы ла башҡортса концерттарға йөрөтәйек, бала саҡтан халыҡ йырҙарын тыңларға ғәҙәтләнеп үҫһендәр, бейергә һәм йырларға ла өйрәнһендәр. Был йәһәттән, үҙ тәжрибәмдән сығып әйтәм, балаһы кескәйҙән фольклор түңәрәгенә, йыр-бейеү түңәрәгенә йөрөтөү бик ярҙам итә. Бөтәһе лә артист булып китмәһә лә, күңеленә орлоҡ һалына.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Халыҡ медицинаһына ышанаһығыҙмы, уның дауалау ысулдары менән файҙаланаһығыҙмы?

**(Башы 1-се биттә).**

Ҡыҙыҡ өсөн шуныһын әйтеп китәйем әле: офтальмолог катарактанан миңә катахром тигән күҙ тамсыһы тамыҙырға ҡушҡайны. Элек 120 һум тирәһе торған ошо препарат хәҙер ... 380-390 һумға барып еткән! Уны алманым, үҙебеҙҙең әлеге халыҡ ысулын ҡуллана башланым. "ЗОЖ" гәзитендә катарактанан әллә күпме рецепт, күҙҙәр өсөн күнекмә төрҙәрен күсереп алғайным, кәрәге тейеп ҡалды бит. Шуларҙы ҡулланғаны бирле күҙҙәрем томаланмай, асылып ҡалғандай булды. Врачтарға көнөң ҡалмаһын инде, тип телләп кенә йөрөйөм, юғиһә, дарыу ҡиммәтләнеү етмәгән, түләүле медицина хеҙмәттәре лә торған һайын киңерәк ҡолас ала бара. Йүнле генә медицина ярҙамы алам, тиһәң, ирекһеҙҙән гәйепе һуңғы тиндәреңде сығарып һалырға ла мәжбүр итерҙәр.

***Рәйлә ИШКИЛДИНА, хаҡлы ялдағы уҡытыусы, Шамонино ауылы:*** Химик-биолог булараҡ, халыҡ дауалау алымдарына ихтирам һәм ышаныс менән ҡарайым, шул уҡ ваҡытта рәсми медицина ҡаҙаныштарын да инҡар итә алмайым. Дөрөҫөн әйткәндә, был ике өлкәне бер-береһенә ҡаршы ҡуйып ҡарау дөрөҫ түгел, сөнки улар бер-береһен тулыландырып, береһе икенсеһенә тейешле һөҙөмтәне бирергә булышлыҡ итә, тип әйтер инем. Халыҡ дауалау сараларынан тормошобоҙҙа иң беренсе урында торған дарыу үләндәре шифаһын файҙаланыуҙы алып ҡарайыҡ. Дарыу - беҙҙең аяҡ аҫтыбыҙҙа, тип ҡабатларға яратабыҙ. Ысынлап та, Башҡортостаныбыҙ ере шифалы үлән-сәскәләргә бик бай. Хатта ҡый үләндәре лә дарыу ул, уның рәтен, ҡәҙерен белгән кешегә, тик үҫемлектәрҙең файҙалы һәм зарарлы үҙенсәлектәрен өйрәнеп, дөрөҫ файҙаланырға ғына кәрәк. Һәр үҫемлек шифалы, тик ҡайһыларын сама белеп, рөхсәт ителгән дозала ғына ҡулланыу мотлаҡ, юғиһә, уның ағыулы матдәләре барлығын да онотмайыҡ. Мин үҙем, мәсәлән, үләндәр менән дауалаусы халыҡ табибы Рим Әхмәдовтың китаптарын уҡыйым. Баҡсамда мәтрүшкә, бәпембә, кесерткән, әрем һәм башҡа бик күп дарыу үләндәре үҫә, шуларҙы йыйып алып киптерәм. Үҙем Белорет районынан - унда ҡайтҡанда ла ҡупләп үләндәр, емешеләк йыйям. Сәләмәт тормош рәүешен үҙ күрәм: йога менән шөғөлләнәм, скандинавса йөрөйөм һ.б. Ә бына экстрасенстарға бигүк ышанып етмәйем. Бар инде уларҙың араһында ла көслө биополе эйәләре, энергетикаға һәләтле кешеләр, тик улар күп булһа, берәү-икәүҙер. Шуға күрә, шарлатандар ауына эләгеүҙән һаҡ булырға кәңәш итәм. Ундайҙар, гәҙиттә, бәйләнсек рекламалары, аҡсаға ҡомһоҙлоғо менән шундуҡ айырылып тора. Әгәр алдан уҡ ҙур сумма аҡса һорай икән, ундайҙарҙан ҡотолоу хәйерле. Әйткәндәй, бына яңыраҡ ҡына гәзиттәрҙә шундай бер хәл тураһында яҙып сыҡтылар: Өфө ҡалаһы Дим районында йәшәүсе пенсионер әбейҙе иғлан буйынса үҙен халыҡ табибы-маг тип таныштырыусы йәш ир ҡабул итә һәм, нәселегеҙҙә боҙом, сихыр бар, тип "диагноз" ҡуя. Унан таҙарындырыу өсөн ҙур ғына сумма аҡса кәрәклеген әйтә. "Таҙартыу йолаһы"нан һуң 50 меңде кеҫәһенә һалып, "маг" ғәйеп була, ә әбей сырхауын дауам итә...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!



**2017 йылдың икенсе яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылыу дауам итә. Республикабыҙҙың һәр районы-ҡалаһында, иң төпкөл ауылдарҙа ла 50665 индекслы "Киске Өфө"гә - 559 һум 56 тингә, 50673 индекслыһына (ойошмалар һәм предприятиелар өсөн) - 589 һум 56 тингә, ә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм инвалидтары өсөн - 447 һум 64 тингә яҙыла алаһығыҙ.**

● Уҡыусыларыбыҙ гәзитебеҙҙе, үҙе бүләк ул, тип ҡабул итһә лә, даими рәүештә дәртләндереү, бүләкләү саралары ла тәҡдим итеп торабыҙ икәнде беләһегеҙ. Апрелдә гәзиткә яҙылып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер, гәҙәттәгесә, матур китаптарға лайыҡ буласаҡ. **Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!**

● Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы **тыуған көнө менән ҡотлау** - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

● **Почтальондар иғтибарына!** Гәзит-журналдарҙың таралыуы һеҙҙең егәрлелек, ныҡышмалыҡ, һеҙҙең йүгереп йөрөүҙәр аша атҡарылғанын беләбеҙ һәм баһалайбыҙ. Хеҙмәтегеҙҙе һүҙ менән генә түгел, бүләктәребеҙ менән дә билдәләмәксебеҙ. Иң күп "Киске Өфө"гә яҙҙырыусы почта хеҙмәткәрҙәрен бүләктәр көтә.

**Туған телдәге баҫмалар тиражы - ул милләткә лә мәртәбә, абруй өҫтәй икәнен иҫтән сығармайыҡ.**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Хөкүмәте "Северный морской путь" банкы (СМП Банк) менән хеҙмәттәшлек тураһында килешеү төҙөнө. Документҡа республика Хөкүмәте Премьер-министры Рөстәм Мәрҙәнов һәм СМП Банкы идараһы президенты-рәйесе Александр Левковский ҡул ҡуйҙы. Өфөләге үҙәктә СМП банкының бөтә төбәк офистары өсөн хеҙмәттәр күрһәтеү ҡаралған. Ошо үҙәк проект ҡеүәтенә сыҡҡан осраҡта хеҙмәткәрҙәр һаны 500 кешегә тиклем артасаҡ. Әле унда 300 кеше эшләй.

✓Башҡортостанстат мәғлүмәте буйынса, АИ-92 һәм АИ-95 маркалы бензиндарға хаҡ артҡан. 3 апрелгә Өфөләге ягыулыҡ ҡойоу станцияларында АИ-92 бензинының бер литры 35,74 һумға еткән. Бер аҙна эсендә 0,2 процентҡа артҡан. Ошо ваҡыт эсендә АИ-95 маркалы бензин 0,1 процентҡа ҡиммәтләнгән - бер литры уртаса 38,86 һум. А-76 бензины һәм дизель ягыулығының хаҡы, 27 мартҡа ҡарата хаҡтар менән сағыштырғанда, үҙгәрешһеҙ ҡалған - бер литры 33,90 һәм 38,28 һум.

✓Иген етештереү күләме буйынса республика Рәсәйҙең төүге ун төбәге иҫәбенә инә. Былтыр Башҡортостан аграрийҙары интервенция фондына дөйөм суммаһы 564 миллион һумлыҡ 65 мең тоннанан ашыу иген һатҡан. "Россельхознадзор"ҙың республика буйынса идарлаһы мәғлүмәттәренә ярашлы, төп экспорт баҙарҙары - Нидерландтар, Белоруссия, Литва, Ҡаҙағстан һәм Үзбәкстан.

✓Өс айҙа Башҡортостан юлдарында дүрт бала һәләк булған, 65-е төрлө йәрәхәттәр алған. Ауыр эҙемтәләргә килтергән юл һәләкәттәренең төп сәбәптәре - ҡаршы һыҙатҡа сығыу, билдәләнгән тиҙлекте арттырыу, юғары тиҙлекле автомагистралдәрҙә сиратты көтөп тормау. Бәрелешеү (413 осраҡ) һәм йәйәүлеләрҙе тапатыу (235) аварияларҙың төп төрҙәре.

✓Рәсәй Хөкүмәте әүҙем туризм төрҙәрен ойоштороусыларға ун эш көнөнән дә һуңға ҡалмай Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының территориаль органдарына хәүеф менән бәйле хәрәкәт итеү маршруттары хаҡында мәғлүмәт еткереүҙе талап итә. Ул туризм өлкәһендә хеҙмәттәр күрһәтеүсе ойошмаларға һәм шәхси эшҡыуарҙарға, шулай уҡ турист төркөмдәренә, Рәсәй буйлап балиғ булмаған балаларҙы менән үҙ аллы сәйәхәт ҡылыусыларға ла ҡағыла.

***✓ Психологтар ҙа шуны билдәләй: үҙен бәхетле тойғандар һәр ваҡыт ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер, үҙен бәхетһеҙ тойған, күңел төшөнкөлөгө кисергән йәки асыулы, көнсөл кеше үҙенән башҡаны күрмәй.***



*АҠЫЛЛЫҒА - ИШАРА*

# БӘХЕТЛЕЛӘР КҮБЕРӘК БУЛҺЫН!



**Автобус туҡталышында ике таныш осрашты. Күрәһең, күптән күрешмәгәндәр - һәр береһе яңылығы менән бүлешергә ашыҡты. Берәүһе быйыл хаҡлы ялға сыҡҡан, икенсеһе күптән түгел генә ҡыҙын кейәүгә биргән.**

- Ҡыҙым бик яҡшы ергә төштө. Ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар уны алтынға күмде, кейәү мәһәргә кәләшенең муйынына бармаҡ ҡалынлыҡ сылбыр элде. Туй Өфөнөң иң затлы ресторандарының береһендә үтте, республиканың билдәле артистары алып барҙы, байрам унда ҡатнашҡандарҙы шаҡ ҡатырҙы... - никахта, туйҙа бирелгән затлы әйберҙәр, теләнгән теләктәр тураһында тәфсирләп һөйләргә ауыҙ асҡан танышының хәбәрен бүлеп, олорағы:

- Бөгөн кешене бай туй менән аптыратып буламы ни ул? Минеңсә, туйҙың бөтәһе лә ҙур тамаша һымаҡ үтә... - тине.

- Эйе шул. Хәҙер кеше бер-береһенән уҙҙырырға, ярышырға тырышып, балаларына туй үткәрә, - күптән түгелге тәьҫораттары менән ихлас бүлешергә йыйынған ҡатын тиҙ генә әңгәмәсеһенең фекерен йөпләне. - Кешене, ысынлап та, әлеге ваҡытта бер нәмә менән дә ғәжәпләндереп булмай. Бына ошо туҡталышта береһе йығылып ятһа, бер кем ярҙам ҡулы һуҙырға, хәлен белешергә ашыҡмаясаҡ. Ошонда ике автомобиль бәрелешһә, ярҙам итеү түгел, шаһитлыҡ ҡылмау өсөн кеше, киреһенсә, ҡасасаҡ ҡына. Иманым камил, һин дә тайыр инең, мин дә күрмәмеш-белмәмеш булыр инем. Хәҙер бөтә кеше вайымһыҙ, айырыуса, йәштәр ғәмһеҙ...

Һәр кемдең үҙ бизмәне тигәндәй, был ханымдың да бөтә нәмәне үҙ үлсәменә, тәрбиәһенә ҡарап үлсәгәне тойола. Бөгөн кеше сит кешенең бәләһенә күҙ йомоп ҡарай, тигәне менән бер ҙә килешкем килмәй. Ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер торған кешеләр бик күп арабыҙҙа. Яңыраҡ ял көнөндә саф һауала йөрөргә сыҡҡан инек. Тротуарға яҡын ғына ағасҡа һөйәлеп, оло йәштәге инәй, уның янында коляска менән йәш әсәй тора. Барып, хәлен һорашҡас, шул асыҡланды: хәле бөтөп йығылып барған инәйҙе күреп, йәш ҡатын ашығыс ярҙам саҡырған да, медицина ярҙамы килгәнен көтөп тора икән. Уның янында торғанда, эргәһендә кеше булыуын күрһәләр ҙә, олоһо ла, кесеһе лә туҡтап, эштең ниҙә икәнлеген һораны. Ун бишләгән үтеп барыусының бер-икеһе генә өндәшмәй үтеп китһә киткәндер, әммә күпселеге үҙ ярҙамын тәҡдим итте.

Бер нисә йыл элек, ысынлап та, кеше мөнәсәбәттәре араһында күрмәгәнгә, ишетмәгәнгә һалышып үтеп китеү күренеше күҙәтелгәндер. Үҙем дә, йәштәр оloларға урын бирмәй тип автобус эсендә ғауға сығарған, бәхәс-низағты күтәреп, хуплап алып китергә әҙер булған кешеләрҙе осратҡаным булды. Һуңғы йылдарҙа иһә автобуста оло кеше инһә, йәш-елкенсәк йәһәт кенә урынынан тора.

Әйткәндәй, үрҙәге ҡатын әйтмешләй, бөгөн кешене бай туй менән аптыратып булмаһа ла, изге эштәр, матур ҡылыҡтар менән ғәжәпләндереп була. Әлеге шул автобуста урын биреү миҫалын ғына алайыҡ. Ҡайһы саҡ береһе тороп, үҙенең урынын тәҡдим итһә, аптыраған кешеләр осрай, буш урынға ултырырға ҡыймай торалар хатта. Урын биреүсегә үҙен нисектер бурыслы итеп тойоп, уның ҡулындағы сумкаһын, төйөнсөгөн алырға, ултырғыстың ситенә генә ултырып, ингән кешегә эргәһенән урын бирергә тырышҡан булалар.

Яңыраҡ тротуар аша сыҡҡанда ҡар һалып бейегәйгән, өҫтәүенә, кеше күп йөрөгәнлектән боҙға әйләнгән урындан сыҡҡанда алда барған үҫмер егет үҙе һикереп кенә сыҡты ла, миңә ҡулын бирҙе. Уның ярҙамы менән был ҡаршылыҡты еңел генә үткәс, артымдан килгән өлкән йәштәге ҡатынға: "Бирегеҙ ҡулығыҙҙы, ярҙам итәйем", - тигәйнем, шул тиклем аптырап ҡараны, шулай ҙа ҡулын һуҙҙы. Артабан юлды бергә дауам иттек.

- Таныш булмаған кешенең ярҙам тәҡдим итеүенә өйрәнеп булмай әле, - тине ул көлөмһөрәп. - Хаҡлы ялға сыҡҡансы ҙур ҡалала йәшәнек. Унда һәр кем үҙе өсөн генә йәшәй, шуға өйрәнелгән. Бында ҡайтҡас, йәшерәктәрҙең йәмәғәт транспортында урын биреүенә аптырай инем. Бөгөн йәш егеттең - һеҙгә, һеҙҙең миңә ҡул биреүегеҙ, ысын мәғәнәһендә, ғәжәпкә һалды. Шундай заманда йәшәйбеҙ: таныш түгел кеше ярҙам тәҡдим итһә, нормаль күренеш түгел һымаҡ ҡабул итәбеҙ...

Минеңсә, игелек ҡылыу ҙур ҡалаға, бәләкәйенә ҡарамай. Кешенең тәрбиәлелеге, әҙәплелеге генә түгел, уның күңел торошо ла ҙур роль уйнай бында. Психологтар ҙа шуны билдәләй: үҙен бәхетле тойғандар һәр ваҡыт ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер, үҙен бәхетһеҙ тойған, күңел төшөнкөлөгө кисергән йәки асыулы, көнсөл кеше үҙенән башҡаны күрмәй.

Ярҙам итергә теләү - ул күңел талабы. Йыш ҡына киң мәғлүмәт сараларынан ауыр сиргә тарыған балаға йәки янғында зыян күргән ғаиләгә аяҡҡа баҫырға ярҙам иткәндәр тураһында ишетергә, күрергә тура килә. Бер ниндәй бүләк, аҡса өмөт итмәй, ярҙам иткәндәр йыш ҡына осрай бит. Кеше ҡайғыһына битараф булмағандар бар. Тимәк, бәхетлеләр бар арабыҙҙа һәм улар тағы ла күберәк булһын.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*




# БЕҘҘЕ ЛӘ ОНОТМАҒЫҘ!

**Беҙ, Силәбе башҡорттары, милләтебеҙ йәмәғәтселегенән, уның рухи-мәҙәни тормошонан ситтә йәшәһәк тә, үҙ тамырҙарыбыҙҙан яҙмаҫҡа, туған телебеҙ, тарихыбыҙ, мәҙәниәтебеҙҙән ситләшмәҫкә, Башҡортостан менән тығыҙ бәйләнештә йәшәргә тырышабыҙ. Был йәһәттән беҙгә Башҡортостанда нәшер ителеүсе матбуғат баҫмалары, радио-телевидение тапшырыуҙары ла булышлыҡ итә.**

Үкенескә күрә, Башҡортостан юлдаш телеканалында башҡортса тапшырыуҙар бик әҙ ҡалды. Һис аңламайбыҙ: ни өсөн кәметтеләр икән уларҙы? Халыҡтың күпселеге хәҙер Татарстан каналдарын ҡарарға мәжбүр. Был нимә, үҙенә күрә аҫтыртын сәйәсәтме әллә? Исмаһам, башҡортса гәзит-журнал уҡый алабыҙ әлегә, тик бына беҙҙең ихтыяжға яуап бирерҙәй баҫмаларыбыҙҙың береһе - "Киске Өфө" килеп етмәй Силәбегә. Әйтерһең дә, беҙ ут күршелә түгел, ә Африкала йәшәйбеҙ. Рәсәй каталогына инмәгән икән гәзитебеҙ. Теләһә ниндәй ҡаршылыҡтар кәртә булды инде ғүмер-ғүмергә беҙҙең юлыбыҙҙа. Ләкин беҙ юғалып ҡала торғандарҙан түгел. "Киске Өфө"нөң интернеттан онлайн вариантын булһа ла уҡырға тырышабыҙ. Хәлемдән килһә, мин был гәзитте Силәбенең һәр башҡортона таратып сығыр инем. Милли рухиәтебеҙ торошо, тарихыбыҙҙан быға са билдәһеҙ мәғлүмәттәр, ижтимағи-мәҙәни саралар, арҙаҡлы шәхестәребеҙ - заман башҡорттары хаҡында уҡып-белеп, яҡташтарым да ғорурланһын ине, тип хыялланам. Рәсәй каталогына ингән башҡорт баҫмаларын былай ҙа мөмкинлегем еткәнсә туғандарым, дуҫтарым, таныштарыма яҙҙырып таратам, юғиһә, үҙҙәре яҙылырға бер ҙә ынтылып тормайҙар - шуныһы йәнде әрнетә. Ә бына Башҡортостанда, хатта уның йөрәге Өфөлә йәшәп тә күпселек милләттәштәремдең, айырыуса яҙыусы, артист халҡының, милли матбуғат баҫмаларын алдырып уҡымауын белеп, бик ғәрләндем. Бындай битарафлыҡ ҡайҙан килә - аптырайым! Хәйер, үҙ ерендә, үҙ мөхитендә үҙ хазиналарыңдың ҡәҙере лә булмай, тигәндәрен ишеткәнем бар. Күрәһең, ысынлап та шулай, ләкин быныңменән бер ҙә килешке килмәй. Ситтә зарыҡҡандар ғына туған мөхит сығанаҡтарына һыуһап йәшәйҙер ул. Шуның өсөн дә Өфөгә килгән һайын "Киске Өфө" редакцияһында булып, эсте бушатҡансы һөйләшеп, яратҡан гәзитебеҙҙе ҡосаҡ-ҡосаҡ тейәп алып ҡайтып китәм. Башҡортса гәзит-журналдарыбыҙ мөхәррирҙәре иғтибарына шундай үтенесем дә бар: беҙҙең барлыҡты ла онотоп ебәрмәгеҙ, сит өлкәләрҙәге милләттәштәребеҙ янында йышыраҡ булып, беҙҙең хаҡта ла мәҡәләләр баҫтырып тороуығыҙҙы һорайбыҙ. Шул саҡта беҙ ҙә оло йортобоҙҙа үҙебеҙҙе үгәйһетелгән итеп тоймаҫ инек.

**Рабиға БИКБУЛАТОВА,**
**Силәбе өлкәһенең**
**"Ағинәйҙәр ҡоро" етәксеһе.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Туймазы ҡалаһында "Дуҫлыҡ әйләнбәйләне" Республика балалар хореография фестивале тамамланды. Конкурс ике йәш категорияһында: 9-12 һәм 13-16 йәштәрҙә уҙҙы. Ҡатнашыусылар башҡорт, эстон, фин, татар, украин, төрөк бейеүҙәрен башҡарҙы. Һөҙөмтәләр буйынса, кесе йәш төркөмө араһында Гран-приға - Туймазы ҡалаһының "Сәфәр" өлгөлө хореография ансамбле, өлкән йәш төркөмөндә Күгәрсен районының "Гөрләүек" өлгөлө халыҡ бейеүҙәре ансамбле лайыҡ булды.

✓Ағымдағы йылдың ике айында ғына Башҡортостанда 3,9 миллиард һумға түләүле медицина ярҙамы күрһәтелгән. Башҡортостанстаттың 1 мартҡа ҡарата мәғлүмәттәре буйынса, түләүле медицина хеҙмәттәренең күләме бер йылда 9,1 процентҡа артҡан. Әлеге ваҡытта республикала медицина хеҙмәттәре баҙарының 20 проценттан ашыуын шәхси компаниялар биләй. Түләүле доктор ҙа булыу пациентҡа уртаса 1,08 мең һумға төшә.

✓Баш ҡалала беренсе тапҡыр Йәштәр форумы үтте. Унда баш ҡала вуздарының 400 самаһы студенты ҡатнашты. Сараны тантаналы асыуҙа Өфө ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов форумдың һәләтле йәштәргә белемен күрһәтеү, үҙҙәренең пландарын һәм идеяларын тормошҡа ашырыу, уларға объектив баһа, ярҙам алыу өсөн уникаль мөмкинлек булыуын билдәләне.

✓Быйыл Башҡортостандан 400-гә яҡын мосолман хажға барасаҡ. Был уҙған йылға ҡарағанда 1,5 тапҡырға күберәк. Быйыл Башҡортостан мөфтиәте хажды ойоштороу менән шөғөлләнәсәк берҙәм оператор билдәләгән - "Урал Сервис". Диндарҙарға "эконом" һәм "стандарт" программалары тәҡдим ителә. "Стандарт" программаһы - 150 мең һумға, "эконом" 105 меңгә төшәсәк. Республика мосолмандары Диниә назараты янында хаж буйынса комитет эшләй. Телефондар: 8-903-311-80-53, 8-937-303-37-34. Ғибәҙәт ҡылыусылар Сәғүд Ғәрәбстанына август уртаһында юллана, хаж ҡылыу 1 сентябрҙә Ҡорбан байрамында тамамлана.

✓Башҡортостан Фәндәр академияһы һәм М.В. Ломоносов исемендәге Мәскәү дәүләт университеты Хеҙмәттәшлек тураһындағы килешеүгә ҡул ҡуясаҡ. Мәскәүҙә Башҡортостан Фәндәр академияһы президенты Әлфис Ғаязов менән Мәскәү дәүләт университеты ректоры Виктор Садовничийҙың осрашыуы барышында ошо хаҡта һөйләшеп килешелде.

**"Башинформ"дан.**

*✓ Парламентарий солоҡ умартасылығы сиктәрендә бал ҡорто ғаиләләренең иҫәбен алып барырға, шулай уҡ яһалма ҡыуышлы ағастарҙы йығыуҙы тыйырға тәҡдим итә.*



*ҠЫҪҠАСА*

# БАЙРАМ ЯҢЫСА ҮТӘСӘК

✓ Велосипедсылар көнө баш ҡала халҡы һәм ҡунаҡтары араһында иң популяр спорт сараһына әйләнде. Уны тағы ла ҡыҙыҡлыраҡ һәм байыраҡ итеү, ә фестивалде үткәреү үҙе уңайһыҙлыҡ тыуҙырмаһын өсөн ойоштороусылар уның форматын үҙгәртергә тәҡдим итә. Фестиваль "Open Streets" форматында ойоштороласаҡ. Барлығы 20 тематик зона булдырыласаҡ: спорт, бейеү, музыка, туҡланыу, тарихи реконструкция, фәнни, халыҡ-ара һ.б. Һәр зона эсенә 10-20 майҙансыҡ инәсәк. Йәмғеһе фестиваль территорияһында бушлай йога, урам музыканттары, театрҙар, ҡул эштәре йәрминкәләре, һүрәт төшөрөү, бейеү буйынса оҫталыҡ дәрестәре, экология майҙансыҡтары һ.б. эшләйәсәк.

✓ Капиталь ремонт тураһындағы республика законына яңы төҙәтеүҙәр индерелде. Хәҙер ул дөйөм йорт милкенең техник баһалау һәм башҡарыласаҡ эш төрө буйынса эш күләменең дефект ведомостарын төҙөү менән тулыландырыла. Был үҙгәрештәр планлаштырыу сифатын күтәрәсәк һәм ремонт сифатын яҡшыртасаҡ, тип күҙаллана. Дефект ведомостарын хәҙер идара итеүсе компаниялар түгел, ә махсус ойошмалар төҙөйәсәк. Бынан тыш, исемлеккә өҫкө ҡаттың түшәмен йылытыу буйынса ла эштәр индерелгән. Ул ремонттың айырым төрө булып тора.

✓ Республикала аҙыҡ-түлек кәрзине йәнә ҡиммәтләнде, тип хәбәр итә Башҡортостанстат. Статистарҙың мәғлүмәттәре буйынса, башлы һуғандың хаҡы башҡаларға ҡарағанда нығыраҡ - 3,9 процентҡа артҡан. 3 апрелдә уға уртаса ҡулланыу хаҡы - килограмы өсөн 24,16 һумға етте. Картуфтың хаҡы өс процентҡа артып, килограмы өсөн 23,70 һум тәшкил итә. Иң ҡиммәтләнгән өс аҙыҡ-түлек исемлегенә тауыҡ йомортҡаһы инә, уның бер тиҫтәһе уртаса 55,24 һум тора (27 марттағы хаҡтар кимәленә ҡарата +1,3 процент). Бер аҙнала төбәктә башҡаларҙан нығыраҡ шәкәр ҡомо осһоҙайған - килограмы өсөн 39,79 һум (-2,3 процент). Ҡарабойҙай ярмаһы 1,4 процентҡа арзанайған - килограмы 59,37 һум. Көнбағыш майының хаҡы 1,3 процентҡа кәмегән һәм 97,18 һум тәшкил итә.

✓ 2017 йылда Башҡортостанда Берҙәм дәүләт имтиханына 18 меңдән ашыу кеше теркәлгән. Рус теленән һәм математиканан имтихан тапшырыу мотлаҡ. Тәүге фәнде 18 мең самаһы уҡыусы һайлаған. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, һуңғыһы профилле һәм база кимәленә бүленгән. Республикала профилле кимәлде 13 меңдән ашыу ҡатнашыусы һайлаған. Башҡортостандың Мәғариф министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, һайлау буйынса предметтар араһында йәмғиәтте өйрәнеү ҙә бик популяр. Был дисциплинаны 8,5 меңдән ашыу кеше тапшыра. Артабан физика - алты меңгә яҡын, биология - дүрт меңдән ашыу, химия, тарих, информатика һәм мәғлүмәт-коммуникация технологиялары килә. 800 самаһы кеше ваҡытынан алдағы этапта (23 марттан 14 апрелгә тиклем) ҡатнашыу теләген белдергән. Уларҙың күбеһе - уҙған йылдарҙа мәктәп тамамлаусылар. Ошо осорҙа әс имтихан ҡабул итеү пункты эшләй, шуларҙың икәүһе - Өфөлә, берәүһе - Стәрлетамаҡта.

*ТӨРЛӨҺӨНӨН*

## МАЛ ТАБИПТАРЫ ҠОРО

**Өфөлә 19-21 апрелдә VII Халыҡ-ара ветеринарҙар конгресы уҙа. Уның эшендә ҡатнашыу өсөн Башҡортостанға 20-нән ашыу сит ил вәкиле, дөйөм алғанда, меңдән ашыу кеше киләсәк.**

Конгресс Евразия иҡтисади союзы киңлегендә ветеринария өлкәһендә төп сара булып иҫәпләнә. Дәүләттең әүҙем ярҙам күрһәтеүе һәм Рәсәйҙең Ауыл хужалығы министрлығы, Россельхознадзор, сит илдәрҙең һәм Бойондороҡһоҙ Дәүләттәр Берләшмәһенең баш дәүләт ветеринария инспекторҙарының ҡатнашыуы, шулай уҡ саҡырылған докладсыларҙың юғары профессиональ кимәле сараға мәртәбә өҫтәй. Халыҡ-ара ветеринарҙар конгресы - пленар сессиялар, конференциялар, семинарҙар, түңәрәк өҫтәлдәр, яңы ветеринария ҡорамалдарының, фармакология препараттарының һәм махсус әҙәбиәттең күргәҙмә экспозициялары уҙғарылған майҙансыҡ ул.

## КӘМЕҮГӘ КИТЕП БАРА



**2016 йылдың ғинуар-март айҙары менән сағыштырғанда Өфөлә янғындарҙа, производствола, юл-транспорт ваҡиғаларында, үҙ-үҙенә ҡул һалыу һөҙөмтәһендә һәм башҡа сәбәптәр арҡаһында һәләк булыусылар һаны 33 процентҡа кәмегән.**

Баш ҡала хакимиәтенең оператив кәңәшмәһендә яңғыраған мәғлүмәткә ярашлы, 2017 йылдың тәүге өс айында янғындарҙа һәләк булыусылар бер йыл элеккегә ҡарағанда 53 процентҡа аҙыраҡ булған. Суицидтар һаны 67 процентҡа, юл-транспорт ваҡиғаларында һәләк булыусылар һаны яртылаш кәмегән. Баш ҡалала бишенсе йыл инде юл фажиғәләрендә һәләк булыусылар һанының аҙайыуы күҙәтелә. Был күп осраҡта Эске эштәр министрлығы менән берлектә эш итеү, шулай уҡ инженер-техник һәм ойоштороу сараларына бәйле. Һүҙ, атап әйткәндә, светофор хужалығын яңыртыу, 50-гә яҡын юл сатын төҙәкләндереү, бер нисә юлда тиҙлек режимын үҙгәртеү, яңы йәйәүлеләр үткәүелен һәм юлдарҙа үлем осраҡтарын кәметеү өсөн күрелгән башҡа саралар хаҡында бара.

## СУСҠАЛАРҒА ХӘҮЕФ ЯНАЙ



**Рәсәй ауыл хужалығын күҙәтеү хеҙмәте 2017 йылда Башҡортостанға Африка сусҡа тағуны инеүен фаразлай.**

Ошо хаҡта, Рәсәй ауыл хужалығын күҙәтеү хеҙмәте башлығы урынбаҫары Николай Власовҡа һылтанып, ТАСС агентлығы хәбәр итә. Күҙәтеү хеҙмәте вәкиле 2017 йылда Рәсәй биләмәһе буйлап Африка сусҡа тағуны таралыу фараздары хаҡында һөйләй. "Быйыл вирустың Мордовия, Удмуртия, Мари Иле, Башҡортостан, Татарстан, Ульяновск, Кострома һәм Тверь өлкәләренә инеүен фаразлайбыҙ, шуға күрә әҙерләнергә кәрәк", - тип билдәләне ул. Яңыраҡ Африка сусҡа тағуны Иркутск өлкәһендә табылған. Африка сусҡа тағуны Рәсәйҙә сусҡасылыҡты үҫтереүгә хәүеф менән янай. Ун йыл эсендә 46 төбәктә меңдән ашыу сусҡа тағуны осрағы теркәлгән. Илдең ауыл хужалығы яҡынса миллион баш сусҡа юғалтҡан, зыян биш миллиард һумға еткән.

## ҺАҠЛАЙЫҠ!



**Башҡортостан халҡы Бөрйән бал ҡортон һаҡлау буйынса үҙҙәренең фекерен белдерә ала.**

Закон проекты йәмәғәтселек тикшереүенә сығарылған. "Умартасылыҡ тураһында"ғы республика законына үҙгәрештәр индерергә тәҡдим ителә. Милли брендты - Бөрйән бал ҡортон һаҡлау буйынса өҫтәмә сараларҙы Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы депутаты Руфина Шаһапова әҙерләгән. Парламентарий солоҡ умартасылығы сиктәрендә бал ҡорто ғаиләләренең иҫәбен алып барырға, шулай уҡ яһалма ҡыуышлы ағастарҙы йығыуҙы тыйырға тәҡдим итә. Ҡара төҫтәге урман бал ҡорто Башҡортостандың таулы-урманлы ерҙәрендә үрсетеү өсөн бал ҡорттарының өҫтөнлөклө һәм тәбиғи тоҡомо һанала. "Бөрйән солоҡ ҡорто - ҡара төҫтәге урман бал ҡорто төрөнөң һаҡланып ҡалған тәбиғи популяцияһының береһе. Әҙерләнгән закон проекты Бөрйән бал ҡортоноң йәшәгән урындарын һаҡлауға һәм башҡалар менән ҡушылыуҙарын кәметеүгә йүнәлтелгән", - тип аңлатма бирҙе закон проекты авторы.

## ҺЫУ СИФАТЫ - ИҒТИБАР ҮҘӘГЕНДӘ



**Яҙғы ташҡын осоронда граждандарҙы сифатлы эсәр һыу менән тәьмин итеү ҙур әһәмиәткә эйә.**

Был йәһәттән, "Уфаводоканал" МУП-ы объекттары февралдә үк әҙерлек эштәрен башланы. Бөгөнгә Өфө һыу алыу ҡоролмаларының скважиналары тикшерелеп, герметизациялауға әҙер. Һыуҙы таҙартыу һәм зарарһыҙландырыу системалары, реагенттар ҙа әҙерләнгән. Бынан тыш, һыу һәм канализация торбаларының техник торошо тикшерелгән һәм 31 мартҡа ҡарата әҙерлек 100 процент тәшкил итә. Ташҡын ваҡытында тикшереү өсөн алынған һыу нөктәләре 25-тән 45-кә етәсәк. Уның даимилығы ла башҡа ваҡыттағынан 3 тапҡырға артасаҡ. Үҙәк лабораторияла 300 төрлө анализ алына. Фенол, нефть продукттары, хлорланған углеводородтар төп иғтибар үҙәгендә буласаҡ, улар көнөнә бер нисә нөктәлә көн һайын тикшереләсәк.

## ҮҪМЕРҘӘР СУИЦИДЫН ПРОФИЛАКТИКАЛАУ



**Өфө ошо йүнәлештә яңы технологиялар индереү майҙансығы итеп һайланған.**

Балиғ булмағандарҙың үҙ-үҙенә ҡул һалырға тырышыуының төп сәбәбе булып ата-әсәләр менән низағ, социумда үҙен таба алмау, икенсе енес вәкилдәре менән аралашыуҙа килеп тыуған проблемалар тора. Бынан тыш, ошо аҙымға этәргән мәғлүмәт сараларының, төрлө сайттарҙың барлыҡҡа килеүе лә ҙур роль уйнай. Былтыр ҡаланың социаль-психологик ярҙам үҙәктәренә суицидаль проблема менән 148 кеше, шул иҫәптән 88 бала һәм үҫмер мөрәжәғәт иткән. Шуға бәйле баш ҡалала был күренеште профилактикалау буйынса яңы проект әҙерләнә. Социаль-психологик үҙәк белгестәре өсөн үҫмерҙәрҙең суицидаль тәртибе билдәләрен асыҡлау буйынса семинар үткәрелгән дә инде. Шулай уҡ балиғ булмағандар араһында суицид күренештәрен профилактикалау системаһын үҫтереү буйынса алгоритм эшләү темаһына проект семинары ла уҙғарылған. Артабан был алгоритм Өфө мәктәптәренә индереләсәк.

**"Башинформ"**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөлә ит йәрминкәләре миҙгеле тамамланды. Йыл башынан алып республиканың баш ҡалаһында ял көндәрендә бөтәһе 32 йәрминкә уҙғарылды. Йәрминкәгә Башҡортостандың 32 районынан 1600-ҙән ашыу машина килде. 1800-ҙән күберәк сауҙа нөктәһе ойошторолдо. Ауыл халҡы Өфөгә 58 миллион һумлыҡ 201 тоннанан ашыу ит, 24 тонна ҡош ите һәм башҡа ит ризыҡтары алып килде.

✓Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары 2016 йылдағы килеме, сығымы, милке һәм мөлкәт характерындағы йөкләмәләре хаҡында мәғлүмәт бирҙе. Дәүләт Йыйылышы Рәйесе Константин Толкачев һүҙҙәренсә, ай дауамында депутаттар аныҡ мәғлүмәттәр күрһәтергә хоҡуҡлы. 1 июнгә тиклем ошо мәғлүмәт закондар сығарыу органының рәсми сайтына урынлаштырыла.

✓Башҡортостандың юғары уҡыу йорттары һәм ғилми учреждениеларындағы йәш ғалимдарҙы иң яҡшы ғилми эш конкурсында ҡатнашырға саҡыралар. Конкурс эштәре 1 майға тиклем ҡабул ителә. Конкурс тураһында положение менән bash.rosmu.ru сайтында танышырға мөмкин.

✓2016 йыл йомғаҡтары буйынса Рәсәйҙә тулайым ауыл хужалығы продукцияһы күләме 165,7 миллиард һум тәшкил иткән. Шуларҙың 165724,6 миллион һумы Башҡортостанға тура килә. Ошо күрһәткес буйынса Башҡортостан - етенсе, Волга буйы федераль округы төбәктәре араһында икенсе урында тора. Эре мөгөҙлө мал итен етештереү буйынса төбәк Рәсәйҙә - етенсе һәм Волга буйы федераль округында икенсе урынды һаҡлап ҡалды.

✓2016 йыл йомғаҡтары буйынса Башҡортостан теплицала йәшелсә үҫтереү күләме буйынса илдә икенсе урынды алды. Рәсәйҙә теплицала йәшелсәләр үҫтереү буйынса Краснодар крайы әүәлгесә алда бара - 2016 йылда 88 мең тонна. Икенсе урында - Башҡортостан - 66,5 мең тонна. Ҡарасәй-Черкес Республикаһы өсөнсө урында килә - 45,8 мең тонна. Дүртенселә Ставрополь крайы - 42,4 мең тонна. Ябыҡ тупраҡта йәшелсә үҫтереү буйынса тәүге бишәү исемлеген Татарстан тамамлай - 37,7 мең тонна. Былтыр ошо биш төбәк бергәләп 280 мең тоннанан ашыу теплица йәшелсәләре йыйған.

ЙӨҘ ЙЫЛЛЫҠҠА - ЙӨҘ ОБЪЕКТ

# ХӘЙБУЛЛАЛА ЛА...

## төҙөлөштәр гөрләр, тибеҙ



**Башҡортостан автономияһы ойошторолоуҙың 100 йыллығын лайыҡлы билдәләү буйынса Хәйбулла районында әҙерлек, ойоштороу эштәре күптән башланды.**

Республика башлығының "100 йыллыҡҡа - 100 объект" тип тәҡдим иткән инициативаһын күтәреп алып, райондаштар ойоштороу комитетына 20-нән ашыу тәҡдим индерҙе. Иң күләмле объекттар араһынан район үҙәге Аҡъярҙа яңы Мәҙәниәт йорто, физкультура-һауыҡтырыу комплексы янында бассейн, стадион төҙөү планлаштырыла. Башҡа спорт объекттарына килгәндә, таусылар төйәге Бүребайҙа физкультура-һауыҡтырыу комплексын төҙөү ҙә иғтибар үҙәгендә.

Шулай уҡ районыбыҙ ауыл хужалығы продукцияһын күпләп етештереүсе булараҡ, иген культураларын эшкәртеү предприятиеһын төҙөү, фермер хужалыҡтары базаһында ауыл хужалығы кооперативын ойоштороу, Өфө, Садовый ауылдарында балалар баҡсаһы төҙөү, "Һаҡмар" балалар шифаханаһында һауыҡтырыу-ял үҙәге асыу ҙа проектҡа индерелгән.

Сараларға килгәндә, "Бөйөк дала" IV Асыҡ республика башҡорт рок-фестивален, Һаҡмар-Наҙарғол ауылында "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар" байрамын ойоштороу ҙа ошо матур юбилейға арнала.

Объектарҙы сафҡа индереү йәки уҙғарыу өсөн финанс сығымдары төрлө сығанаҡтарҙан бүленәсәк.

**Сәлимә ҒАФАРОВА.**
**Хәйбулла районы.**

# КАВАЛЕРИЯ МУЗЕЙЫ...

## Ҡырмыҫҡалыла буласаҡ



**Башҡортостанда яңы мәҙәни объект - Рәсәйҙә беренсе Кавалерия музейы төҙөү инициативаһы БР Мәҙәниәт министрлығы тарафынан хуплау таба.**

Учреждение вәкилдәре фекеренсә, киләсәктә ул туристар өсөн мотлаҡ маршрутка әйләнәсәк. Иң яҡшы концепцияға конкурс октябрҙә тамамланған. Унда "Кивеста" Мәскәү компанияһы проекты еңеп сыҡҡан. "Рәсәйҙең данлы улдары" республика фестивале барышында буласаҡ музейҙың концепцияһы күрһәтелә. Проект авторҙары уйынса, унның художество композицияһына Башҡортостандың тәбиғәте һәм мәҙәниәте берлеге нигеҙ итеп алына. Был үҙенсәлек бинаны төҙөгәндә файҙаланыласаҡ. Концепция биш архетипҡа: арка, эйәр, кавалерия ҡылысы, көтөүлек һәм манежға нигеҙләнә. Уны төҙөүҙә кирбес, ағас һәм быяла ҡулланыласаҡ.

Ҡырмыҫҡалы районында урынлашасаҡ яңы музей "100 йыллыҡҡа - 100 объект" акцияһы сиктәрендә тормошҡа ашырыласаҡ һәм 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының легендар командиры Миңлеғәле Шаймуратов исемен йөрөтәсәк.

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

БЕЛЕМ УСАҒЫ

# БАЛАЛАР БАҠСАҺЫНА...

## күпме түләргә?



**Башҡортостан мәғариф министры Гөлназ Шафиҡова "Рәсәй" медиа-үҙәгендә үткән матбуғат конференцияһында ҡатнашты һәм журналистарҙың һорауҙарына яуап бирҙе.**

Республикала балалар баҡсаһы өсөн түләүҙәр, ниндәй ғаиләләргә компенсация һаҡланыуы тураһында һорауҙар күп булды. Билдәле булыуынса, элек балалар баҡсаһы өсөн субсидия (тәүге бала өсөн - 20 процент, икенсегә - 50 процент, өсөнсөгә - 70) менән төбәктең бөтә халҡы ла файҙалана алһа, 1 марттан уны ысынлап мохтаждар ғына аласаҡ. Шул уҡ ваҡытта адреслылыҡ принцибынан сығып, социаль ярҙам да күрһәтеләсәк. Гөлназ Шафиҡова әйтеүенсә, 20, 50 һәм 70 процентлы компенсация тороп ҡала, уға ата-әсәләрҙең береһе дәғүә итә. Тик ғаилә килеме һәр кемгә 1,5 тапҡыр йәшәү минимумы күләменән артмаҫҡа тейеш. Бөгөн республикала йәшәү минимумы 8323 һум тәшкил итә. Тимәк, һәр ғаилә ағзаһына 12 485 һум тура килмәһә, бындай ғаиләләр компенсацияға дәғүә итә ала. "Был компенсацияны алыу өсөн 1 майға ҡәҙәре 1,5 тапҡыр йәшәү минимумы күләменән әҙерәк килем алыуығыҙҙы раҫларға, йәғни тейешле белешмә тапшырырға кәрәк, - тип аңлатты республиканың мәғариф министры. - Беҙҙең яҡынса фараздар буйынса, бөгөнгә республикала тик 7-8 процент ғаилә генә ошо ташламаны алмаясаҡ. Муниципаль райондарҙа ата-әсәләргә белешмә алыу буйынса тотош эш механизмын һәм алгоритмын аңлатырға тейештәр".

Билдәләнеүенсә, бөгөнгө көнгә республикала 1,5 йәштән ете йәшкә тиклемге мәктәпкәсә балаларҙың 89 проценты балалар баҡсаһына йөрөй. Шул уҡ ваҡытта балалар баҡсаһына сиратта 1,5 йәштән өс йәшкәсә 48 меңләп бала тора. 2025 йылға был мәсьәлә яңы алмаш формаларын индереү һәм төҙөлөш иҫәбенә хәл ителәсәк, тип вәғәҙәләне ведомство башлығы.

Осрашыу барышында шулай уҡ биш көнлөк уҡытыу индереү мәсьәләһе лә күтәрелде. "Өфө хаҡында һүҙ алып барғанда, был мәсьәләне райондар хакимиәттәре хәл итә", - тип аңлатма бирҙе ведомство башлығы. Баш ҡаланың Мәғариф идаралығы етәксеһе Елена Хаффазова һүҙҙәренсә, башланғыс мәктәптә биш көнлөк уҡытыу рөхсәт ителә. "Бөгөн беҙ башланғыс класс уҡыусылары тураһында ғына һөйләйбеҙ, сөнки 23-26 сәғәтлек уҡыу планы биш көнгә һыя", - тип асыҡлык индерҙе Елена Хаффазова. Унын фекеренсә, урта һәм өлкән звеноларҙа алты көнлөк уҡытыуҙа ҡалыу яҡшыраҡ. "Әгәр СанПин мәсьәләһенән сығып ҡарағанда, 5-11 кластарҙың уҡыу планындағы 34 сәғәтте биш көнгә һыйҙыра алмайбыҙ, - тине Елена Хаффазова. - Шуға күрә беҙ ата-әсәләрҙең балаларҙы биш көнлөк уҡытыуға күсереү үтенесен кире ҡаға алабыҙ, сөнки санитар ҡағиҙәләр һәм нормалар баланың бер көнлөк йөкләмәһен уҡыу сәғәттәре буйынса билдәләй".

**Эльмира САБИРОВА.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ҠАРТТАРҒА - ШАТЛЫҠ



**Апрелдән пенсиялар арттырылған күләмдә таратыла башланы, тип хәбәр иттеләр Пенсия фондының Башҡортостан буйынса бүлексәһенең матбуғат хеҙмәтендә.**

Дәүләт пенсия тәьминәте буйынса социаль пенсиялар 1 апрелдән 1,5 процентҡа артты. Һөҙөмтәлә Башҡортостанда социаль пенсияларҙың уртаса күләме 8797 һум, йәғни пенсионерҙарҙың йәшәү минимумына 129 процент тәшкил итте. Инвалид балаларға һәм бала саҡтан I төркөм инвалидтарына социаль пенсия күләме 13 894 һумға етте. Бер үк ваҡытта башҡа түләүҙәр ҙә күтәрелде, уларҙың артыу дәүмәле социаль пенсияларҙың үҫешенә бәйле. Эшләмәгән пенсионерҙарҙың страховка пенсиялары 1 апрелдән 0,38 процентҡа индексацияланды. 1 февралдә 5,4 процентҡа индексацияләүҙы иҫәпкә алып, страховка пенсияларын дөйөм индексациялау күләме 2017 йылда 5,8 процент тәшкил итә. Һөҙөмтәлә 1 апрелдән Башҡортостанда ҡартлыҡ буйынса страховка пенсияһының уртаса күләме 12 989 һумға етте (пенсионерҙарҙың йәшәү минимумына 190,4 процент). 1 апрелдән шәхси пенсия коэффициенты хаҡы (пенсия балы) 78,58 һумға тиң. Республикағы 951,8 мең хаҡлы ялдағы кеше, шул иҫәптән 97,5 мең социаль пенсия алыусы, пенсияны арттырылған күләмдә аласаҡ. Пенсияны арттырып түләү өсөн ай һайын өҫтәмә рәүештә 38,2 миллион һум аҡса талап ителә, тип билдәләнеләр Пенсия фондының Башҡортостан буйынса бүлексәһендә.

# СТУДЕНТТАРҒА - ТАШЛАМА



**Республикала 2017 йылдың 1 ғинуарынан уҡыусылар һәм көндөҙгө бүлектә белем алған студенттар өсөн электричкала йөрөүгә 50 процент ташлама ҡаралған, тип хәтергә төшөрәләр Башҡортостан ҡала яңы пассажирҙар компанияһында.**

Льготалы категорияға шулай уҡ урта махсус белем биреү йорттары, мәктәп-интернат һәм уларға тиңләштерелгән уҡытыу ойошмалары уҡыусылары ҡарай. Ташлама 15 июнгә ҡәҙәр үҙ көсөндә, артабан 1 сентябрҙән 31 декабргә тиклем йәнә унын менән ҡулланырға мөмкин. Ташламаны студент, уҡыусы билеттарын йәки мәктәптән белешмә күрһәтеп алырға мөмкин. Мәҫәлән: "Толпар" транспорт проектының "Дим" станцияһынан "Шаҡша"ға ҡәҙәр Өфөнөң ҡала электричкаһында юл йөрөү хаҡы ни бары 9,5 һумға төшәсәк. Транспорт ойошмаһында аңлатыуҙарынса, дөйөм алғанда, пассажирҙарҙың һәр унынсыһы - уҡыусы.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Сихәтле сироп

❖ Эмаль һауытҡа 1 литр һөт, 10 бөртөк инжир һалып, талғын утта 30 минут ҡайнатырға һәм төрөп, 2 сәғәт тонәтергә. Сәғәт һайын 1-әр бешкән инжир ашарға, ә һөттө эҫе килеш ярты стаканлап көнөнә 4 мәртәбә эсергә. Был ҡоро йүтәлдә бөтөрә, бигерәк тә бронхит сирлеләргә ҙур дауа.

❖ Инжир булмаһа, башлы һуғанды ла файҙаланып була. 1 ҙур башлы һуғанды әрсергә, турарға, 2 стакан һөт ҡушырға һәм 15 минут утта тоторға (һуған йомшарға). Һуғанды иҙеп, бер аҙ һөт ҡушып 2 сәғәт һайын 2 ҡалаҡ эсергә.

### Аяҡтар шешкәндә

❖ Ҡайын япраҡтары, бөрөләре тәнәтмәһе файҙалы. 1:5 өләш алып, тәнәтмә яһарға һәм көнөнә 3-4 мәртәбә 1 сәғәт дауамында яртышар стакан эсергә.

❖ Йүкә япраҡтары һәм ҡыр ҡарағайы (хвощ полевой) төнәтмәһе лә килешә. 1,5 ҡалаҡ үлән ҡатнашмаһына 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, термоста ярты сәғәт төнәтергә. Йәйләп ҡына көнө буйы эсеп бөтөргә.

### Ҡолаҡ шаулағанда

❖ Аспиринды һирәк ҡулланырға, сөнки ул ҡолаҡ шаулауҙы көсәйтә генә.

❖ Ҡолаҡ шаулауын туктатыу өсөн йоҡларға ятыр алдынан һыу аҡҡан тауышын тыңларға.

❖ 6 өләш кишер һуты, 3 өләш сөгөлдөр һуты, 4 өләш ҡыяр һутын бергә ҡушып эсеү ҙә ҙур файҙа бирә.

❖ Витаминдар ҡабул итергә.

❖ Йәшелсә, еләк-емеш һуты эсергә.

### Яран гөл

❖ Киҫелгән, тырналған урынға япрағын йомшартып япһаң, яра тиҙ уңала.

❖ Тимерәү булғанда япраҡтарҙың һутын тимерәүле ергә көнөнә 3-4 мәртәбә һөртергә кәрәк, һөҙөмтәлә тимерәү әкренләп бөтә.

❖ Өлкән кеше насар ишетә, ғөмүмән, насар ишетеүселәр яран гөлөн һабағы менән ҡолаҡ эсендә бер аҙ тотһа, хәлдәре яҡшыра.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *Үҙ-үҙеңде аҡлау өсөн был бик уңай позиция. Сөнки мин яҡшымын, изге күңеллемен, тик мине уратып алған кешеләр үтә насар, мине аңламайҙар һәм ҡәҙерләмәйҙәр шул, тип уйлай бындай кешеләр.*



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

## Боронғо ғәрәптәр тураһында ҡыҫҡаса белешмә

Ғәрәп ярымутрауындағы иң боронғо кешеләр игенселек менән шөғөлләнгән. Улар ярымутрауҙың көньяғында һәм айырым оазистарҙа йәшәгән. Сөнки ул замандарҙа далалар менән сүллектәрҙә тик күсмә тормош алып барған халыҡтар ғына йәшәй алған. Күсмә тормош кешенән ауыр хеҙмәт түгел, ә ҙур осталыҡ талап иткән һәм игенселеккә ҡарағанда һөҙөмтәлерәк булған. Был иһә, күсмә халыҡтарҙың көсөн арттырған һәм улар йыш ҡына игенселек менән шөғөлләнгән халыҡтарҙы еңә килгән.

Ғәрәптәрҙең ата-бабалары, Евфрат йылғаһы буйҙарынан килеп, урындағы халыҡты буйһондора, ярымутрауҙың дала менән сүллектәрен үҙләштерә. Улар үҙҙәре менән күсмә тормошҡа яраҡлашҡан мал-тыуар: һарыҡ, кәзә һәм, иң мөһиме, дөйә эйәртә. Дөйә һыуһыҙ бик күп ваҡыт түҙә ала, өҫтәүенә, һөт бирә. Ә һөт кешегә һыуҙы алыштыра ала.

Ғәрәп ярымутрауы һәр ваҡыт юғары мәҙәниәтле илдәр уртаһында була: Боронғо Мысыр һәм Вавилон, Хет иле һәм Палестина, Эллада һәм Фарсы дәүләте - ғәрәптәр был илдәргә барып йөрөй: сауҙагәрҙәр ҙә, ялланған яугирҙар ҙа. Баҫып инеп, был илдәрҙе талаған саҡтар ҙа булғылап торған. Күрше дәүләттәрҙең ғәскәрҙәре лә ғәрәптәргә һөжүм иткән. Ярымутрауҙың ситендәге ерҙәрҙе баҫып алған, тик урта тирәһендә береһе лә оҙаҡ сыҙай алмаған.

Ғәрәп ырыуҙары далаларҙа малсылыҡ менән шөғөлләнгән, оазистарҙа финик ағасы үҫтергән, шулай уҡ, бойҙай менән арпа сәскән.

Ғәрәп ерҙәре аша карауан юлдары үткән. Һуғыш арҡаһында Бөйөк ебәк юлда хәрәкәт өҙөлөп торған саҡта ғәрәп ерҙәре аша үткән карауан юлдары айырыуса йәнләнгән. Тора-бара был юлдар буйында ауылдар барлыҡҡа килә башлаған. Был ауылдарҙа йәшәүселәр сауҙагәрҙәрҙән үҙ ерҙәре аша үткән өсөн һалым алған, йән, тире, мал-тыуар менән һатыу иткән. Ҡайһы берҙәре ҡалаларға күсеп, үҙҙәре лә сауҙа менән ныҡлап шөғөлләнә башлаған.

Күсмә халыҡтар ырыу ҡоролошон һаҡлай килгән. Ырыуҙар араларға бүленгән. Иң ҙур һәм ҡеүәтле араның башлығы ғәҙәттә ырыу башлығы булып торған. Ул шәйех тип аталған. Бөтөн мөһим мәсьәләләрҙе ул ырыу аҡһаҡалдары менән хәл иткән. Шулай уҡ башҡа ырыуҙар менән мөнәсәбәтте яйға һалған, һуғыш ваҡытында етәкселек итеп, табыштың дүрттән бер өлөшөн үҙенә алған. Абруйлы ҡунаҡтарҙы ла шәйех үҙе ҡабул итергә тейеш булған. Сөнки ҡунаҡсыллыҡ ҡанундары бик изге һаналған. Ғәрәптәр, башҡа күсмә халыҡтар кеүек уҡ, ҡунаҡсыллыҡ менән дан тотҡан. Ҡунаҡ кеше ҡарымта ҡанундарынан да юғары торған, ул, хужаның тәйәгенә инеп, үҙен ҡунаҡ тип иғлан итеү менән, хатта ҡан дошмандары ла уға ҡағылмаған. Ғөмүмән, ҡунаҡ өсөн һуңғы һарыҡ йә дөйә лә йәл булмаған. Ә ҡунаҡҡа тейешенсә хөрмәт күрһәтмәү бик ҙур хурлыҡ һаналған. Ҡунаҡ - донъя хәлдәре тураһында хәбәр килтереүсе. Ғөмүмән, ҡунаҡҡа тейешле кимәлдә хөрмәт күрһәтеү ғәрәптәр өсөн изге бурыс һаналған.

**(Дауамы бар).**

ПСИХОЛОГ ЫҢҒАЙҒА КӨЙЛӘЙ

# БАЛАЛАР ҺӘМ...

## асарбаҡ әсәләр

**Ҡаршымдағы ултырғыста башын эйеп, ике ҡулы менән битен ҡаплап, бер йәш кенә ҡыҙ һыҡтап-һыҡтап илай. Балаҡайҙың кисерештәрен йөрәгем өҙөлөп, бөтә күңелем менән аңлаһам да, көсһеҙлөгөмдән бер һүҙ ҙә өндәшә алмай тешләнәм. Йә уның йөрәгенә үтеп инерҙәй һүҙҙәр ҙә килмәй бит әле кәрәк саҡта! Илай торғас, баланың еҙ сәстәре туҙрап бөттө, уларҙы өҫкә һыпырған һайын, башын күтәреп, миңә күҙ ташлап ала ла, артабан һыҡтай. "Ни өсөн мин? Ни өсөн миңә төштө был өлөш? Мин кем алдында ғәйеплемен һуң?"**



Их, балаҡай.... Нисек кенә итеп ярҙам итәйем һуң һиңә? Ҡайһылайтып ҡына күңел һыҙлаңыуҙарыңды баҫайым икән? Аптырағас, эргәһенә килеп, арҡаһынан һөйөп-һыйпап, тынысландырырға маташтым. Берәй йыуатырлыҡ һүҙ әйтәйем тиһәм, үҙемдең дә йәштәр түгелергә генә тора бит әле, йәнемде үртәп! Ошо мәлдә был ҡыҙҙың күҙ йәштәренең сәбәпсеһе ҡулыма килеп эләкһәме! Ете кеше лә тота алмаҫ ине мине, Аллам һаҡлаһын! Мин уны... мин унымы... Мин уны нимә эшләтә алырмын икән, ә? Тормоштоң ҡайһы бер хәлдәрендә үҙеңдең көсһеҙлөгөңдө аңлауҙан да ауырыраҡ нәмә юҡтыр ул. Ярай, табырмын ул кешене. Һөйләшермен. Аңлатырмын. Иламын. Инәлермен. Ялбарырмын.... Тағы нимә эшләй алам мин, үҙ балаһынан баш тартып, рәхәтләнеп "шәхси" тормошон рәткә һалып йөрөгән ҡатын алдында? Закон тарафынан бөтәһе лә эшләнгән: ҡатын үҙ ҡыҙына ҡарата әсәлек хоҡуғынан мәхрүм ителгән. Балаға ҡарата булған бөтә бурыстарынан азат ителгән. Нимә кейер икән, тамағы туҡмы-түгелме, сәләмәтме минең алтыным, тип борсолорға ла кәрәкмәй. Нилектәндер тормошо аҫҡа тәгәрәгән мәлдә туҡтай алмаған ул. Бәлки, шуғалыр ҙа, ул балаһының ғүмерен, киләсәген ауыу өсөн бер бөртөк ҡыҙын кеше тупһаһында ҡалдырып киткәндер, ә? Үҙе менән бергә һөйрәтеп йөрөү ҡурҡыныс икәнен аңлағандыр ҙа, ә? Араҡы ҡолона әйләнеп, үҙенең әсә генә түгел, ә ҡатын икәнен күптән онотҡан әҙәм аҡтығын аҡларға йыйынмайым мин, йәмәғәт. Әсә үҙ балаһынан баш тартһын өсөн ҡот оскос сәбәптәр генә булыуы мөмкин тип фаразлайым. Улай тиһәң, күпме күрәбеҙ: аяҡ-ҡулдары булмаған инвалид ҡатындар ҙа үҙ балаларын ситкә типмәй, наҙлап, һөйөп үҫтерә. "Яратмағас, ниңә мине был донъяға тыуҙырған ул? Нишләп тыуғас та ҡалдырып китмәгән?" Йөрәк түренән әрнеп сыҡҡан ошо һүҙҙәргә мин яуап таба алмайым.

Зилә - ҡаршымдағы ҡыҙҙың исеме. Уның бөгөнгө көндә тормошо матур: ҡыҙым, балам, матурым, аҡыллым тип өҙөлөп торған яҡындары бар. Илауының сәбәбе: биологик әсәһенең ҡайһы берҙә шылтыратып рәнйетеүе, ҡарғыш һүҙҙәре яуҙырыуы. Әле бына, Яңы йыл байрамдарынан һуң, таныш түгел номер аша шылтыратып, балаһының "хәлен" белешә башлай ул. "Бөтәһе лә яҡшы. Уҡыйым. Атаәсәйемдәр мине ярата", - тип яуап бирғән Зилә. Быны ишеткән иҫерек ҡатын үҙенең тормошондағы насарлыҡтарҙа балаһын ғәйепләгән. Мәңгелеккә тәҙәтеп булмаҫлыҡ күңел яраһы һалыуы әҙ күренгәндер, күрәһең, йәлләп тормаған, тағы ла шунда услап тоҙ һипкән. Телефонды ҡолағына терәп илап алып киткән ҡыҙҙарын күргән ата-әсәһе был һөйләшеүгә ирекһеҙҙән ҡыҫылырға мәжбүр булған. Оятһыҙ ҡатын быларҙын да ҡотон алған: "Баламды боҙғанһығыҙ, мин уны һеҙҙән тартып алам!" - тип аҡырған. Ике көн буйы шылтыратып йонсотҡан уларҙы "әсәй" кеше. Зилә хатта яңғыҙы урамға сығырға ла ҡурҡа башлаған. Уҡыған еренә лә, йыраҡ тип тормай, бөгөн ата-әсәһе оҙатып килгән. Зиләне 6 йәшенән үҙ ғаиләләренә алып, бөтә күңелдәрен биреп, сикһеҙ яратып, һөйөп үҫтерәп килгән был ғаилә ағзаларының да хәҙер баштары ҡатҡан. "Беҙ алғанда ул элементар гигиена ҡағиҙәләрен генә лә түгел, хатта йүнләп һөйләшә лә белмәй, кешенән ҡурҡҡан, хатта ҡалаҡ та тота алмаған бала ине. Күпме күҙ йәше түктек, күпме психолог, невролог аша үттек - баланы "терелттек", өйрәттек, Аллаға шөкөр. Сәскә кеүек матур бит ул! Аҡыллы. Итәғәтле. Ипле. Әҙәпле. Тәртипле. Шул тиклем ғазаптар үткәреп, инде онотоп, төнгө һаташыуҙары бөттө тигәндә... Беҙ бер ҡасан да Зиләбеҙҙең үҙ әсәһе менән аралашыуына сик ҡуйманыҡ. Ни тиһәң дә, әсәй әсәй инде! Зилә үҙе риза булманы. Хатта шылтыратҡанда ла телефонды алмай торғайны. Ҡотон алып бөткәндәр элек, тип уйлайбыҙ. Беҙгә һөйләмәгән тағы ла әллә ниндәй хәлдәр булғандыр әле балаҡайҙың. Ҡыҙыбыҙҙы, беҙҙе яҡлағыҙ, зинһар, араләғыҙ шул бәрейҙән", - тинеләр Зиләнең хәҙерге атаһы һәм әсәһе.

Тормошта яңылышмаған кеше юҡтыр ул. Өләсәйем мәрхүмкәйем әйтмешләй, абынмаҫ ат булмаҫ, яңылышмаҫ кеше булмаҫ. Ни өсөндөр, беҙҙең хаталарыбыҙ арҡаһында күбеһенсә балаларыбыҙ ыҙалай. Әлеге ситуацияны психологик яҡтан ҡараһаҡ, нимә күрәбеҙ? Тулы ғаиләлә, яҡшы тәрбиә алып үҫкән ҡыҙ кеше тормошонoң ҡайһылыр мәлендә абына. Шул абыныуҙан был ҡатын ҡабат "күтәрелеп" китә алмай. Ата-әсәһенең, туғандарының ярҙамын ҡабул итмәй. Хатта балаһының күҙ йәштәре лә айнытмай уны. Киреһенсә, балаһын, ата-әсәһен, туғандарын ғәйепләй, эргә-тирәһендәгеләр генә сәбәпсе тип уйлай үҙенең йүнһеҙ тормошонда. Йәғни, йәшәйеше булған яуаплылыҡты ул башҡалар елкәһенә күсереп һалмаҡсы! Психологияла был күренеш үҙ-үҙеңде ҡорбан итеп күрһәтеү тип атала. Әйтергә кәрәк, ҡайһы бер күҙлектән ҡарағанда, үҙ-үҙеңде аҡлау өсөн был бик уңай позиция. Сөнки мин яҡшымын, изге күңеллемен, тик мине уратып алған кешеләр үтә насар, мине аңламайҙар һәм ҡәҙерләмәйҙәр шул, тип уйлай бындай кешеләр. Һәм үҙҙәренең ошо фекеренә ышаныу ғына түгел, инаналар хатта. Шуға күрә, әгәр ҙә кемдер берәү ситуацияны үҙгәртер өсөн юлдар тәҡдим итһә - ҡабул итмәйәсәк! Ысынбарлыҡты дөрөҫ итеп күрә һәм анализлай белмәү хата өҫтөнә хата эшләүгә килтерә. Әгәр ҙә инде шәхестең мейеһе психоактив матдәләр менән томаланған булһа - ул ваҡытта инде бындай хаталарҙың һөҙөмтәһе ҡот оскос булыуы мөмкин. Тормошта "ҡорбан" ролендә булыусылар, асылда, йәшәйешкә булған асыуын, үпкәһен иң яҡын кешеләренә төшөрә. Тора-бара был үтә лә агрессив кешеләр яңғыҙ ҡалырға мәжбүрҙәр: ябай ғына итеп әйткәндә, башҡалар уларҙан йонсой һәм уларға ҡул һелтәргә мәжбүр булалар. Ошо рәүешле кеше үпкынға тәгәрәп төшөп тә китә. Эскеселәр, наркомандар, енәйәтселәр, ауырыуҙар, асарбаҡтар был кешене ихластан үҙҙәренең араларына ҡабул итә. Артабан ниндәйерәк яҙмыш көтә уны - бер кем дә әйтә алмай. Сөнки иң тәрән һәм төпкөл упкындан да тик өҫкә ҡарай ғына үрмәләп була. Тик был ситуацияла теләгеңдән тыш оло тырышлыҡ, ныҡышмалыҡ кәрәк икәнен онотмаһаҡ ине.

Хәҙерге көндә был әсә үҙенән үҙе бик ҡәнәғәт булып, асарбаҡтар менән "еңел" һәм "рәхәт" йәшәй. Тормошҡа булған үпкәһе йөҙөнә тәрән һырҙар һалып, йәш ҡатынды мәлһеҙ ҡартайтҡан. Уны күргән һәр бер кеше, ытырғанып, һаҫыҡ ҡатындың эргәһенән ҡасыу яғын ҡарай. Ул әлегә балаһын рәнйетеүҙән ары китә алмай. Иманым камил, ғүмеренең иң һуңғы тын алышында уның ауыҙынан: "Балам, ғәфү ит, кисер мине, балам!" - тигән һүҙҙәр сығасаҡ. Әммә Зилә уны ишетерме?

**Альмира ИСХАҠОВА, психолог.**

✓ *Америка ҡитғаһынан Европаға килтерелеп, аҙаҡ бөтә донъяға таралып киткән, быға тиклем беҙгә билдәһеҙ ҡошто күргән башҡорттар уны ата һуйырға оҡшатып, "күркә" тип атай башлағандарҙыр, моғайын.*



*БЫЛ - ҠЫҘЫҠ!*

**Билдәле булыуынса, "күркә" тигән ҡош донъяға Америка ҡитғаһы асылғандан һуң, унда Европанан күпләп халыҡ күсеп барып, улары әлеге ҡошто Европа ҡитғаһына килтергәндән һуң ғына таралып китә. Ҡырағай күркәләр тик Америка ҡитғаһында ғына таралған. Урыҫтар был ҡошто "индюк, индейка", тип атай. Әзери төркиҙәр, ҡаҙаҡ туғандарыбыҙ, үзбәктәр "индей тауығы", тиҙәр. Башҡорт менән татар иһә, "күркә", ти.**

# КҮРКӘТАУҘЫҢ...

## күркә тигән ҡошҡа ниндәй ҡыҫылышы?



Башҡортостанда Урал тауҙарында күркә менән бәйле "Күркәтау", "Күркәле" тигән бер нисә атама барлығы билдәле. Әгәр ҙә был ҡош үҙе Америкадан килтерелгән икән, нисек итеп башҡорт ерендә уның менән бәйле атама булыуы мөмкин икән, тигән һорау тыуа. Ҡырағай күркәләр бит Америка ҡитғаһынан тыш бүтән бер ерҙә лә булмаған.

Бәктиһәң, күркә атамаһы башҡорттоң халыҡ булараҡ формалашыуын тикшергәндә лә үҙенә күрә бер ҡыҙыҡ һәм тос ҡына миҫал була ала икән. Билдәле булыуынса, Көньяҡ Урал һәм уның тирә-яғындағы тигеҙлектәрҙә иң боронғо дәүерҙәрҙә һинд-иран (арий), ә аҙағыраҡ иран телдәренең көнсығыш төркөмөндә һөйләшкән ҡәүемдәр донъя көткән. Бында, иран телле тигәндә, юл ыңғайы аңлатма биреп китеүҙе кәрәк һанайым. Сөнки беҙҙең ҡайһы бер ғалимдарыбыҙ иран телле халыҡтар тураһында һүҙ барғанда, яңылыш, фарсы телле, тип яҙалар. Был төптә дөрөҫ түгел, сөнки фарсылар иран телле халыҡтарҙың тик береһе генә. Беҙ бит башҡорттарҙың төрки телле булыуынан сығып ҡына бөтә төрки телле донъяны "башҡорт телле", тип атамайбыҙ ҙаһа. Башҡорттар төрки донъяһының бер өлөшө генә булған кеүек, фарсылар ҙа иран телле донъяның бер өлөшө генә булып тора. Иран телле халыҡтар донъяла бик күп. Фарсылардан тыш, осетиндар, талыштар, курдтар, тажиктар, Тажикстандың Памир тауҙарында көн иткән эреле-ваҡлы рушан, язгулям, арашор, вахан, шугнан, барҙангиш, сарыкол тигән халыҡтар, шулай уҡ Афғанстандың төп халҡы пуштундар (үҙҙәрен пашто тиҙәр) ошо тел төркөмөнә ҡарай. Инде күптән юҡҡа сығып, тарих арбаһынан төшөп ҡалған скиф, саҡ, сармат, алан ҡәүемдәре лә ошо иран тел төркөмөнөң көнсығыш тармағына ҡараған телдәрҙә һөйләшкән, ти телсе-ғалимдар. Башҡорт ере булған Урал тауҙарында саҡтарҙан, сарматтарҙан, аландарҙан тороп ҡалған бихисап ҡурғандарҙы ҡаҙып, өйрәнеп, археологтар улар тураһында хәҙер ярайһы уҡ тулы мәғлүмәт тупланы. Хәҙерге Ырымбур өлкәһенең Филипповка тигән ауылы эргәһендәге ҡурғандарҙың береһенән табылған алтын боландар ошо көнсығыш иран телдәренең береһендә һөйләшкән сарматтарҙан ҡалған мираҫ. Тарихсылар ошо ҡурғандарҙы ҡалдырған көнсығыш иран телле саҡ, сармат, аландар субстрат булараҡ башҡортто формалаштырыуҙа туранан-тура ҡатнашҡан, тип иҫәпләйҙәр. Ана шул көнсығыш иран телдәрендә Krka, Kurka - "тауыҡ, әтәс", боронғо һинд телендә "әтәс" була. Ҡыҙыҡһынып тикшеренә торғас, баяғы "Күркәтау", "Күркәле" тигән атамалар булған ерҙәрҙәге башҡорт һөйләшендә әлегерәк ата һуйырҙы "күркә" тип атағандары беленде. Билдәле булыуынса, һуйыр тышҡы ҡиәфәте, бигерәк тә елпеүес кеүек киң таралып торған ҡойрого менән күркәгә тартымыраҡ ҡош. Америка ҡитғаһынан Европаға килтерелеп, аҙаҡ бөтә донъяға таралып киткән, быға тиклем беҙгә билдәһеҙ ҡошто күргән башҡорттар уны ата һуйырға оҡшатып, "күркә" тип атай башлағандарҙыр, моғайын.

Шулай итеп, был ҡоштоң "күркә" тигән атамаһы башҡорт этногенезында туранан-тура ҡатнашҡан көнсығыш иран телле боронғо ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған бер мираҫтыр. Һәм бындай мираҫ бер "күркә" генә түгелдер. Әҙләнә, тикшерә башлаһаң, уларҙың бихисап икәне күренер. Шуға ла телсе ғалимдарыбыҙ башҡорттоң килеп сығышында ҙур роль уйнаған боронғо һинд-иран (арий), иран телле ҡәүемдәрҙән ҡалған мираҫҡа иғтибарлыраҡ булһа ине, тип тамамлағы килә был мәҡәләне.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ,**
**ғилми хеҙмәткәр.**

*УӘТ, ШУЛАЙ!*

# ӨЙРӘНЕРГӘ БАРҘЫҠ...



**Ғилми-етештереү үҙәге директоры Данир Ғәйнуллин етәкселегендәге археологтар һәм архитекторҙар делегацияһы Францияла булды һәм боронғо һүрәттәрҙе музейлаштырыу һәм заманса музей экспозицияларын эшләү буйынса Европа тәжрибәһе менән таныште, Шүлгәнташ тарихи-мәҙәни музей комплексы проекты менән таныштырҙы.**

Республика делегацияһы Францияның көньяғына сәфәре барышында Шове һәм Ласко мәмерйәләренә арналған музей комплекстарын ҡараны, палеолит дәүере рәсемдәре менән аныҡ мәмерйә диуары күсермәләрен эшләү нескәлектәрен өйрәнде. Француз музейҙарының китапхана фондтарына Башҡортостанға, Шүлгәнташ мәмерйәһенә һәм "Урал батыр" эпосына арналған француз һәм инглиз телдәрендәге матбуғат баҫмаларын тапшырҙы.

- Францияға барыуыбыҙ сил ит һөнәрҙәштәребеҙ өсөн мөһим ваҡиға булды. Шове мәмерйәһенең музей комплексында рәсми осрашыу менән төбәк телевидениеһы вәкилдәре ҡыҙыҡһынды. Урындағы матбуғатта "Шове мәмерйәһе. Рәсәй делегацияһының эш сәфәре" тигән мәҡәлә баҫылды, - тип һөйләне Данир Ғәйнуллин.

Француз ғалимдарында Шүлгәнташ тарихи-мәҙәни музей комплексын асыу проекты ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты, улар Шүлгәнташ мәмерйәһендәге хайуандарҙың һындары һәм абстракт билдәләрҙән, сюжеттарҙың Европа аналогтарына оҡшашлығын билдәләне, был музей комплексын төҙөү идеяһын хупланы һәм әлеге проекты ғәмәлгә ашырыуҙа ҡатнашырға теләк белдерҙе. "Сит ил вәкилдәрен Шүлгәнташ музей комплексының архитектура стиле һәм бинаның ҡоҙәләнеше менән быйыл февралдә асылған Ласко IV музейына ныҡ оҡшауы хайран ҡалдырҙы. Шул уҡ ваҡытта проекты уйлап табыусылар бер ҡасан да бәйләнештә булмаған, - тип билдәләне Данир Әхмәҙи улы. - Был күренеш бик борондан ғәмәлдә булған Европа киңлегендә сәнғәтте берҙәм аңлау механизмы хаҡындағы тезисты раҫлай".

Рәсәй һәм сит ил хеҙмәттәштәренең сираттағы осрашыуы 2017 йылдың июнь айында Башҡортостанда Бөрйән районының Морат Туғай ерлегендә музейлаштырыу һәм мәмерйә һүрәттәрен консервациялау мәсьәләләренә арналған халыҡ-ара симпозиумында уҙасаҡ. Йәйге симпозиумға Көнбайыш Европаның билдәле реставраторы, ҡаялағы һүрәттәрҙең күсермәһе буйынса рәссам Ален Далис киләсәк. Ул Шүлгәнташ мәмерйәһе диуарҙарындағы палеолит дәүере һүрәттәре менән участкаларҙың күсермәһен эшләү ҡатмарлығын һәм хаҡын баһалаясаҡ.

- Францияла булғанда беҙ ундағы һәр ҙур булмаған ҡалала шоколад, вино, лаванда, грек сәтләүеге, виноград, нуга кеүек урындағы етештерелгән продукцияларға арналған бер нисә заманса, юғары технологик тематик музей барлығына иғтибар итте. Ул был илдең юғары туристик йәлеп итеүсәнлеген билдәләүсе төп факторҙарҙың береһе, - тип билдәләне Данир Ғәйнуллин. - Башҡортостан Республикаһы үҙенсәлекле мәҙәни феномендарға бай һәм оҡшаш музейҙар төҙөү менән юғары сифатлы башҡорт милли продукцияһын киң танытыу төбәгебеҙгә туристик ағымды күп тапҡырға арттырырға мөмкинлек бирер ине...

**"БАШИНФОРМ".**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

### IV бүлек

XIV быуаттың карталарын өйрәнеүсе Ф.К. Брун боронғо Паскарти (Башҡорт) ҡалаһын башҡорттар менән бәйләгән, ә "XIII-XIV быуаттарҙа Алтын Урҙаның тарихи географияһы" монографияһы авторы В.Л. Егоров пашкерти атамаһын "урта быуат сығанаҡтарындағы башҡорттар атамаһының бер варианты" тип иҫәпләй. Тажитдин Ялсығол әл Башҡорди (1767-1838) үҙенең "Болғарҙар хаҡында тарихи яҙма", "Тарихнамә-и болғар" тигән хеҙмәттәрен дөйөм тарих хаҡында яҙыу менән башлап, төрки ҡәбиләләрҙең, башҡорттарҙың, болғарҙарҙың Ислам динен ҡабул итеүе тураһында бәйән итә. Хеҙмәтенең аҙағында ул башҡорт шәжәрәләрен килтерә. Шәжәрәһенән күренеүенсә, Тажитдин үҙенең сығышын Әйле, дөрөҫөрәге, Әйленең бер тармағы булған Ҡоҙәй ырыуына бәйләй. Ун икеүн өс йәшендә хажға барыусы атаһына эйәреп сығып китә һәм, бер нисә йыл Төркиә һәм Әстерхан яҡтарында булғандан һуң, ҡайтып килешләй атаһы үлгәс, уның, ҡәберемдә (Сөн ауылы) ташлама, тигән васыятын тотоп, бөтә ҡалған ғүмерен Мамадыш һәм Минзәлә өйәҙҙәрендә (хәҙерге Татарстан территорияһында) үткәрә. Ул Татарстандың Зәй районы Имәнлебаш ауылы зыяратында ерләнгән.

Билдәле булыуынса, хәҙерге Өфө ҡалаһы тирәһендә (уның атамаһы үҙгәргән, Башҡорт хан хакимлыҡ иткән осорҙа ҡала "Башҡорт" тип аталған) башҡорттар ҡәләүҙәр һәм нығытмалар төҙөгән. М. Өмөтбаев яҙыуынса, ҡыпсаҡтарҙың ғәскәр башлыһы Яуыш хан төҙөләш менән үҙе шәхсән шөғөлләнгән. Башҡорттарҙың боронғо дәүерҙәрҙән алып йәмғиәт, берләшмәләр төҙөүҙәре хаҡында хатта боронғо "Авеста"ла бөрйән ырыуы миҫалында бәйән ителә. Ошо ҙур территорияла башҡорттар йәшәүе, уларҙың бер нисә дәүләте булып, һуңынан бер Бөйөк Башҡорт иле барлыҡҡа килеүе - тарихи хәҡиҡәт, фән донъяһы әллә "өлкән ағай"ҙан тартына, әллә баҙнатһыҙлығы арҡаһында был хаҡта әйтергә һаман да ҡыймай килә. Мәҫәлән, "Көнһәл әл-әхбәр" тигән төрөк сығанағында башҡорттарҙың ҡасандыр 70 ҡалаһы һәм ҡәлғәһе булыуы әйтелә. Башҡорттарҙың "эске" һәм "тышҡы" төркөмдәренә бүленеүе хаҡында IX - X быуаттарҙа йәшәүсе ғәрәп ғалимдары яҙып ҡалдырған, уларҙы системаға һалып әл-Иҙриси баҫып сығара. Ул түбәндәгесә яҙа: "Тышҡы башҡорттар" тарихи Башҡортостандың көньяғындағы урманлы-далалы ҙур майҙанды, "эске башҡорттар" төньяҡтағы таулы-далалы майҙанды биләгән". Әл-Иҙриси башҡорт хандарын Намжан, Гүрхан, Ҡараҡыя, Ҡасра, Масра ҡалаларының хакимдары итеп күрһәтә. Улар араһынан бигерәк тә иң төҙөгә итеп Намжан ҡалаһын атай. Тап ошо Намжан ҡалаһы ҡалдыҡтарын беҙ Башҡорт ҡалаһы итеп күрәбеҙ ҙә инде. V быуаттан алып XVI урталарына тиклем йәшәгән Өфө-II ҡаласығы был ҡалалар араһында иң ҙуры һәм үҙәктәгеһе булып һанала. Эксперт булып сығыш яһаусы Мәскәү археологтары был ҡаласыҡ комплексын көнсығыш Европаның урта быуаттарға ҡараған ҡалалары араһында иң ҙуры тип билдәләне. Урта быуат сығанаҡтарында "Башҡорт" тип билдәләнгән ҡаланың хәҙерге Өфө ҡалаһы икәненә шик ҡалмай. Башҡорт ҡалаһы Бөйөк Башҡорт иленең сауҙа-иҡтисад, мәҙәни-сәйәси баш ҡалаһы булып торған. "Башҡорт" атамаһы ҡалаға нигеҙ һалыусыларҙың башҡорттар икәнен раҫлай. Башҡорт халҡы, башҡорт иле төшөнсәләре IX-X (XII) быуаттарҙа уҡ Көньяҡ Урал төбәгендә рәсми рәүештә йөшәгән.

**(Дауамы бар).**

✓ *Тормош иптәше эҙләгәндә ата-әсәһенә, затына мотлаҡ ҡарарға кәрәк. Мөхәббәт нисек кенә арбағыс булһа ла, уның бары тик ғаилә башланғысы икәнен аңлағанбыҙ бит инде.*

# ИР КЕШЕ

## әсәһе менән ҡатынының

**Яңы рубрикабыҙҙың тәүге ҡунаҡтары - Башҡортостан юлдаш телевидениеһының яңылыҡтар бүлеге хеҙмәткәрҙәре Рәмзиә Кәримова һәм Илдар Байбулатов. Республикабыҙҙың журналистика өлкәһендә хеҙмәт иткән был матур иштәр гәзитебеҙ битен биҙәрҙәй, күптәргә үрнәк булырҙай ғаилә. Ситтән ҡарағанда бик етди булып, башҡөллә мәшәҡәттәргә сумған ир менән ҡатын яҡындан аралашҡанда бөтөнләй икенсе юҫыҡта асылды. Рәмзиә алсаҡ, ҡыҙ-ҡатындарса күп һүҙлерәк, шул уҡ ваҡытта төплө фекерле булһа, Илдарҙың аҙ һүҙле, әммә тапҡыр, шаян, ипле, хатта хисле лә булыуын аңғарҙым. Был фекерҙе улар менән һөйләшеү үҙе үк дәлилләй.**

**Һәр ғаиләнең барлыҡҡа килеү тарихы була бит инде. Һеҙҙең танышыу, өйләнешеү ниндәй шарттарҙа һәм нисегерәк килеп сыҡты?**

**Илдар:** Беҙ икебеҙ ҙә Әбйәлил районынан. Күрше ауылдарҙа үҫһәк тә, бер-беребеҙҙе белмәнек. Әрменән ҡайтҡас, матайға атланып күрше ауылға барҙым да, ҡапҡа төбөндә торған йәштәрҙе күреп, туҡтап киттем. Шунда бер ҡыҙ сит илдә күргән мажараларын һөйләй икән. Шул ҡыҙ Рәмзиә ине инде ул. Башҡорт дәүләт университетында тик бишлегә генә уҡығаны, студент төҙөлөш отрядында эшләгәне өсөн Германияға барып ҡайтҡан икән, немка әхирәте менән Франция, Голландияға ла барып килгәндәр.

Һуңынан Өфөгә уҡырға ингәс, поезда ауылдаш апай менән бергә килдек. Баш ҡалаға килеп төшкәс, туҡтар урын юҡ, шунда был апай: "Әйҙә, бер фатирға алып барам, унда беҙҙең күрше ауыл ҡыҙы йәшәй. Унда бөтә Әбйәлил туҡтап йөрөй",- тине. Барһаҡ, ысынлап та, абитуриенттар, ауылдан йомош менән килгәндәр хатта иҙәндә лә теҙелешеп йоҡлап ята. Хужабикә үҙе командировкала ине, үҙен күрмәйенсә, фатирында бер аҙна йәшәп сыҡтым. Шул хужабикә ҡыҙ ҙа Рәмзиә булған. Аҙаҡтан Ураҙа гәйетендә, репортаж эшләгән саҡта таныштыҡ.

**Рәмзиә:** Илдар менән дуҫлашып киттек. Баштан уҡ кешелеклеге һәм донъяға төплө ҡарашы менән арбаны ул. Эсмәй, тартмай, спорт менән шөғөлләнә. Мөһабәт кәүҙәле, сибәр, йәшел күҙле, тыныс, аҡыллы, тәртипле, тыйнаҡ, бөхтә, йомарт. Әҙ һөйләй, күп эшләй. Ғөмүмән, мин ир-егеттәр һүҙгә һаранһыраҡ булырға тейеш тип уйлайым. Техникумдан һуң уҡырға барғас, Илдар Башҡорт дәүләт педагогия университетында ике курсты бер йылда уҡып йөрөй, тағы 3-4 урында эшләргә өлгөрә. Ҡайҙалыр һаҡсы, йөк ташыусы, ҡайҙалыр төҙөүсе. Шул мәшәҡәттәре араһында миңә лә ваҡыт бүлеп, концерт-театрҙарға йөрөйбөҙ. Үҙемсә, ул тиклем һәйбәт кеше булмайҙыр, миңә оҡшар өсөн шулай тырышалыр, тип уйлайым. Ахырҙа, бер тура килгәндә ауылдаш ҡыҙҙарынан һораштым. Улар кем уҙарҙан Илдарҙы, уның ғаиләһен маҡтай башланы. Өләсәйем бала саҡтан, яҡшы урынға килен булып төш, тип теләй ҙә ултыра торғайны, теләгәне ҡабул булды...

**Килен-ҡәйнә мөнәсәбәте, ғәҙәттә, ғаиләләрҙәге "һауа торошон" көйләй йә боҙа. Күҙәтеүҙәр буйынса, башҡорт ғаиләләрендә ҡәйнә-кейәү проблемалары артыҡ юҡ, әммә ҡәйнә-килендеке йыш күҙәтелә...**

**Рәмзиә:** Мин ҡәйнәмде яратам тиһәм, ышанаһыңмы? Ысынлап яратам. Был тойғо кейәүгә сығып йәшәй башлағанда уҡ барлыҡҡа килде һәм бөгөн ул әсә менән ҡыҙҙыҡы кеүек. Беҙҙең бер-беребеҙгә мөнәсәбәтебеҙ уртаҡ яратҡан кешебеҙ аша яҡынайғандыр. Икебеҙ өсөн дә Илдар берҙәй ҡәҙерле - уның гәзиз балаһы, минең балаларымдың атаһы, хәләл ефетем. Нисек итеп гәзиз йәндәрҙе бүлә йәки бүлешә алаһың, ти. Ҡәйнәм менән ҡайныма мин балаларына күркәм тәрбиә биргәндәре өсөн рәхмәтлемен. Улар улын ысын ғаилә башлығы итеп үҫтергән. Иренде яратаһың, хөрмәт итәһең икән, ошо ихтирамың уның ата-әсәһенә лә күсәләр, тип уйлайым. Йәйге ялыбыҙҙы ауылда үткәрәбеҙ. Теләк булһа, диңгеҙгә, сит илгә лә барырға мөмкин. Әммә һағынып көтөп торған гәзиз йәндәр булғанда ошо бәхетле мәлдең ҡәҙерен белеп ҡалырға кәрәк, тип уйлайбыҙ. Донъя бит мәңгелек түгел. Икенсенән, алтмыш йәшлек ҡайным бесән сабып, ҡәйнәм мал тәрбиәләп йөрөгәндә, беҙ нисек оялмайынса ҡайҙалыр ял итеп ятайыҡ. Балалар ҙа олатаһы-өләсәһе янында күберәк булып, уларҙың тәрбиәһен тойоп ҡалһын, тибеҙ. Донъя бит - ҡуласа, балалар атай-әсәйгә мөнәсәбәт ниндәй булырға тейешлеген күреп, һеңдереп үҫә. Ҡәйнәм иң яҡын әхирәтем, уның менән һөйләшергә, серләшергә яратам. Беҙҙең уртаҡ яҡтарыбыҙ күп, тормошҡа ҡарашыбыҙ, зауыҡтарыбыҙ, пландарыбыҙ оҡшаш. Бешергән аш-һыуҙарын да, холҡон да, һөйләү манераһын да яратам. Ҡәйнәм әле үҙенең ҡәйнәһен ҡәҙерләп ҡарай. Асыҡ тәрбиә өлгөһө. Ҡәйнә килен тупрағынан ярала, тиҙәр бит инде.

**Илдар:** Килен-ҡәйнә темаһы булһа ла, ошонда мин дә фекеремде әйтәйем әле. Был мәсьәләлә ике яҡтың да аңлы булыуы зарурҙыр. Минең өсөн ҡатынымдың атай-әсәйемде хөрмәт итеүе бик мөһим, хатта шарт. Әгәр Рәмзиә, ҡәйнәмдәргә бармайыҡ, тип торһа, ихласлыҡ күрһәтмәһә, йәки яһалма ҡыланһа, минең күңелем китек булыр ине. Әсәйем, сабыр кеше булараҡ, өндәшмәҫ тә ине, әммә арала йылылыҡ һаҡланмаҫ ине. Ә былай, Рәмзиә минең туғандарыма хөрмәт менән ҡарай белә. Тағы ла һыҙыҡ өҫтәнә алам: был бер-ике йыллыҡ, хатта ун йыллыҡ ҡына ла ғүмер түгел, ике тиҫтәлек, күп нәмәлә һыналған яҡынлыҡ. Ир кеше өсөн әсәһе менән ҡатынының дуҫ, яҡын булыуы ярты бәхет ул.



**Ярай, бына һеҙ бер-берегеҙҙән уңғанһығыҙ, матур, түңәрәк ғаилә булып йәшәү бәхетенә өлгәшкәнһегеҙ. Баштан уҡ шундай аңлашыуға өлгәштегеҙме, әллә уның өсөн көрәшеү ҙә булдымы? Киләсәктә ҡыҙҙарығыҙ ғаилә ҡорған саҡта егетте нисек һайларға кәңәш итәсәкһегеҙ? Улар буласаҡ ирҙәрендә аталарының ҡылыҡтарын, холҡон эҙләйәсәк бит инде. Тап шул тормош иптәшендә атай мөнәсәбәтен таба алмау ҡатын-ҡыҙҙы трагедияға алып килеүсән, тип яҙа бит психологтар.**

**Рәмзиә:** Башта, ғаилә булып йәшәй башлағас, үҙ һүҙемде һүҙ итеп маташҡан осор булды. Илдар күп эшләй, дуҫтары ла күп, буш ваҡыттарын хоккей, футбол, волейбол уйнап үткәрә. Ә мин өйҙә бала менән ултырам. Бер саҡ ошо хәлдәрҙе ҡәйнәмә ошаҡлашырға булдым. Ул ҡайнымдың ҡолағына төшөргән. Ҡайным ара 400 километр тимәй, шул көндө үк Өфөгә килеп етте лә, икебеҙҙе ултыртып: "Өйләнешкәнһегеҙ икән, бер-берегеҙҙе бәхетле итегеҙ, ыҙалатып йәшәүҙең мәғәнәһе юҡ", - тине. Хәҙер 20 йылға яҡын ошо девиз буйынса йәшәйбеҙ. Миңә ғаиләһе тип өҙөлөп торған ирҙең ҡанаты аҫтында нескә ҡатын булып йәшәүе оҡшай, ул - баш, миңә муйын роле лә етә. Бүтән ошаҡлашманым, сөнки ир менән ҡатын шунда уҡ яраша, ә әсә йөрәге оҙаҡ һыҙлай икәнен ваҡытында аңланым. Балаларым өләсәй-олатайлы булып үҫһен, тип, яҡшы хәбәрҙәребеҙ, хәстәребеҙ менән уларҙың ғүмерен оҙайтырға тырышабыҙ.

Икенсе һорауға килгәндә, "нәҫел", "тоҡом", "зат" тигән төшөнсәләр халыҡта борондан булған. Юҡҡамы ни, халыҡта ҡан таҙалығын һаҡлау ҡануны борондан килә. Генетика, асылда, үтә лә етди, хатта иң төп күрһәткес ул. Хәҙерге көндә шул асылдан ситләшеп, хистәр шауҡымын алға ҡуйып, милләткә зыян килтергәндәр ишәйҙе. Юҡҡамы ни, ил эштәрен алып барыр, ил һүҙен әйтер, хәл иткес саҡтарҙа уртала булыр иремдең нәҫелен мин шундай затлы тоҡомға индерәм. Һүҙемде йомғаҡлап, шуны әйткем килә, тормош иптәше эҙләгәндә ата-әсәһенә, затына мотлаҡ ҡарарға кәрәк. Мөхәббәт нисек кенә арбағыс булһа ла, уның бары тик ғаилә башланғысы икәнен аңлағанбыҙ бит инде. Артабан йәшәү, дәүләт булып китеү өсөн күркәм холоҡ, яҡшы сифаттар кәрәк. Икегеҙҙең береһе шуға эйә булып, икенсегеҙ уға эйәрә, шул күркәмлекте ҡабул итә, яҡшылыҡҡа яраҡлашырға ынтыла белгәндә лә бик шәп.

**Беҙ бөгөн һеҙҙе башҡорт ғаиләһе итеп күрһәтәбеҙ. Һеҙҙең ғаиләнең башҡортлоғо нимәләрҙә сағыла?**

**Илдар:** Беҙ, беренсенән, өйҙә тик башҡортса ғына аралашабыҙ. Балалар русса яуап биреп торһа ла, иғтибар итмәҫкә, руссаға күсмәҫкә кәрәк, тамсы ла тама-тама ташты тишә. Ҡыҙҙар мәктәптә башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеүҙән тыш, туған тел булараҡ та уҡый. Ижади конкурстарҙа ҡатнашып, призлы урын яулайҙар. Яңыраҡ Айгүзәл "Я помню, я горжусь" тигән Бөтә Рәсәй олимпиадаһының район этабында еңеп, ҡала кимәленә сыҡты, шунда телевидениеға башҡортса интервью биргән, ғорурланып ҡарап ултырҙыҡ. Башҡаларға, телде белергә тейешһегеҙ, тип оран һалып йөрөгән юҡ, һәр кем үҙенең ғаиләһе миҫалында өлгө күрһәтергә тейеш. Икенсенән, беҙ үҙебеҙ башҡорт йәмғиәте өсөн хеҙмәт итәбеҙ, БСТ-ның башҡорт телендәге яңылыҡтар бүлегендә эшләйбеҙ, йәғни башҡорт донъяһының бар яңылығы уртаһында ҡайнайбыҙ. Башҡорт әҙәбиәтен, мәҙәниәтен яратабыҙ, аралашҡан ғаилә дуҫтарыбыҙ ҙа үҙебеҙҙең милләттән. Кәрәк урында, үҙебеҙҙе лә, телебеҙҙе, милли ҡараштарыбыҙҙы ла яҡлай алырлыҡбыҙ.

**Рәмзиә:** Өҫтәп китәм, башҡорт концерттарына йәки башҡа сараларға саҡырыу ҡағыҙы алыу мөмкинлегебеҙ һәр ваҡыт бар. Әммә Илдар, минең билет һатып алырлыҡ ҡына мөмкинлегем бар, башҡорт сараларына ярҙам булһын, тип, был һорауға нөктә ҡуйҙы. Бар сараларға ла билет һатып алып йөрөйбөҙ.

**Илдар:** Әле ҡала ситендә йорт һалып ятабыҙ, эшсе ҡулдар йыш талап ителә, төҙөлөшкә башҡорт кешеләрен йәлеп итергә тырышабыҙ, үҙебеҙҙекеләрҙең тауарҙарын һатып алып, өлөшөбөҙҙө индерәбеҙ. Өйҙә аш-һыу ҙа үҙебеҙсә, шулай өйрәнгәнбеҙ. Ҡыҙығыраҡтарынан: йәй ауылда саҡта Себерҙән килгән балалар була. Шуларҙы башҡортсаға өйрәтеү өсөн башҡорт көнөн иғлан итәм дә, русса һүҙ ҡыҫтырғандың маңлайына сиртеү билдәләйем. Уйын формаһында булһа ла бик һөҙөмтәле сара. Ҡыҫҡаһы, бөтә донъябыҙ, йәшәү рәүешебеҙ башҡорт-

# ӨСӨН...

## дуҫ булыуы - ярты бәхет

са ҡоролған, башҡаса булыуы ла мөмкин түгел.

**"Ғаилә институты" тигән төшөнсә ни хәлдә икән бөгөн?**

**Рәмзиә:** Мин үҙем атайһыҙ үҫтем, атайым беҙ бәләкәй саҡта мәрхүм булды. Ул ваҡытта әсәйем ауырый ине, ә ағайым менән мине өләсәйем көттө. Өләсәйем ағайым менән мине алғанда 70-кә аяҡ баҫҡан була, иҫ белгәндә лә колхозда эшләп йөрөй, мал тота, һыҙырып бесән саба ине. Бер ваҡытта ла ямаулы кейемдә йөрөтмәне, иртән тороуға усаҡ яғылған, ашарға бешкән булды, беҙ мәктәпкә ас китмәнек, хатта оҙатып ҡуйыр, ҡаршы алыр ине. Бөгөн ғаилә усағын матур ғына гөрөлдәтеп ултыра алыуымдың нигеҙе лә өләсәйемдән килә тип уйлайым. Ағайым миҫалында ир-атҡа ихтирам тәрбиәләне, эшкә, тәртипкә өйрәтте. Ирҙәргә аяҡ күтәрмә, ҡул һелтәмә, тауыш сығарма, килешмәһәң дә өндәшмә, ҡаршы әйтмә, тыштан килеп инеүгә аш-һыуың әҙер булһын, алдында йәйелеп ятма, итәк-сабыуыңды йыйып йөрө һәм башҡалар. Ул ҡанундарҙы үтәмәгәндә язалары ла ҡаты бит әле. "Ир балаға ашты көттөрһәң - ғүмереҥ ҡыҫҡарыр", "Типһәң, аяғың ҡорор", "Иргә әйткән әсе һүҙҙе теге донъяла үҙеңә тоҙ итеп ашатырҙар". Бәләкәс саҡта ыҙғышып китеп, "Ул да миңә һуҡты бит", тип ошаҡлашһаң, "Ир һуҡҡан ер тамуҡта янмай", булыр ине яуабы. Шулай итеп, ул яйлап ҡына ир абруйын күтәрҙе, уларҙың хужа икәнен аңлатты. Тағы бер оло һабағы - белемгә ынтылыш тыуҙырыуы. Китап тотоп ултырһаң, аяҡ осона баҫып йөрөр, хатта эш ҡушмаҫ ине. Ҡайһы берҙә хәйләләп тә ҡалына ине. Уның ҡарауы, мин ауылда иң күп китап уҡыусы бала инем. Ғәрәп алфавитын ғына белгән өләсәйем уҡытыусыларға Алла урынына табынды. Кейәүгә сыҡҡас, тәүге йәй өләсәйемә ҡайтып төшһәм, был мине йәһәт кенә йыйындырып, ҡәйнәмә ебәрҙе. "Кейәү менән йәшәйем тиһәң, бар, иреңдең туғандарына һый, һинең инде һыйырың да, һандығың да, урының да шунда, миңә ҡунаҡҡа ғына кил", - тине. Дөрөҫ эшләгән, тип, уйлайым. Әгәр ул шул ваҡыт "Ҡәйнәңдең донъяһы ҙур, малы күп, эш тейәр һиңә, миндә ятып ял ит", тиһә, мин, тәжрибәһеҙ йәш килен, ҡайтыр ҙа килер, ҡайтыр ҙа килер инем. Өләсәйем оло аҡылы менән шулай "һып" иттереп кенә урыныма ултыртып ҡуйған. Ҡыҙҙарыма ла, мәле еткәс, шулай тип әйтәсәкмен.

Бөгөн ошо ғаилә институты бурыстарын мәктәп иңенә һалып ҡуйҙылар. Был дөрөҫ түгел. Уҡытыусы айырым фәндәр буйынса белем биреүсе һәм, әлбиттә, ниндәйҙер дөйөм тәрбиәүи эштәр ҙә алып барыусы ғына ул. Ул үҙ эшенә, биргән белеменә яуаплы. Ә тәрбиәне бала өйҙә алырға тейеш.

**Илдар:** Ғаилә институтындағы ир кешенең бурысы - ғаиләһен аҫырау. Аҡса табыу, мал табыу, төҙөлөш, ремонт, кредит мәсьәләләре ир кеше иңендә булырға тейеш. Беҙҙең ғаиләлә Рәмзиә ирҙәр эшенә ҡыҫылып өйрәнмәгән. Мин, мәҫәлән, мунсаны ҡайһы урынға ултыртайым йәки ниндәй хаҡҡа төҙөлөш материалдары алайым, тигән һорауҙы уға бирмәйем, кәңәш тә көтмәйем. Шулай уҡ ниндәй машина һатып алырға йәки уның запчастары, төҙөкләндереү хаҡтары тураһында ла һөйләшмәйем. Әле күптән түгел фатирҙы алмаштырғанда ла, үҙем табып һөйләшеп-килешеп бөткәс кенә уны алып барып күрһәтеп, хуплауын ғына алдым. Шул уҡ ваҡытта миңә ниндәй кейем кәрәкте, быйыл нимәләремде яңыртырға икәнде, бөгөн ниндәй костюм кейеремде, ниндәй прическа йөрөтөрөмдө (сәсемде лә үҙе ала), парфюмымды, хатта иртәнсәк нимә ашарымды ла ул хәл итә. Әгәр бер көн иртәнсәк ҡулыма таҙа күлдәк тоттормаһа, миңә ҡояш тотолғандай буласаҡ. Шулай уға үҙемде тапшырып, ышанып өйрәнгәнмен.

**Бер-берегеҙҙекенән айырым булған ниндәйҙер шөғөлдәрегеҙ, ҡыҙыҡһыныуҙарығыҙ бармы? Ғаиләлә "ирҙәр эше", "ҡатындар эше" тигән ҡараш йәшәйме?**

**Рәмзиә:** Һәр кемдең ҡыҙыҡһыныуҙарға ҡоролған айырым эске донъяһы ла булырға тейеш. Тормош юлдашы шәхси милек түгел, уның үҙ шөғөлдәре, ҡыҙыҡһыныуҙары булырға тейеш, иркен сикләргә ярамай. Мин тәүге йылда уҡ сикләү, игәү менән уны бәхетһеҙ итеремде һәм, дөрөҫөндә, еңә лә алмаҫымды аңланым. Хәҙер "Нишләп хоккейың юҡ әле ул һинең?" тип үҙем һорап ҡуям. Мин иһә, театр, концерт, шиғыр кисәләрен ҡалдырмайым. Эште лә айырам. Мәҫәлән, Илдарҙы аш-һыу араһында, сепрәк-сапраҡ менән буталып йәки иҙән йыуып йөрөгән икән, тип, күҙ алдына ла килтерә алмайым. Көнкүрештең ошо кимәленә төшөрмәҫкә тырышам иремде. Шулай уҡ унан төндә бала тотторо п йөрөтмәнем, киреһенсә, мыжығанында, баланы ҡырғараҡ алып китергә тырыштым. Иртәгәһенә уға бит эшкә, ә мин өйҙә ҡалам. Йәки үҙем рулгә ултырырға ынтылмайым. Сөнки уның плюстарын күберәк күрәм. Ҙур ҡалала балаларын алып бараһы бөтә ергә лә Илдар үҙе йөрөй. Түңәрәктәргә, концерттарға, секцияларға һәм башҡаларға. Мин рулгә өйрәнгән булһам, был яуаплылыҡ йәһәт кенә әсәй иңенә төшөп тә ятыр ине. Шуға ғаиләне бөтә ергә лә атай йөрөтә. Һәм шул "йөрөтөү" уға балалары донъяһын үҙенең иғтибар үҙәгендә тотоуға ла булышлыҡ итә. Был арҡала атайыбыҙ ҡыҙҙарының нисәлә дәресе бөтөүен, ҡайһы көн ниндәй сараларға барырын, ҡасан ата-әсәләр йыйылышы булырын белә. Миңә ир кешенең бер башҡа бейегерәк булыуы оҡшай, атай абруйы тигән төшөнсә булырға тейеш.

**Илдар, аңлауымса, һин янындағы ҡатын-ҡыҙҙарың менән бик оҫта идара итәһең. Эш урынындағы ҡатын-ҡыҙ коллегаларың да һинең хаҡта тик яҡшы ғына фекерҙә. Бында ҡатының түгелеп маҡтай, ҡыҙҙарың өҙөлөп тора. Йә инде, сере нимәлә?**

**Илдар:** Әлләсе... Берәү менән дә идара итергә уйлағаным да юҡ... Бары мин ҡатын-ҡыҙҙы... артыҡ етдигә алмайым. Уларҙың сар-сор килеүен дә, эмоцияларға бирелеүен дә, ваҡланып китеүен дә, йомшаҡлығын да, башҡа хистәргә бәйле сайпылыштарын да бары ҡатын-ҡыҙ тәбиғәте итеп кенә ҡарайым. Улар мине ыҙандан сығара алмай. Йәнемде лә көйҙөрмәй. Дөрөҫөн әйткәндә, ҡатын-ҡыҙға асыуым килгәне лә юҡ шикелле. Мәҫәлән, балаға асыуланып булмай бит, шуның кеүек. Аңлай торған ҡатын-ҡыҙ ипле әйткәнде төшөнә ул. Төшөнмәһә лә, артыҡ үпкә юҡ. Тағы ла, ҡатын кешегә яуаплылыҡ һалмайым, артыҡты талап та итмәйем. Хәленән килгәнен улар үҙҙәре лә башҡара ул. Бөтөн донъяуи хәлдәрҙә лә, эш мәсьәләһендә лә уларға "скидка" яһайым, ир кеше булып тыумағандары өсөн. Шул ғына. Миңә өйҙә тыныс мөхит, аш-һыу әҙер, балаларым ҡараулы булһа - еткән. Рәмзиә үҙ бурысын теүәл үтәй былай. Шунан ҡатынымдың кешеләргә ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер тороуы оҡшай. Ул кеше ҡайғыһына битараф түгел, дауаханала берәйһе ятҡанын белһә, барып етә, ауырыу балаларға ярҙам ойоштороу менән йыш шөғөлләнә, бер ваҡытта ла миңә генә булһын, тимәй, бүлешергә ашҡынып тора. Ул ярҙам иткән кешеләрҙең иҫәбе-һаны юҡ, шуға республиканың ҡайһы төбәгенә барһа ла ҡолас йәйеп көтөп торалар. Кешенең рәхмәте төшә тигәнгә ысын күңелдән ышана һәм ысынлап та шулай. Уйламаған ғына ерҙән тормошҡа ашмаҫлыҡ план да үтәлеп ҡуя.

**Һеҙ эштә лә бергә, өйҙә лә бергә... Был яҡшымы ул? Әллә минустары ла бармы?**

**Илдар:** Өй менән эш араһындағы юлда ла бергәбеҙ... Ә инде етди әйткәндә, эштә беҙ бер-беребеҙҙе яҡшылап күрмәйбеҙ ҙә. Рәмзиә репортаж артынан сығып китә, мин сығарылыш өсөн яуаплы. Бары тик кискә генә күрешеп, табышып, бергә ҡайтып китәбеҙ. Ял көндәрендә лә минең үҙ мәшәҡәттәрем, Рәмзиәнең үҙ ҡатын-ҡыҙ хәстәрҙәре. Өйҙә эш, эштә өй тураһында һөйләшмәйбеҙ. Бергә эшләүҙең нимәһе яҡшы, бер коллективтаһың, ундағы проблемалар, яңылыҡтар, эш пландары бер, уның эшен мин, минекен ул аңламай ултырмайбыҙ. Байрамдар ҙа, кисәләр ҙә уртаҡ, тигәндәй. Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы, юҡ, беҙ бер-беребеҙҙе ялҡытмайбыҙ, мәшәҡәтләмәйбеҙ. Коллективҡа яңы килгән кеше, мәҫәлән, беҙҙең бер ғаилә ағзалары икәнде аңламай ҙа, аҙаҡ ҡына белеп ҡалып аптырап китәләр.

**Ике ҡыҙ үҫтергән атай булараҡ, улар менән ниндәй мөнәсәбәттәһең? Әллә ҡыҙҙарҙы әсәй тәрбиәләй, тип ҡарайһыңмы?**

**Илдар:** Алда әйткән ҡатын-ҡыҙға булған ҡарашым ҡыҙҙарыма ла ҡағыла. Мин уларҙы минең яҡлауыма, ҡурсыуыма мохтаж бәләкәй генә, матур ғына, иркә генә кешекәйҙәр тип ҡабул итәм. Нимә һөйләһәләр ҙә етди тыңлайым, көлмәйем, әрләмәйем. Әммә улар минең нимәнәндер ҡәнәғәтһеҙ ҡалыуымды йәки кәйефһеҙлегемде тиҙ генә тоялар. Барометр кеүектәр улар ҡыҙҙар. Унан тиҙ генә көйләп, нимә менәндер ыңғайға һыпырып, әүрәтеп, яҙып алалар. Арып ҡайтып ултырған кеүек булһам да, уларҙың шул тулҡынына эләгәм һәм аунап ятып уйнап алам, китап уҡыйым, төрлө уйындар уйнайбыҙ. Бигерәк тә "Мин бәләкәй саҡта" тигән хикәйәттәремде яраталар. Һөйлә, ти ҙә торалар. Инде, булғанына өҫтәп, булмағанын да уйлап сығарып, нимәләр генә һөйләп бөтмәнем. Йоҡлар алдынан әкиәт урынына бала саҡ хәтирәләрен тағатабыҙ беҙ. Тәрбиәгә килгәндә, әлбиттә, ҡыҙ балаға әсәй тәрбиәһе кәрәк. Әсәйһеҙ - ҡыҙ, атайһыҙ ул үҫтермә, ти бит халыҡ мәҡәле лә. Ҡыҙҙарҙың бантиклы, сәскәле, йөҙ төрлө күлдәкле донъяларына тығылмайым, унда әсәләре идара итә. Әммә етдиерәк һорауҙарҙы улар минең менән хәл итергә кәрәк икәнде белә.

**Шулай ҙа ғаиләлә кем лидер? Идеялар күберәк кемдән килә?**

**Илдар:** Идеяға һәр кем хоҡуҡлы. Аҡсаны бергә тотабыҙ, йәшерен запастар юҡ. Ғаилә бюджетын күберәк Рәмзиә планлаштыра, шунан бергәләп ултырып һөйләшәбеҙ, хәл итәбеҙ. Көтөп торғандары артҡараҡ шыла, иң кәрәклеләрен сығып алабыҙ. Балалар үҫкәндә төрлө саҡ була, Рәмзиәнең кейем тип артыҡ өҙгөләнмәүе оҡшай. Сифатлы, килешле кейем генә ала, артығын йыймай. Тәүҙә балалар мәнфәғәтен, уларҙы рухи яҡтан үҫтереүҙе алға ҡуя. Бер бүлмәле фатирҙа йәшәй инек, гүзәл зат шәшке тун тип ҡыҙа бит инде. Рәмзиәгә тәҡдим итһәм, ул: "Юҡ, ул ыштанһыҙ көйө ҡайыш бау таҡҡан һымаҡ була. Тәүҙә фатирҙы ҙурайтайыҡ, машинаңды яңырт, балаларға шарт тыуҙырғас, туны ла булыр",- тип өҙөп ҡуйҙы. Ул үҙен генә ҡайғыртып, бар аҡсаны үҙенә тыҡһа, күңел һүрелер ине. Ә былай мин эшләгән аҡсамдың һөҙөмтәһен күреп торам, кәңәшле эш тарҡалмаҫ, тип юҡҡа әйтмәгәндәрҙер инде. Маҡсаттарыбыҙ уртаҡ беҙҙең.

**Рәмзиә:** Ҡарап тороуға ғаиләнең лидеры мин кеүек булып күренәм. Сөнки холҡом менән теремекмен, тиҙ аралашыусанмын. Илдар бер күтәрелеп ҡарағансы, мин ике ҡат һөйләп бөткән булам. Әммә минең идеяларым үҙ биләмәмдә генә көсөнә эйә. Мәҫәлән, аш-һыу бүлмәһендә, йәки балаларға ҡағылышлы, йәки ялға, йәки вағыраҡ һатып алынаһы әйберҙәргә. Ә инде бөтөн эре мәсьәләләрҙә лә идея хужаһы ла һәм ул идеяны тормошҡа ашырыусы ла Илдар үҙе. Миңә лә фекеремде әйтеү хоҡуғы бирелә ул былай, бик булмаһа, "Оҡшаймы?" тигән һорау булырға мөмкин. Шул уҡ ваҡытта ҡайһы бер эштәрҙе белмәй ҡалыуым да бар. Мәҫәлән, ҡала ситендәге өйөбөҙ янында мунса ултыртылыуын аңғармайыраҡ ҡалғанмын...

**Аңлауымса, һеҙҙең ғаиләлә патриархат. Традицион башҡорт ғаиләһе ҡағиҙәләре менән йәшәйһегеҙ. Ошолай булыуын теләп, махсус рәүештә яһап алдығыҙмы был дәүләтте, әллә үҙенән-үҙе шулай килеп сыҡтымы?**

**Илдар:** Кем уны махсус уйлап ултырған инде! Кеше, ғәҙәттә, нимә белә, шуны эшләй, нисек белә, шулай йәшәй. Мин дә шулай уҡ. Үҫкәндә атайымды нисек итеп күреп өйрәнгәнмен, унан ниндәй һабаҡтар алғанмын, нимәләр ҡаныма һалынған - минең йәшәйешемдә лә шулар сағылыш ала. Балалар ни, ояһында ни күрһә, осҡанында ла шуны ҡыуа. Атайым ғүмер буйы балалар уҡытты, әле лә эшләп йөрөй, йыл һайын районда үҙе йәшендәгеләр араһында саңғы ярышында беренсе урын ала, көрәш секцияһын алып бара, ирҙәр хорына йөрөй, әсәйемдең баҡсаһы конкурстарҙа беренсе урын яулай. Ә беҙ уларҙың тормошон дауам итеүселәр, быуындар күсәгилешлеге шулай һаҡланалыр тим.

Башҡорт ғаиләһе ҡағиҙәләре, тигәндән... Башҡаһын белмәйбеҙ, белгән хәлдә лә, башҡаһы беҙгә төҫ түгел. Күңелебеҙ ошолай йәшәүҙе теләгәс, аңыбыҙ ошоға ҡоролғас, менталитет шулай булғас, эйе, башҡортса йәшәйбеҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Йәш ваҡытта барлыҡҡа килгән ғаилә, башлыса, мөхәббәткә нигеҙләнә. Был һөйөү тора-бара тағы ла көслөрәк башҡа тойғолар менән нығытылырға мөмкин, шул уҡ ваҡытта юҡҡа сығыуы ла бар. Әгәр һайлаған кешең һинең өмөттәреңде аҡламаһа, йәштән хыялыңда йөрөгәнгә тап килмәһә, аралағы хистәр юйылып, бәйләнеш кенә тороп ҡалыуы ихтимал. Һәм был ғаилә ана шул бергә ашау-эсеү, уртаҡ балаларҙы ҡарау ҡалыбында ғына ҡала. Исеме була уның, асылы булмай. Ә инде ир менән ҡатын бер-береһенең ихтирамын, иғтибарын яулап алһа, бер-береһенең талаптарына яуап бирһә, бер һүҙҙән, хатта ҡараштан аңлашһалар, бындай ғаилә Мөхәббәт тип аталған нигеҙгә ултыра. Беҙҙең ғаиләбеҙҙең нигеҙе лә - Мөхәббәт", - тине Рәмзиә һүҙебеҙҙең һуңында, ә Илдар ипле генә йылмайып, уны йөпләне...**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА әңгәмәләште.**

**✓ Тыныс юл аша көрәшегеҙ. Рухи берҙәмлек булһын, был көстә берәү ҙә еңә алмай. Яңы власты үҙебеҙҙең мәнфәғәткә хеҙмәт иттерергә тырышығыҙ. Һеҙҙең төп ҡоралығыҙ - иман һәм аҡыл.**






**3**

- Атай, һин бит снайпер. Фашистар бер башҡорт снайперы барлығын башына ла килтермәгәндер инде!

- Шулай! - тине ҡарт эске ҡәнәғәтлек менән. - Бөйөк Ватан һуғышында мәргәнлегем ярап ҡалды. Тик ул саҡта снайперҙар менән әллә кемде аптыратып булмағандыр. Хәрби сәнғәт тә камиллаша. Ә бына Инҡилап һәм граждандар һуғышы мәлендә беҙ телгә алған уҡсылар күп булды, тип әйтә алмайым мәгәр. Мин Башҡорт ғәскәрендә үҫмер егет кенә инем бит әле. Ҡыҙым, шул булып-үткән нәмәләрҙе ҡасандан бирле һөйләргә итәм дә, тик һин ваҡыт тапмайһың бит әле...

Кәримә йәһәт кенә атаһын бүлдерҙе.

- Тарихи сығанаҡтар күп бит хәҙер. Тарихсылар яҙа.

- Тарихсылар!.. Һы... Башҡорт ғәскәре тураһындағы китаптарҙы ҡасан, ҡайҙа уҡыны? Китапханаларҙы үҙем аҡтарып йөрөгәнем бар, беҙ үткән юл тураһында мәғлүмәт юҡ. Шып-шымдар. Әйтерһең, тарихтың боролошло мәлдәрендә башҡорттар булмаған, үҙенең хәрби оһоллоғон тойҙормаған! Ә миңә күп хәрби етәкселәр менән шул һуғыш яланында бергә ҡайнау бәхете тейҙе.

Кәримәнең тыны ҡыҫылды. Тап ошо һөйләшеүҙән, ошо хәтирәләрҙән ҡаса ул, ә атаһы һаман бер генә яҡҡа бора! Кәримәнең ҡарашы ҡырыҫланды.

- Һине ике тапҡыр һөрҙөләр бит инде, атай. Әҙерәк... - Ҡатын һүҙен нисек бөтөрөргә белмәй туҡтап ҡалды.

- Нимә әҙерәк?

Атаһын милли ғәскәр тураһындағы хәтирәләренән алыҫлаштырырға кәрәк, сөнки уның һөҙөмтәһе бик насар буласаҡ! Һәм Кәримә күптән күңелен өйкәгән һорауҙы бирҙе.

- Ә теге биш кешене атҡас... Тейешле органдарҙың улар тураһында һорашҡандары булманымы бер тапҡыр ҙа? Әллә һине шул енәйәт өсөн ҡабат алып киттеләрме?

- Балам, ниндәй биш кешене? Милләттең азатлығына биш кеше генә ҡаршы сыҡҡан тиһеңме ни?

Кәримә атаһына тәү күргәндәй текләп китте. Үҙ ҡулдары менән атып үлтергән биш чекисты атаһы нисек иҫенән сығарһын, ти инде? Бәлки, ғәзиз балаҡайҙары янда саҡта шундай аҙымға барғанына үкенәләр һәм шуға оноҡҡан булып ҡыланалыр? Ә ул ҡәһәрле төн, инде күпме йылдар үтһә лә Кәримәнең төштәренә инеп, йоҡонан ҡалдыра!

- Мин аңлайым, атай, - тине ахыр. - Мин яҡшы аңлайым. Бүтәнсә беҙгә ҡотолоу юҡ ине.

- Ҡыҙым, нишләп биш кеше тинең? Мин әллә күпме фронт юлы үткән һалдат та баһа!

- Яу юлдарың таныш түгел, атай. Мин Ҡаҙағстанға ҡасып киткән сағыбыҙҙы иҫләп әйтәм. Һин хатта йәшереп ҡуйған винтовкаңды әллә ҡайҙан килтереп сығарҙың. Уны беҙгә күрһәтмәҫкә тырышып, арбаға, төпкә, һалам аҫтына тыҡтың,- Кәримә ауыр итеп көрһөндө.- Ҡыуғынсылар беҙгә етә килгәндә, йәһәт кенә тартып алдың да, беҙҙе иңкеүлектә ҡалдырып, үҙең кирегә саптың.

- Ә-ә-ә, бына нимәне әйтәһең икә-ә-ән! - тип һүҙҙы Әбделмән ағай, баш сайҡап ҡуйҙы. - Эйе, беҙҙе юҡ итергә тип атлыҡҡан залимдарҙың ҡаршына атылдым. Шулай. Дөрөҫ. Тик ҡоралһыҙ сыҡтым.

- Ҡор...Ҡор-ралһыҙ? Йәғни винтовка менән түгел, тимәксеһеңме? - Кәримә шаҡ ҡатты. Ғүмерҙә алдаша белмәгән атаһы бөгөн нишләп буштты һөйләй? Нимә булған уға? Әллә ҡартайыу ғәләмәтеме?..

- Ниндәй ҡорал! Дөпөл иҫерек кеше булып, сайҡала-сайҡала, ауа-түнә, аҡырып урыҫса йырлай-йырлай атланым был зобаниҙарға табан. Миңә ете баламды үлемдән йолоп ҡалырға кәрәк ине! Беҙ бит, балам, ҡамауҙа ҡалғайныҡ, бүтән сара юҡ ине... - Ҡапыл Әбделмән ағайҙың әйәге дерелдәп ҡуйҙы. - Ә ҡоралдан атырға тура килмәне. Улар миңә ышанды. Шуға ла ҡай яҡҡа күрһәттем, улар шул яҡҡа саптылар.

Шул саҡ әләм-һәләм кейгән, туҙған башлы атаһы ап-асыҡ булып күҙ алдына килеп баҫты... Кәримә һеңгәҙәне. Уға оят булып китте хатта.

- Һуң...- тине ул көс-хәл менән, - Атай, уларҙы бер-бер артлы юҡ итеү бер һинең өсөн нәмә лә түгел дә баһа! Винтовкаңды үҙең менән алғайның! - Тауышында ышанмау ҙа, аптырау ҙа бергә яңғыраны. - Ул винтовканы бүтән бер тапҡыр ҙа күргәнем булманысы...

- Шулай, балам, винтовкамды бүтән берәү ҙә күрмәне. Ышан, балам, ҡорал тоҫҡар сиккә килеп терәлмәгәйнем.

- Нисек терәлмәгәйнең?.. Әгәр ҙә һине танып ҡалһалар, ул ваҡытта, атай... Уй, күҙ алдына ла килтереүе ҡурҡыныс! Быны әле лә әллә нимә эшләп киттем!.. Атай, һин иң мәргән башҡорт, иң шәп аусы. Ә нишләп үлем алып килеүселәр ҡаршыһына ҡоро ҡул менән сыҡтың? Аңламайым! Нимәлә сәбәбе? Патрондарың юҡ инеме әллә?

Әбделмән ағай уйсан йылмайҙы.

- Винтовкама уҡталыр өсөн бер секунд та етә ине! Тик ҡорал күтәрмәнем. Миңә уларҙы ҡоралһыҙ алышта еңергә кәрәк ине. Ә винтовканы ошо вәхшиҙәр күҙҙән юғалғас, шул туҡтаған еребеҙҙә, иңкеүлектә, күмеп ҡалдырҙым. Минең уны ҡырға, икенсе тарафҡа алып сығырға хаҡым юҡ ине. Ҡаҙағстан еренә аяҡ баҫҡанда тоғро дуҫым янымда юҡ ине.

Атаһының биш кешене атып үлтереүенә ошо көнгә тиклем тамсы ла шикләнмәгән Кәримә телһеҙ ҡалды. Аңлауы ауыр ине уға яугир атаһының был аҙымын.

- Ир ҡоралды сараһыҙлыҡтан күтәрә, балам. Һуңғы сиктә... Сөнки мин бер бөйөк затҡа бүтән ҡорал күтәрмәҫкә һүҙ биргәйнем. Уның ҡушҡанын үтәнем. Хушлашҡан саҡта ул шулай тине: "Башҡорттар һуңғы сиккә килтереп еткерелгәндә генә ҡулына ҡорал ала. Мин артабан был сиккә килтереп терәлмәсебеҙгә өмөт итәм. Хәлегеҙҙән килгәнсә тыныс юл аша көрәшегеҙ. Рухи берҙәмлек булһын, был көстә берәү ҙә еңә алмай. Яңы власты үҙебеҙҙең мәнфәғәткә хеҙмәт иттерергә тырышығыҙ. Һеҙҙең төп ҡоралығыҙ - иман һәм аҡыл. Беҙҙең рух быуаттар аша ла осрашасаҡ. Мин быға ышанам, ҡыйғыр бөркөттәрем, яҙа атмаҫ мәргәндәрем", тине ул. "Яҙа атмаҫ мәргәндәрем", тине... Бөтәһен дә һөйләп бөтөү мөмкин түгел.

Кәримә селт-селт күҙен йомдо. Нисәмә тиҫтә йыл үтеп китте ул ваҡыттарға. Дәүерҙәр, донъяла хакимдар, системалар алмашынды. Атаһының ғына инаныуы үҙгәрмәне...

- Һеҙ, балаҡайҙар, белмәйһегеҙ Ватанды ташлап китеү ғазабын. Белергә лә яҙмаһын. "Һинең отҡорлоғоң, зиһенең, зирәклегең үҙеңдең һәм милләттәштәребеҙҙең тыуасаҡ балалары өсөн кәрәк. Үҙеңде һаҡлауың - милләтте һаҡлау икәнен онотма", тигәйне ул миңә. "Совет власы ла мәңгелек түгел, ул айырым кешеләрҙең идеяһы, ә беҙ көрәшкән ҡиммәттәр - халыҡтыҡы..."

Атаһының ауыҙынан сыҡҡан аҙаҡҡы һүҙҙәр башҡорт азатлыҡ хәрәкәте етәксеһенекеме, әллә атаһыныҡы булдымы, Кәримә был турала ҡабатлап һорарға ҡыйманы.

- Милләтенән айырыр өсөн яңы власть башында тороусылар был аҫыл затҡа күпме әшәкелек ҡылдылар. Уның ғүмерен һаҡлау - беҙҙең бурысыбыҙ ине. Мин дә уны оҙатыштым, борма-борма юлдар үтеп... Ул күҙҙән юғалғансы урынымдан ҡуҙғала алманым. Оҙаҡ баҫып торҙом. Ҡайтыр яҡҡа кире боролғанда күҙ йәшем кипкәйне инде.

- Атай, нишләп һин?!. Ни өсөн һин уны оҙатыштың?!.

- Мин бит уның адъютанты инем, - ҡарт йылмайҙы. - Мин әле лә уның адъютанты!

Был һүҙҙәрҙе әйткәндә саҡта Әбделмән ҡарт турайып баҫты. Битенең сырышы яҙылды. Башҡорт ғәскәрендә хеҙмәт иткән элекке адъютанттың үткер, ҡарсыға ҡарашы алыҫҡа төбәлде. Унда, гүйә, кемделер күрҙе. Күҙҙәре осҡонланды. Эйе, офоҡҡа төбәлгән ғорур ҡарашлы атайҙың һәм, әлбиттә, яугирҙың ғәжәйеп тә илаһи нур бөркә ине йөҙө был мәлдә...

**(Аҙағы. Башы 11-13-сө һандарҙа).**

*ШУЛАЙ ҘА БУЛА!*

# ҠАЙЫН БАШЫНДА АЙЫУ,

## йәки Урмандың шаяртыуы



**Һәр кем үҙ уйына батып, һалмаҡ ҡына урман буйлап китеп барабыҙ. Ара-тирә һайраған ҡош-ҡортто иҫәпкә алмағанда, урманда тынлыҡ. Тәбиғәт уянып етмәгән, көндөҙ йылы булһа ла, төндәрен һыуыҡ әле. Шулай тип уйлап та өлгөрмәнем, ҡапыл Басирҙың асырғанып ҡысҡырып ебәреүе һиҫкәндереп ебәрҙе. "Айыу, айыу!.."**

Өҫтәл артында ултырған мәлдә генә айыу һүҙен ишетеүе күңелле бит ул. Ә бына урманда был хәл бөтөнләй икенсе төрлө ҡабул ителә. Берҙән, күңелде шунда уҡ ҡурҡыу тойғоһо солғай. Икенсенән, баштан, аптырарһың, йәшен тиҙлегендә береһенән-береһе ҡурҡынысыраҡ хәл-ваҡиғалар үтеп китә. Бына минең мейелә ошондай күренеш хасил булды. Бына беҙгә ҡарай ҡар ярып айыу сабып килә. Ырғыған һайын ялбыр йөндәре ялбырлай, яртылаш асылған ауыҙҙан үткер тештәр күренә, һәлберәп килгән телдән һеләгәйҙәр аға, асыу тулы ҡып-ҡыҙыл күҙҙәре беҙгә төбәлгән. Беҙ ниндәйҙер бер мәлгә албырғап ҡалабыҙ. Ул шул арала беҙгә килеп етә һәм алда барған Басирҙы бер һелтәүҙә ситкә быраҡтыра. Шунан миңә ташлана. Мин нисектер ялтанып ҡалам һәм бар көсөмә уның арҡаһына тибәм. Тибеү шул хәтлем көслө була, хатта айыу ҡапыл ғына туҡтай алмай һәм ҡаҡ маңлайы менән ҡарағайға барып төкөй. Асыуынан ни эшләргә белмәгән хайуан (быңдай ваҡытта уны ололап, урман хужаһы, тип тормайһың инде) маңлайын ыуа-ыуа беҙгә ҡарай әйләнә. Ә беҙ - уже тю-тю, юҡ! Басир менән мин әллә ҡасан инде ағас башында ултырабыҙ. Ҡайһы арала менеп өлгөргәнбеҙҙер, этем генә белһен!

Мейелә ошондай күренеш ҡайнай, ә бына күҙҙәр айыуҙы эҙләй.

- Ҡайҙа айыу, ҡайҙа?

Басирҙың күңелле тауышы мине бер аҙға ғына аптырауға һала.

- Ағас башында!

Әллә шаярта инде Басир, әммә был һүҙҙәр күңелгә май булып яғыла. Ә инде ҡурҡыу тойғоһо шунда уҡ ҡыҙыҡһыныу менән алышына. Хатта минең "батыр" башҡа, минән ҡурҡып менеп китмәнеме икән был айыу ағас башына, тигән "ҡыйыу" уйҙар ҙа килеп ҡуя. Бар иғтибар менән тирә-йүнде байҡайым, әммә айыуҙы күреп булмай ҙа ҡуя. Ахырыһы, һорай ҡуям.

- Ҡайһы ағас башында!

Басир ипләп кенә бармағы менән төртөп күрһәтә. Мин башты ул күрһәткән яҡҡа борам һәм... аптырап ҡалам. Бына һиңә - мә! Ысынлап та, ҡайын олонона йәбешеп алған айыу беҙгә ҡарап ултыра!

Минең аптырауҙы бер аҙ күҙәтеп торғас, Басир ихлас көлөп ебәрә.

- Ҡайын ороһо бит ул. Үҙең уйлап ҡара, был ваҡытта ниндәй айыу ағас башында ултырһын инде! Яҙ башында ағас ботағында һайрап ултырырға ул һиңә сыйырсыҡ-һандуғас түгел дә инде...

Ә мин шул арала тағы бер тапҡыр "айыуға" күҙ һалам. Һуйып ҡаплап оҡшаған ҡайын ороһо тере айыуға, хатта ғына ла оҡшаған! Хатта, ярай әле яңғыҙ саҡта осраманы был "айыу", тип ҡыуанып та ҡуям шул саҡ...

**Әғләм ШӘРИПОВ.**

✓ *Минең быуыным Юрий Гагаринды герой тип атай ине, бөгөн ниндәйҙер кеше-үрмәкселәр герой һәм балалар уға оҡшайым тип йорт башына менеп һикерергә лә әҙерҙәр.*



# БӨЙӨК БАБИЧТЫ...

## кинола кәүҙәләндереү бәхете - Таһировта!

(Башы 1-се биттә).

### Һынауҙар нығыта ғына

Силәбе өлкәһе Арғаяш районы Нуркин ауылында тыуып-үҫтем. Үҙебеҙҙең ауылда - башланғыс, күрше Бәжекәйҙә 9-сы класты тамамлағас, ауылдаш егеттәр СПТУ-ға уҡырға киттеләр. Атайым, ҡартайым механизаторҙар булһа ла, минең быға һәләтем юҡ ине. Гитара ҡыҙыҡһындыра ине мине, бейергә ярата инем. Мәктәптә уҡығанда заманса бейеүҙәр түңәрәгенә бер тапҡыр ғына барҙым да, ҡыҙҙар араһында бейеп йөрөй, тип егеттәр көлгәс, башҡаса барманым. Бер үҙемдең генә күрше ауылға йөрөп уҡығым килмәне. Шунан әсәйем менән атайым мине Өфөгә, 2-се педагогия колледжына уҡырға ебәрергә булды. Дөрөҫөн әйткәндә, өйҙә минең бер теләгемә лә ҡаршы килмәнеләр, бигерәк тә әсәйем бөтөн башланғыстарҙы ла хуплай ине. Гитарала уйнай башланым, ә инструментым юҡ ине. Әсәйемдең район үҙәгенән килгән автобустан гитара тотоп килеп төшөүен әле һаман тулҡынланыу менән хәтерләйем. Ошолар өсөн уларға ныҡ рәхмәтлемен.

Беҙҙең төбәктә, Башҡортостанда уҡыйым, тип әйтеү генә лә ҙур ғорурлыҡ. Шулай мин яҙмышымды Өфө менән бәйләнем. Колледжда мин халыҡ бейеүҙәре менән ныҡлап шөғөлләндем. Хатта етәксебеҙ Земфира Ғабдулхаҡова хореография йүнәлешенә күсергә лә тәҡдим иткәйне. Тик әсәйем, тәүҙә бер һөнәр ал, аҙаҡтан ҡарарһың, тигәс, тыңланым. Ошо "Йәшлек" бейеү ансамбле мине насар йоғонтоларға бирелеүҙән дә һаҡлаған, сөнки әсәйҙәр йыраҡ, ә ҡаланың үсмерҙе ылыҡтырырлыҡ нәмәләре күп. Ул замандар ярайһы ғына ҡатмарлы ине, ҡала егеттәре ауылдан килгәндәрҙең ябайлығынан файҙаланып, аҡса ла һыға ине. Етмәһә, буйға бәләкәймен һәм кемдең ялҡауы килмәй, барыһы ла миңә бәйләнә торғайны. 2-се курста ғына үҫеп киттем. Бөгөн уйлайым да, тормоштоң ошондай яҡтарын да үтергә тейеш кеше, беҙ бит унда һынмаҫлыҡ, лайыҡлы үтә алдыҡ, тип ҡуям. Актер булараҡ, бөгөн ошо мәлдә үҙем күргән, үҙем кисергән ваҡиғаларҙы образдар өҫтөндә эшләгәндә ҡулланам. Тормош тәжрибәһе актер өсөн бик мөһим. Бабич та әйтә бит: һынауҙар аша үтмәйенсә, рәхәтлек күрмәйһең. Үрҙәр еңел бирелмәй ул, ҡаршылыҡтарҙы үтә белергә кәрәк.

### Бәләкәс тамашасыларҙы яратам

Колледжды уҡып бөткәс, ике юл ине алда: йә әрмегә барырға, йә Аҡмулла исемендәге БДПУ-ла уҡыуҙы дауам итергә. Күреү һәләтем насарлыҡ булғанлыҡтан, әрмегә алманылар. Педагог булырға артыҡ ынтылыш булмағандыр инде, директорыбыҙ Артур Шәйхетдин улы Суриндың, сәнғәт институтына барып ҡара, тигән кәңәшен тотоп, Өфө дәүләт сәнғәт институтына киттем. Таңсулпан Бабичева курсында уҡыным, беҙҙе Милли йәштәр театрына әҙерләнеләр. Мостай Кәримдең "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" повесы буйынса ҡуйылған "Донъяның ярҙары икәү" спектакле менән тамамланыҡ институтты. Театрҙа ла уны уйнап йөрөнөк әле.



Был ябай ғына спектакль түгел ине, ул беҙгә - буласаҡ актерҙарға - оло мәктәп булды. Мин унда Мостай Кәрим ролен уйнаным һәм был ролдең минең күңелемдә бөгөн дә үҙенең урыны бар. Һәр образ өҫтөндә эшләгәндә үҙеңдең уға оҡшаш яҡтарыңды эҙләйһең. Шағирлыҡ уҡ булмаһа ла, шиғри һүҙҙең көсөнә ышаныс уянды минең күңелемдә. Бәлки, шуға ла шиғырҙар уҡырға яратамдыр. Театрҙағы тәүге ролем - Йәләлетдин атай, шулай уҡ Мостай Кәрим әҫәре буйынса. Тәрән, философик әйбер, репертуарҙа әле лә бар. Улым Алмас та уйнай унда, башта минең геройымдың улы булып уйнай ине, хәҙер Ҡуянов ролендә. Театрҙа Яңы йыл байрамдары мәлендә Ҡыш бабай булырға ятатам, ғөмүмән, балалар менән эшләүе ауыр ҙа, рәхәт тә. Улар иң ихлас тамашасы, уларҙы ышандырыу өсөн үҙеңә лә бала булып ҡала белергә кәрәк. Ғөмүмән, ир-егеттәр бер ҡасан да өлкәнәймәйҙер ул. Күңел гел йәш булһа, йәшәүе лә еңелерәк, күңеллерәк бит.

### Баланды түгел, үҙеңде тәрбиәлә

Кәләшем Әлфиә - Хәйбулла ҡыҙы, уның менән мин колледжда таныштыҡ. Ул да ансамблдә бейене. Осрашыуға саҡырам, ризалашмай ҙа ҡуя ине. Был мине сәмләндерҙе, артынан бик оҙаҡ йөрөнөм. Өс йыл дуҫлаштыҡ, унан өйләнештек. Бик матур тәрбиә алған ул, ҡайным менән ҡәйнәм бөтөн боронғо йола-ғәҙәттәрҙе теүәл үтәгән кешеләр. Тәүге тапҡыр ауылына барғанда, мине ауылдаштарына, был - беҙҙең ҡоҙабыҙ, тип әйттеләр. Сөнки егет кешенең ҡыҙға ҡунаҡҡа килеп йөрөүе ғәҙәти булмаған хәл уларҙа. Мин бесәнгә лә йөрөнөм, башҡа эштәрҙе лә эшләштем. Ғәҙәт буйынса ҡулды кеҫәгә тығып торһам, ҡулыңды кеҫәңдән ал, тип шыбырлап китә ине кәләш.

Мөхәббәт булһа, ғаилә тормошо килнәнес, шатлыҡ ҡына ул. Тәүге тапҡыр 21 йәштә атай булдым. Өлкән улыбыҙ Алмас Ф. Мостафина исемендәге 20-се башҡорт гимназияһында 5-се класта уҡый, кесеһе Азаматҡа 6 йәш. Мин уларға һәйбәт атай булырға тырышам. "Баланды тәрбиәләмә, үҙеңде тәрбиәлә, сөнки ул барыбер һиңә оҡшаясаҡ", тигән аҡылға таянам. Алмас шиғыр һөйләп, төрлө бәйгеләрҙә ҡатнаша ине. Уны видеонан күреп, күп кенә таныштар, ҡулдарын һелтәп тороп һөйләүе лә һиңә оҡшаған, тип әйтә башланылар. Ҡараһам, ысынлап та шулай, атлап китеүҙәренә тиклем ҡабатлай. Башҡа ғаиләләрҙә күҙәтә башланым. Хатта атай менән әсәйҙең мөнәсәбәттәре бала ҡурсаҡ менән уйнағанда ла күренә. Үрнәк булырға ынтылмайым, әммә үрнәк булғанымды һиҙәм, шуға ла дөрөҫ өлгө күрһәтергә тырышам. Бәләкәй саҡта бергә уйнаған малайҙарҙың аталарына ҡаршы йүгереп барып, уларҙы ҡосаҡлап алыуҙарына аптырай торғайным. Мин ояла инем. Улдарым рәхәтләнеп ҡосаҡлай беҙҙе, үҙемә бала саҡта етмәгәнде уларға бирәм. Уйынсыҡтарға килгәндә лә, аҡса йәлләмәҫкә тырышам. Үҙем дә улар менән берәй уйынсыҡ тураһында хыялланып йөрөй башлайым һәм уны мотлаҡ һатып алабыҙ.

Ғаиләлә атай ҡатыраҡ булырға, ә әсәй балаларға наҙ, һөйөү бирергә тейеш, тип иҫәпләйем. Балалар атай менән әсәйҙе ятатһалар, улар башҡа кешеләргә лә яҡшы мөнәсәбәттә була аласаҡтар. Һөйләшәбеҙ улар менән, теләктәрен иҫәпкә алабыҙ. Балаларым минең йә әсәләренең амбицияларын тормошҡа ашырырға бурыслы түгел. Алмас бейей ҙә, театрға ла ихлас йөрөй, футболды нығыраҡ ярата. Ә бәләкәйе сәхнәгә ынтылмай, мәр булам, ти.

### Беҙ улар кеүек йәшәргә тейеш

Быға тиклем төрлө клиптарҙа, "Тамыр" каналы фильмында төшкәнем булһа ла, "Бабич" кеүек етди проектта беренсе тапҡыр эшләнем. Таңсулпан Бабичеваның бер шәп сифаты бар: ул үҙе белем биргән студенттарының ижадын аҙаҡтан да күҙ уңынан ысҡындырмай, күҙәтеп бара. Бәлки, кастингта ҡатнашып ҡарарһың, тип ул тәҡдим итте. Шулай ҙа күңелдә шик ялралды, Бабич - 24 йәшлек егет, мин инде 30-ҙы үткәнмен. Башта ауыр булды. Театр актеры булараҡ, үҙемде иркен тотоп өйрәнгәнмен. Бында саҡ ҡына ситкә баҫтыңмы, кадрҙан сыҡтың, тип иҫкәрмә яһайҙар. Беренсе көндө беренсе кадрҙа мин ишектән йүгереп инәм. Шуны төшөрөү өсөн 14-ләп дубль эшләгәнбеҙҙер ул. Актерҙар хисле кешеләр, саҡ ҡына берәй нәмә килеп сыҡмаһа, һәләтем юҡ, тигән уйҙар килә башлай башҡа. Етмәһә, оҙаҡ ижад итмәй, эҙләнеүҙән туҡтап торһаң, был хәл-торошоң һине ниндәйҙер күңел төшөнкөлөгөнә килтерә. Ә был киноны төшөргән мәлдә мин Мәҙәниәт министрлығынан эштән китеп кенә тора инем. Фильм миңә актерлыҡ һәләтемә, һөнәремә яңынан ышаныс тыуҙырҙы.

Гардемаринддар, мушкетерҙар тураһындағы фильмдар ҡарап үҫкән кеше булараҡ, мин шул заманда тыуырға тейеш булғанмындыр ул, тип гел әйтә торғайным. Сөнки унда романтик рух, кешеләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәттәре лә, хатта мөхәббәт тә башҡараҡ, ул шиғри, поэтик. Бабич та шиғри күңелле кеше. Бер мәлгә генә Бабич булып, уның дәүеренә йәшәп алыу минең өсөн оло мәктәп булды. "Бабич" фильмы үҙ эсенә алған тарихи осор - милләт өсөн мөһим мәл. Беҙ бөгөнгө милли профессиональ театр, музыка сәнғәте, матбуғат, нәшер эше һ.б. башланғысында торған өсөн ошо кешеләргә бурыслыбыҙ. Улар йәш, белемле булған, күп телдәр белгән, иң мөһиме, халҡының киләсәген яҡшыртыу өсөн үҙенең йәнен фиҙа ҡылырға ла ҡурҡмаған. Тағы ла шуныһы бар: улар бер команда була белгән, бер идеяға хеҙмәт итеүҙәре һөҙөмтәһендә күпкә өлгәшә алған. Әхмәтзәки Вәлиди йәки Бабич яңғыҙы ғына бер нәмә лә эшләй алмаҫ ине. Хәҙерге йәштәр күрһен, улар ҙа беҙҙең кеүек ике ҡуллы, ике аяҡлы кешеләр булған бит. Эйе, йәштәргә еңел түгел бөгөн, улар кем артынан эйәрергә, милләтсе тигән ярлыҡтар тағыуҙан хәүефләнмәйенсә нисек илеңде яратырға белмәй аптырана. Минең быуыным Юрий Гагаринды герой тип атай ине, бөгөн ниндәйҙер кеше-үрмәкселәр герой һәм балалар уға оҡшайым тип йорт башына менеп һикерергә лә әҙерҙәр. Бөгөнгө заман геройҙары буласаҡ йәштәребеҙ үҙебеҙҙең бөйөк шәхестәребеҙ миҫалында тәрбиәләнһен, һәр хәлдә, уларҙы белеп үҫһен ине.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бабич ижадындағы яратҡан шиғырың ниндәй, тигәнгә: "Әлмисаҡтан һин шағирһың, тип, Хоҙайҙың әмере бар",- тип яуаплағайны Илгиз. Иң ҡыҙығы, тап Илгиз Таһировтар быуыны актерҙары яҙмышына башҡорт халҡының бөйөк шәхестәрен сәхнәлә уйнау өлөшө тейҙе. Улар күптән ошо шәхестәребеҙ яҙмышын үҙенекенә ҡушып үреп, уларҙың һыҙланыуҙарын да, ҡыуаныстарын да, өмөттәрен дә үҙенеке кеүек ҡабул иткән. Ошо көндәрҙә прокатҡа сығасаҡ "Бабич" фильмында беҙ уларҙың барыһын да күрәсәкбеҙ.**

Ләйсән НАФИҠОВА
әңгәмәләште.

✓ *Әгәр ғаиләлә тормош ҡиммәте тураһында аңлатһалар, унда тыныслыҡ һәм мөхәббәт хөкөм һөрһә, традициялар, йолалар үтәлһә, дини нигеҙҙәр өйрәтелһә - бындай ғаиләләрҙә балаларға йәшәү, үҫеү, камиллашыу өсөн етди нигеҙ һалына.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ҺАҒЫҘ СӘЙНӘМӘ...

■ Бөгөнгө заман кешеһенең һаулығына төрлө берләшмәләр ҙә зыян килтерә. Мәҫәлән, яңыраҡ теш пастаһында шундай матдәләрҙең береһе табылған. Теш пастаһында ғына түгел, күп кенә һағыҙҙар составында титан диоксиды бар, ул аҙыҡ буяғыс Е171 тип билдәләнә. Тулуза университеты һәм Люксембург фән һәм технология институты белгестәре уны зыянлы тип иҫәпләй. Ғалимдар ҡомаҡтарға 100 көн буйына титан диоксиды өҫтәлгән һыу эсерә. Һөҙөмтәлә, ҡомаҡтарҙың 40 процентының аш һеңдереү трактында яман шеш барлыҡҡа килгән, хайуандарҙың иммунитеты түбәнәйгән. Был берләшмәнең кеше сәләмәтлегенә тәьҫирен өйрәнеү өсөн Францияла ҙур клиник тикшеренеү үткәрергә йыйыналар. Быға тиклем дә ғалимдар составында титан диоксиды булған буяуҙар, ҡояш нурҙарынан һаҡлаусы кремдар, тәм-том (кәнфит, шоколад, печенье һәм һағыҙ) зыянлы тип иҫкәрткәйне инде. Титан диоксиды аҙыҡ менән ҡабул итеү генә түгел, уны һулау ҙа яман шешкә килтереүе ихтимал.

■ Мичиган университеты ғалимдары билдәләүенсә, мигрень өйәнәге мөләндә дофамин кимәле түбәнәйә. Дофамин - ул нейромедиатор, хистәрҙе, тойоусанлыҡты көйләй. Был асыш баш ауыртыуын дауалауҙа яңы ысулдар барлыҡҡа килтерәсәк. Бөгөнгө көндә лә ауырыуҙарға дофаминдың үҙгәреп тороуын туктатыусы дарыуҙар тәғәйенләйҙәр. Шулай уҡ баш ауыртҡанда ял итеү ҙә дофаминдың күтәрелеүенә килтерә. Ә бына маңлайҙы йылытыу, киреһенсә, баш ауыртыуын көсәйтә.

■ Ер сәтләүеге - арахис йөрәк өйәнәге хәүефен түбәнәйтә. Әгәр ҙә ризыҡ ҡабул иткән һайын уға 85 грамм арахис ҡушып ашаһағыҙ, ҡандағы насар майҙарҙы юҡҡа сығараһығыҙ. Һөҙөмтәлә, ҡан тамырҙары таҙа була һәм унда тығындар барлыҡҡа килмәй. Тимәк, арахис атеросклерозды булдырмай. Пенсильвания университеты ғалимдары әйтеүенсә, ашағандан һуң ҡан тамырҙары насар майҙар арҡаһында һыҙылыусанлығын юғалта. Әгәр ҙә өйрәнгән ризығығыҙға арахис ҡушып ашаһағыҙ, был күнелһеҙ хәлде булдырмаҫҡа була. Тикшеренеүҙәрҙә 15 һимеҙ пациент ҡатнаша. Уларҙы ике төркөмгә бүләләр һәм беренсе төркөмгә майлы төшкө аш менән бергә 85 грамм ваҡланған арахисты эсемлек формаһында бирәләр. Икенсе төркөм ошонлай уҡ төшкө аш ала, әммә уларҙың эсемлегенә арахис өҫтәлмәй. Тәүге төркөмдә ҡандағы насар майҙар 32 процентҡа түбәнәйә һәм ҡан әйләнеше өсөн бер ҡаршылыҡ та күҙәтелмәй.

■ Австралия эксперттары асыҡлауынса, һәр алтынсы табип интернетта үҙенең пациенты тураһында мәғлүмәт эҙләй. Ошо уҡ хәл Америкала, Канадала күҙәтелә, тип хәбәр итә "Ремедиум". Иң ҡыҙығы, күптәр быны ябай ҡыҙыҡһыныу йәки ғәҙәт буйынса эшләй. Ҡайһы бер медицина хеҙмәткәрҙәре ошо рәүешле пациенты тураһында тулыраҡ мәғлүмәт туплай. Был иң тәьҫирле дауалау схемаһын асыҡлар өсөн кәрәк, ти улар. Мәҫәлән, социаль селтәрҙәрҙәге статустар һәм хәбәрҙәр буйынса пациенттың эмоциональ торошон аңларға һәм ваҡытлы сара күрергә була. Шул уҡ ваҡытта, табиптарҙың 40 проценты бындай практика дөрөҫ түгел, тип иҫәпләй.

АТАЙ-ӘСӘЙ ҠОЛАҒЫНА

# БАЛАҢА ЯРҘАМ ИТ -

## виртуаль тормошҡа башкөллө суммаһын

**Статистика мәғлүмәттәренә ярашлы, Башҡортостан суицид күренештәре буйынса лидерҙар рәтендә. Үкенескә күрә, хәҙер үҙ-үҙенә ҡул һалыу осраҡтары йәштәр һәм балалар араһында ла киң тарала бара. Бик йыш суицид сәбәбе булып интернеттағы үлем таратыусы, шул аҙымға этәреүсе сайттар тора. Был ысынлап та шулаймы, әллә балаларҙың, үсмерҙәрҙең үҙ-үҙенә ҡул һалыуында икенсе сәбәптәр ҙә бармы? Ошо мәсьәләгә асыҡлыҡ индереү өсөн БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығының баш медицина психологы, БДУ-ның психология һәм клиник психология кафедраһы мөдире Ирина Рудольфовна ХОХка мөрәжәғәт иттек.**



**➔ Статистика менән бәхәсләшеп булмай, тиҙәр, ошо өлкәлә эшләгән белгес булараҡ, һеҙ ниндәй фекерҙә - һандар дөрөҫөн һөйләйме?**

- Ысынлап та, донъя кимәлендәге статистика менән сағыштырғанда, Рәсәйҙең балаларҙың үҙ-үҙенә ҡул һалыуы буйынса беренсе урында тороуы сер түгел. Әгәр һуңғы 10-14 йылда был күренеш ололар араһында кәмеүгә табан барһа, балалар араһында, киреһенсә, арта. Үкенескә күрә, Волга буйы федераль округы статистикаһын ҡараһаҡ, унда иң беренсе Башҡортостан тора. Был, әлбиттә, бик насар.

Вазифам буйынса минә көн һайын белем биреү учреждениелары директорҙары теге йәки был осраҡта нимә эшләргә кәңәш һорап шылтырата. Дөрөҫөн әйткәндә, бөгөн хәл-торош бик киҫкен. Былтырғы мәғлүмәттәр менән сағыштырғанда, күрһәткестәр бер аҙ кәмеһә лә, хәҙер ҡыҙҙарҙың үҙ-үҙенә ҡул һалыуы артты. Былтыр малайҙар алда бара ине. Бында, әлбиттә, интернет йоғонто яһамай тип әйтеп булмай.

**➔ Шулай ҙа балаларҙың был аҙымын нисек аңлатыр инегеҙ?**

- Балаларҙың үсмерлек осорона тиклем үлем тураһындағы күҙаллауы хәҡиҡәткә тура килмәй. Йәғни улар быны уйын тип ҡабул итә һәм шул торошта булдың да, ҡабат ысынбарлыҡҡа әйләнеп ҡайтып була, тип уйлай. Быға интернеттағы үлем төркөмдәре лә баҫым яһай. Мәҫәлән, улар, һин шундай ләззәтле торошта буласаҡһың, быға кисермәгән кисерештәр солғанышында ҡаласаҡһың, тип алдаштыра. Ә үсмерҙәр һәр саҡ аҡ-ҡара төҫтәрҙә генә фекерләй, йәғни йә барыһы ла, йә мин генә, йә мин бөтөнләй юҡ. Шулай уҡ тәрбиә барышында формалашҡан мәлдәр ҙә бик мөһим роль уйнай. Бында кәмселек комплексын билдәләр инем. Йыш ҡына ата-әсәләр балаларына, йүнһеҙ, тип әйтеүҙән тартынмай. Йәиһә, бына һин тыуғас, мин эшкә урынлаша алманым, укыуымды ташланым, хыялымды тормошҡа ашырманым, ти. Бала быны хәтерендә ҡалдыра һәм үҙен гәйепле итеп тоя башлай. Шул иҫәптән, бөгөн мәғлүмәт аша алынған хәүеф кимәле нык тирбәлә. Беҙгә ошо кире мәғлүмәт мөхитендә йәшәргә өйрәнергә кәрәк. Мәҫәлән, ниндәйҙер мәғлүмәткә иғтибар итмәйбеҙ, күңелгә яҡын алмайбыҙ, һөҙөмтәлә хис-тойғолар тупаҫлана. Әммә беҙ хис-тойғоларыбыҙҙы йәшереп, үҙебеҙҙе алдайбыҙ ғына - уны һуңынан балаға төшөрәбеҙ. Йыш ҡына балаларын нисек яратырға, уны яратыуҙары тураһында нисек итеп әйтергә, һәр көндең киләсәге балаһына бәйле икәнен аңлатырға белмәгән ата-әсәләр менән осрашабыҙ. Был - ата-әсәләрҙең хис-тойғо аңралығы. Ғәфү итегеҙ, әммә был психотерапия термины. Бик йыш ғаиләлә төрлө формала көс ҡулланыу, ғаиләнең эмоциональ торошоноң сәләмәт булмауы, күңелһеҙ күренештәр балаға кире йоғонто яһаусан.

Интернет донъяһына килгәндә инде, балаларыбыҙ унда абориген, ә беҙ - мигранттар. Бөгөн кешенең барлыҡ кисерештәре, хис-тойғоһо виртуаль тормошҡа күскән. Байрамдарҙы һыҙ күҙ алдына килтерегеҙ: ҡотлауҙар смс, видеояҙма, клип һәм башҡа шундай заманса юлдар аша ғына тапшырыла. Берәү ҙә шәхсән шылтыратып йәки өйөнә килеп ҡотламай. Виртуаль ҡотлауҙар алабыҙ ҙа, шуға эй ҡыуанған булабыҙ. Әммә эмоциональ мөнәсәбәттәр тәрәнлеге ҡырҡа кәмей. Бигерәк тә балаларҙа, сөнки улар иллюзия менән йәшәй - виртуаль донъяла дуҫтары күп һымаҡ, ләкин ысынбарлыҡта бала уларҙың өстән бер өлөшө йәки бер нисәһе менән генә таныш.

**➔ Баланың үҙ-үҙен тотошонан уға кисекмәҫтән ярҙам кәрәклеген билдәләп буламы?**

- Бала саҡта ысын суицид күҙалланмай, йәғни быны өсөн кеше оҙаҡ уйланырға, тормоштан ваз кисергә йәки үҙ алдына шундай маҡсат ҡуйырға тейеш. Ҡайҙалыр хоҡуҡ һаҡлау органдары теркәгән тышҡы сәбәптәр быға этәргес булыуы мөмкин. Ә балалар бөтөн нәмәне уйламай эшләй. Һәм быны бында бары тик үсмерҙәрҙең ҡыҙыулығын һәм депрессияға бирелеүен билдәләргә була. Депрессия менән суицид тормошта һәр саҡ йәнәш йөрөй. Шуға күрә, үсмерҙәрҙең депрессив торошон күреү менән тейешле ғәмәлдәр башҡарғанда, уларға ярҙам ҡулы һуҙғанда, суицидҡа юл ҡуймаҫҡа ла мөмкин. Әгәр балағыҙҙа ҡапыл киҫкен үҙгәреш тойһағыҙ (ашауында, йоҡлауында, тәртибендә, мөнәсәбәттәрендә, кәйефендә һ.б.), мотлаҡ белгестәргә мөрәжәғәт итергә кәрәк. Теләһә ниндәй киҫкен үҙгәреш имен булмаған торош күрһәткесе. Тора-бара ул тәрәнәйеп, аяныслы хәлдәргә еткереүе бар.

**➔ Ярҙам һорап, ҡайҙа мөрәжәғәт итергә кәрәк?**

- Башҡортостанда психиатрия һәм психотерапевтик хеҙмәттәр айырылған. Быны шулай булыуы яҡшы, сөнки психиатрия хеҙмәтендә кеше тураһында барлыҡ мәғлүмәт теркәлеп бара һәм кеше иҫәпкә элгә икән, был уның артабанғы яҙмышына йоғонто яһауы мөмкин. Йәғни ул һуңынан ҡайһы бер хоҡуҡтарҙан мәхрүм булыуы ихтимал: көс структураларына эшкә урынлаша алмай, машина йөрөтөү танытмаһы ала алмай, һ.б. Шуға күрә, Башҡортостанда Республика клиник психотерапевтик үҙәк эшләй һәм районларҙа уның кабинеттары булдырылған. Был хеҙмәткә мөрәжәғәт иткәндә, исем-фамилияны яҙып алыуҙан тыш, бер ниндәй ҙә иҫәп алып барылмай. Ә инде баланы алып килгән ата-әсә йәки уның хоҡуҡлы вәкиле теркәү үткәндә балала суицид хәүефе күҙәтелеү тураһында әйтһә, ҡабул итеү бушлай, бюджет нигеҙендә башҡарыла. 14 йәшкә тиклем балаларҙы мотлаҡ ата-әсә йәки хоҡуҡлы вәкил килтерһә, 15 йәштән улар үҙҙәре лә мөрәжәғәт итә ала. Бынан тыш, республикала тәүлек әйләнәһенә ышаныс телефоны эшләй.

**➔ Ғөмүмән, кешене үҙ-үҙенә ҡул һалыу сигенә еткергән өсөн ниндәй яза ҡаралған?**

- Тиҙҙән үлем сайттарын, төркөмдәрен тотоусы һәм алып барыусыларға 100 меңдән алып штраф һалыуҙы күҙаллаған закон ратификацияланырға тейеш. Мартта баланы суицидтан яҡлау буйынса закон ҡабул ителде. Бөгөн кешене үҙ-үҙенә ҡул һалыу сигенә еткереүҙе дәлилләү бик ауыр һәм һуңғы 3-4 айҙа ҡулға алыныусы үлем төркөмдәре администраторҙарына ҡарата был хөкөмдө ҡулланыу мөмкин түгел. Шул уҡ ваҡытта халыҡ-ара тәжрибә Европаның һәм АҠШ-тың ҡайһы бер илдәрендә баланы суицидҡа алып барып еткергән өсөн 10 йылға тиклем (мәҫәлән, Италия) иркенән мәхрүм итеү ҡаралған.

**➔ Бөгөн тәрбиәне балалар баҡсаһына, мәктәпкә, йәмғиәткә ҡайтарып ҡалдырырға тырышһаҡ та, тәү сиратта, ул ғаиләнән башлана. Балала ныҡлы психика, үҙ-үҙенә ышаныс булдырыу өсөн нимә эшләргә кәрәк?**

- Әгәр ғаиләлә тормош ҡиммәте тураһында аңлатһалар, унда тыныслыҡ һәм мөхәббәт хөкөм һөрһә, традициялар, йолалар үтәлһә, дини нигеҙҙәр өйрәтелһә - бындай ғаиләләрҙә балаларға йәшәү, үҫеү, камиллашыу өсөн етди нигеҙ һалына, уларҙың башында суицид кеүек уйҙарға урын юҡ. Шуға балаларҙы баштан уҡ дөрөҫ тәрбиәләргә, уларға етерлек иғтибар, һөйөү бирергә кәрәк.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

*✓ Әгәр кемдер тормошоғоҙҙо боҙа тип уйлайһығыҙ икән, ошо инаныуығыҙ арҡаһында тап шулай буласаҡ та. Беҙҙең бәхет юлында кемдер һәр саҡ ҡаршы торған һымаҡ.*



*КИНӘЙӘНЕ КИҢӘЙТЕП*

**Әкиәттәр, мифтар, хикәйәттәр, кинәйәле хикәйәләр һәм башҡа шуның кеүек ауыҙ-тел ижадына ҡараған һүҙ жанрҙарын күптәр балалар өсөн тәғәйен тип уйлай. Әммә улай түгел, бындай әҫәрҙәр йәште айырмай. Был, күрәһең, шуға бәйле: тәү ҡарамаҡҡа эскерһеҙ, ябай күренгән ижад емештәре логик фекерләүҙе талап итмәй, туранан-тура кешенең аҡылына йоғонто яһамай, тормошта уңыш ҡаҙаныу өсөн кәңәшсе-әсбап та түгел. Улар интуицияға, фантазияға, хыялланыуға этәргес бирә. Ә хыялланыу бала өсөн генә хас түгел, оло кеше өсөн дә берҙәй ҡәҙерле.**



# ҠОЯШ НУРЫ ТӘҮҘӘ...

## ынйыға төшәме, ябай ташҡамы?

Борон-борондан кинәйәләрҙе халыҡ тәрбиәүи сара булараҡ ҡулланған. Бындай әҫәрҙәр телдән-телгә, быуындан-быуынға күскән. Яҙыусылар ҙа бындай ысулды, йәғни кинәйәнең тәьҫир көсөн үҙ ижадында оҫта файҙалана. Мәҫәлән, Сәғит Агиштың "Хәмит күпере" хикәйәһен алайыҡ. Йөкмәткеһе ҡыҫҡа һәм ябай ғына. Хәмит менән Вәлит исемле улдарына аталары үлер алдынан "Үҙегеҙҙән һуң иҫтәлек ҡалдырығыҙ", тип васыят әйтеп ҡалдыра. Вәлит шул көндән ҡулы еткән һәр ергә "Бында Вәлит булды", тип яҙа башлай, йәғни үҙ исемен мәңгеләштерә. Хәмит иһә йылға аша күпер һала. Вәлит унда ла барып етешә, "Был күперҙе Вәлит эшләне", тип яҙып китә. Ваҡыт үтә. Халыҡ Хәмит менән Вәлит тураһында онота. Әммә "Хәмит күпере" исемле күпер бөгөнгө көнгә тиклем бар. Бына шулай: Хәмит изге эше менән үткәндәрҙән бөгөнгөгә күпер һала.

Лев Толстойҙың "Күгәрсен һәм Ҡырмыҫҡа" исемле әкиәтен алайыҡ. Ул да ҡыҫҡа һәм ябай. Бер көн Ҡырмыҫҡа һыу эсергә тип, шишмә янына килә һәм абайламаҫтан һыуға төшөп, ағып китә. Быны күреп ҡалған Күгәрсен ярҙамға килә һәм Ҡырмыҫҡаны ҡотҡара. "Рәхмәт, мин дә бер ваҡыт һиңә ярҙам итермен", - ти Ҡырмыҫҡа. "Бәләкәй генә башың менән миңә ярҙам итмәксеһеңме?" - тип көлә Күгәрсен һәм осоп китә. Көндәрҙән бер көндө ағас ботағында йоҡомһорап ултырған Күгәрсенгә һунарсы мылтыҡ тоҫҡап атып ебәрә. Ләкин ул яҙа ата. Сөнки ошо хәлде күреп ҡалған Ҡырмыҫҡа тиҙ генә һунарсының аяғын ауыртҡансы семетеп өлгөргән була. Күгәрсен, әлбиттә, уны кем ҡотҡарғанын белмәй, әммә изгелек ерҙә ятып ҡалмай.

Күп кинәйәләр Ҡөрьәндән алынған һәм күңел яраларын дауалау өсөн телдән-телгә, күңелдән-күңелгә күскән. Кинәйә аша кешеләрҙең аңында рухи ҡиммәттәр һынланыш тапҡан, әхлаҡи нормала, йәшәйеш ҡағиҙәләре нығынған. Бындай әҫәрҙәр аҡыл өйрәтеп, йә вәғәз һөйләп тураға һуҡтырмай, ә хис-тойғо аша кешенең аңына, иң мөһиме, күңеленә үтеп инә. Күңелгә үтеп ингәнде кеше ғүмер ахырына тиклем онотмай. Бала мәктәптә ятлаған төрлө ҡағиҙәләрҙе онотоуы мөмкин, ә кинәйәле хикәйәләрҙәге персонаждарҙың холоҡ-фиғеленә хас булған йәшәйеш сифаттары уны ғүмер буйы оҙатып йөрөйәсәк.

Медицина фәндәре докторы, позитив психотерапияға нигеҙ һалыусыларҙың береһе Носсрат Пезешкиан кинәйәләрҙе "психологик ярҙамсылар" ролен башҡарыусылар тип атай. Үҙенең "Сауҙагәр һәм тутыйғош" исемле китабында ул төрлө кинәйәле хикәйәләр туплаған. Гәзитебеҙҙең "Кинәйәне киңәйтеп" тигән рубрикаһында ошо китаптан алынған кинәйәләрҙе тәҡдим итмәксебеҙ. Ә һеҙ, ҡәҙерле уҡыусыларыбыҙ, үҙегеҙ ишеткән, уҡыған кинәйәләрҙе яҙып ебәрегеҙ. Бөгөн иғтибарығыҙға ошо кинәйәне тәҡдим итәбеҙ. Ул "Ғалим һәм дөйә ҡыуыусы" тип атала. Кинәйәнең шаңдауын, йәғни киңәйтелгән интерпретацияһын киләһе һанда уҡырһығыҙ. Шулай уҡ һеҙҙән дә шаңдау-хаттар көтәбеҙ. Улар ҙа баҫыласаҡ. Редакция кем менәндер бәхәскә инеүҙе күҙ уңында тотмай, фекер алышыу маҡсатҡа ярашлы булыр.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Ғалим һәм дөйә ҡыуыусы" кинәйәһе**

**Сүллек буйлап барған каруанда бик белемле кеше булған. Даны бөтөн донъяға таралған ғалимдың уҡып сыҡҡан китаптары етмеш дөйәгә артмаҡлаған етмеш һандыҡҡа көскә һыйған. Ул китаптарҙа үткән заман аҡыл эйәләренең, бөгөнгө көн зыялыларының белеме тупланған. Ә инде ғалим туплаған белем китаптарҙағы ғилемдән мең тапҡыр күберәк булған.**

**Каруанда шулай уҡ ярлы ғына дөйә ҡыуыусы ла булған. Уның тураһында бер кем дә, бер нәмә лә белмәгән. Әммә бөтәһе лә уның Ергә һуңғы Бәйғәмбәр килеүенә ышаныуы тураһында йыш һөйләгән. Көндәрҙән бер көндө ғалим ҡыуғынсыны үҙенең янына саҡырып алған.**

**- Минең бөтөн донъяға билдәле ғалим булыуым тураһында беләһеңме? - тип һораған ул. - Күрәһеңме, етмеш дөйәгә тейәгән һандыҡтарға минең белемемдең бәләкәй генә бер өлөшө һыйған. Һин, ни батырсылығың етеп, һуңғы Бәйғәмбәр килеүенә ышанаһың? Иң башта өҫтөңдәге алам-һалам кейемеңә ҡара, һин бит уҡый-яҙа ла белмәйһең. Мәктәп ишегенең ҡайһы яҡҡа асылғанын беләһеңме, исмаһам? Ә мин академия бөттөм...**

**Дөйә ҡыуыусы итәғәтле генә һүҙ башлаған:**

**- Әфәндем, һин үҙең башлап һүҙ ҡушмаһаң, үҙем башларға батырсылығым етмәҫ ине. Ләкин һорау биргәс, үҙ фекеремде әйтәйем һәм ябай ғына бер миҫал менән нығытайым. Һиңә белемдең иң ҡиммәтлеһе мәғлүм, шуға күрә һинең белемең диңгеҙ төбөнән алынған ынйыға бәрәбәр. Ынйылар шул тиклем ҡәҙерле, уларҙы бәрхәт менән көпләнгән матур ҡумталарҙа ғына һаҡлап тоталар. Ә минең белемем аяҡ аҫтындағы ябай таштар кеүек. Әфәндем, ҡояш ҡалҡҡан ваҡытты күҙ алдына килтер ҙә, һорауыма яуап бир: "Ҡояш нурҙары тәү башлап ҡайҙа сағыла, төрмә кеүек бикле ҡумта эсендә ятҡан ынйыларҙамы, әллә аяҡ аҫтындағы ябай таштарҙамы?.."**

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ.**

*ҠОЛАҠ ҺАЛ!*

# ТӨП ДОШМАНЫҢ... ҺИН ҮҘЕҢ

**"Мин уңышҡа илтә торған юлды белмәйем. Әммә уңышһыҙлыҡ юлын беләм - ул бөтәһенә лә оҡшарға тырышыу", - ти психолог Михаил Литвак. Уның бар кәңәштәре лә ҡыҙыҡ, ҡолаҡ һалып, иғтибар итергә генә кәрәк һымаҡ.**

- Ҡатын-ҡыҙ йәки ир-егет логикаһы юҡ, фекерләй белеү йәки дөрөҫ фекерләй белмәү генә бар.
- Төп дошманыңды белгең киләме? Көҙгөгә ҡара. Уны еңһәң, башҡалары үҙҙәре юҡҡа сығасаҡ.
- Дуҫтар менән аралашыу күңелле, ә дошмандар менән файҙалы.
- Кемдер күпте беләм, тип уйлай, әммә бер нәмә лә эшләй белмәй, кемдер күп нәмә эшләй белә. Шуға ла шәхес булып өлгөрөп етмәгәндәр бер туҡтауһыҙ кешене әрләй, ә шәхестәр эш менән була.
- Шатлығыңды уртаҡлашырға дуҫтарыңды ғына түгел, дошмандарыңды ла саҡыр. Дуҫың һөйөнөр, дошманың көйөнөр.
- Эштән китеү йәки мөнәсәбәттәрҙе өҙөү өсөн бер генә сәбәп бар - был шарттарҙа шәхси үҫеш кисермәү.
- Бәхетте эҙләмә, бәхет була алған урынды тап. Шунда бәхет һине үҙе табыр. Был урын ҡайҙа икәнен дә әйтә алам - ул һин үҙең. Ә бына үҙеңә юлды табыу өсөн һәләттәреңде мөмкин тиклем үҫтереү фарыз.
- Бәхет - дөрөҫ ойошторолған эшмәкәрлектең өҫтәмәһе генә.
- Кемдер һиңә, рәхмәтле була белмәйһең, тиһә, хеҙмәте күпме тороуын һора, түлә һәм башҡа уның менән аралашма.
- Кемгәлер нимәлер раҫларға теләһәң, тимәк, һин шул кеше өсөн йәшәйһең. Үҙең өсөн йәшәгәндә кемгәлер нимәлер раҫлау кәрәклеге булмай.
- Хыял - һәләттәребеҙҙең тауышы. Мин, мәҫәлән, опера-ла йырларға хыялланмайым. Тауышым да юҡ. Әгәр һәләтем булһа, мин был хаҡта хыялланған булыр инем. Хыялдарҙы тормошҡа ашырыу юлында ҡабаланырға ярамай. Ҡабаланмаһаң, күпкә тиҙерәк килеп сыға ул.
- Кешене белгең килһә, уға хыялдарыңды һәм пландарыңды һөйлә. Кем һине яратмай, ул уларҙы тәнҡитләйәсәк. Кем һиңә тик изгелек теләй, ул ярҙам итәсәк.
- Кеше менән һөйләшкәндә бер нәмәне иҫеңдә тот - һәр кем үҙе тураһында яҡшы фекерҙә.
- Уңышлы бул - бөтөн үпкәләрең онотолор.

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

### Элекке иремде күрә алмайым!

Ғаиләләр тарҡалғандан һуң, икәү бергә үтергә тейешле һабаҡ та тамамланды, тип уйларға ярамай. Әгәр никахығыҙ тарҡалды, әммә һаман да элеккегеҙҙе барлыҡ бәләләрегеҙҙә ғәйепләйһегеҙ икән - һаман да уның менән бер парта артында ултыраһығыҙ! Бәйләнештәрегеҙ өҙөлмәгән, сөнки өйрәнәһеләрегеҙ байтаҡ әле. Һеҙ: "Ул бит щундай насар кеше. Мин, әлбиттә, күп нәмәгә һәләтле, әммә уны бер ваҡытта ла ғәфү итмәйәсәкмен!" - тиһегеҙ. Эйе, ғәфү итеүе ауыр буласаҡ. Һәм, моғайын, һеҙ ғәфү итә лә белмәйһегеҙҙер. Был осраҡ тап шул тәжрибә туплау өсөн кәрәк тә инде. Әлбиттә, күнекмә курстарын аҙаҡҡа ҡалдырырға ла була, ләкин тормошоғоҙ яҡшы, сәләмәтлегегеҙ ныҡ булһын тиһәгеҙ, был юлды, иртәме-һуңмы, барыбер үтергә тура киләсәк. Әгәр кемдер тормошоғоҙҙо боҙа тип уйлайһығыҙ икән, ошо инаныуығыҙ арҡаһында тап шулай буласаҡ та. Беҙҙең бәхет юлында кемдер һәр саҡ ҡаршы торған һымаҡ. Ысынбарлыҡта, бер кем дә түгел, сөнки теге йәки был кешегә ниндәй мөнәсәбәттә булырға икәнлеген үҙебеҙ һайлайбыҙ.

### Етәксем - алйот. Бында мин ғәйепле түгел, уға үҙен тоторға өйрәнергә кәрәк!

Һеҙ етәксегеҙҙе нисек атайһығыҙ - ул шундай буласаҡ. Әммә уны алйот тип уйларға берәү ҙә тыймай. Әгәр уға икенсе күҙлектән ҡараһағыҙ, уның ыңғай сифаттарын тапһағыҙ һәм хатта уны йәлләһәгеҙ, проблема үҙенән-үҙе юҡҡа сығасаҡ. Нисек, тип һорарһығыҙ. Варианттар миллион: а) бәлки, ул мөнәсәбәтегеҙ үҙгәреүен күреп, һеҙҙең алда асыла башлар; б) уны икенсе бүлеккә күсереүҙәре мөмкин; в) һеҙ икенсе эшкә күсеүегеҙ ихтимал; г) ул икенсе эшкә күсеүе бар; д) ниндәйҙер ваҡытта ул һеҙгә оҡшай башлар әле. Бик йыш беҙ яратмаған кешеләр дуҫтарыбыҙға әйләнә бит. Кеше үҙе үҙгәреү менән уның эргәһендәге хәлторош та үҙгәрә. Был - тәбиғәт ҡануны. Һәм уның нисек тормошҡа ашырын уйлап баш ватаһы түгел. Беҙҙең эске үҙгәрештәребеҙ тормоштағы тышҡы шарттарҙың үҙгәреүенә килтерә. Әммә үҙгәрәһең икән, ысынлап үҙгәрергә кәрәк. "Хәҙер мин ул кешегә түҙемле буласаҡмын, әммә уның алйот икәнен һәр саҡ иҫләйәсәкмен!" - тип үҙгәреп булмай.

Глобаль үҙгәреш өсөн күпме ваҡыт кәрәк? Үҙегеҙ күпме кәрәк тип һанайһығыҙ - шунса. Ә, бәлки, миңә тоторға ла бөгөн эштән китергәлер? Әлбиттә, мөмкин. Әммә икенсе эштә лә кемдеңдер ҡулы аҫтында эшләргә тура киләсәк. Бында Йыһандың бөйөк уҡытыу планы төҙөлгән һәм ул шуның буйынса эш итә!

### Икенсе ҡалаға күсеп, яңы тормош башлар инем...

Буш хыял! Ҡағиҙә булараҡ, тормошто әлеге ваҡытта ҡайҙаһың, шунан башларға кәрәк! Әгәр был ҡалала проблемаларың бар икән, икенсе урында ла шундай уҡ хәл ҡабатланасаҡ, сөнки кеше үҙе менән ғәҙәттәрен, уйҙарын эйәртеп йөрөтә. Шуға был осраҡта иң яҡшы кәңәш: почта адресыңды алмаштырырҙан алда, тәүҙә фекерләү рәүешен үҙгәртергә кәрәкмәйме икәнен уйла!

**Эндрю МЭТЬЮЗ.**
**(Дауамы бар).**

✓ *"Был фильм - Өфөнөң визит карточкаһы була алыр ине. Ул йәй миҙгелендәге Өфөнөң иң матур урындарында төшөрөлдө. Мөхәббәт, ҡалабыҙ тураһында йәштәрсә, шаян тарих ул...", - ти кино төшөрөүсе төркөм.*

*СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ*

# САЛАУАТТАР - ӨФӨЛӘ

**Салауат башҡорт драма театры Өфөлә үҙенең спектаклдәрен күрһәтәсәк. Гастролдәр М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында үтәсәк. Салауаттар баш ҡала тамашасыһына Туфан Миңнуллин һәм Василий Шукшин әҫәрҙәрен тәҡдим итмәксе.**

Гастролдәр 13, 14 апрелгә тәғәйенләнгән. Т. Миңнуллин пьесаһы буйынса ҡуйылған "Әллә яңылыш, әллә яҙмыш" трагедияһының режиссеры - Рәсәйҙең атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Олег Ханов. "Репертуар һайлағанда мотлаҡ тамашасы теләгенә ҡолаҡ һалабыҙ, - ти ижади коллектив етәксеһе Рөстәм Фазылов. - Һәр спектакль үҙебеҙҙең театрҙа 10-15 ҡабат ҡуйылғас ҡына, гастролдәргә сығабыҙ. Яңыраҡ "Рәсәй башҡорттары" программаһы сиктәрендә Ырымбур, Силәбе өлкәләрендә булдыҡ. Уларға һуңғы 30 йыл эсендә бер генә башҡорт театры ла бармаған булған". В. Шукшин хикәйәләре буйынса ҡуйылған спектакль "Шукшин" тип атала. Уны Мәскәү режиссеры Антон Федоров ҡуйған.

Салауат театры өсөн быйылғы йыл - юбилей алды миҙгеле. 2018 йылда улар 85 йыллыҡ юбилейҙарын билдәләйәсәк. Был датаға Олег Ханов яңы спектакль ҡуясаҡ, уның атамаһы әлегә сер итеп һаҡлана. "Театр яҙы" фестивалендә иһә салауаттар Мостай Кәримдең "Ауыл адвокаттары" повесы буйынса ҡуйылған "Ерҙәштәр" спектакле менән 20 апрель көндө сығыш яһаясаҡ.

# ҠУРАЙ БАЙРАМЫ



**19-20 майҙа Октябрьский ҡалаһында Ғата Сөләймәнов исемендәге Республика ҡурай байрамы үтәсәк. Ул данлыҡлы музыкант һәм педагогтың тыуыуына 150 йыл тулыуға арнала.**

Байрамдың маҡсаты - һәләтле ҡурайсыларҙы асыҡлау, йәштәрҙе башҡорт музыкаль фольклорына йәлеп итеү, шулай уҡ ҡурайсылар өсөн яңы мөмкинлектәр асыу. Программала - үҙешмәкәр һәм профессиональ ҡурайсылар араһында бәйге, семинар, ижади лабораториялар, еңеүселәр өсөн гала-концерт. Бәйгенең төп шарты - ҡурайсылар положениеға ингән 100 башҡорт халыҡ көйөн уйнай белергә тейеш.

# ӨФӨНӘН - ҺӨЙӨҮ МЕНӘН




**Айнур Аҫҡаровтың яңы фильмын башлап Ҡазан ҡалаһы күрҙе. Режиссер "Кино ваҡыты" III Бөтөн Рәсәй форумында ҡатнашты һәм ошо сарала ҡатнашыусылар уны ҡарай алды.**

Айнур Аҫҡаров был форумға "Кинопроекттар питчинг" секцияһына эксперт булараҡ һәм "Төбәк киноһы үҫеше" тип аталған түңәрәк өҫтәлдә ҡатнашыусы булараҡ саҡырылған. Питчингта кинорежиссер Фәрзәнә Утарбаева ла ҡатнашты, уның яңы сценарийы был питчингтың иң яҡшы 10 эше исемлегенә ингән.

"Өфөнән һөйөү менән!" романтик комедияһы киң экрандарға 13 апрелдә сыға. Ике аҙна буйына уны Өфө, Салауат, Стәрлетамаҡ, Октябрьский кинотеатрҙары күрһәтәсәк. Мәскәү, Санкт-Петербург, Силәбе, Екатеринбургта ла фильмды күрһәтеү ҡаралған.

"Был фильм - Өфөнөң визит карточкаһы була алыр ине. Ул йәй миҙгелендәге Өфөнөң иң матур урындарында төшөрөлдө. Мөхәббәт, ҡалабыҙ тураһында йәштәрсә, шаян тарих ул. Беҙ кино төшөрә беләбеҙ һәм тулы залдар йыя алабыҙ - ошоно раҫларға тырышыу ҙа", - ти кино төшөрөүсе төркөм.

# СИМФОНИК МУЗЫКА ФЕСТИВАЛЕ

**Өфөлә Милли симфоник оркестрҙың 25 йыллыҡ юбилейы айҡанлы Халыҡ-ара фестиваль үтәсәк. 12 апрелдән 11 майға тиклем "Башҡортостан" дәүләт концерт залында классик музыка йондоҙҙары ҡатнашлығында концерттар ойоштороласаҡ.**

Фестивалде 12 апрелдә Н. Римский-Корсаков һәм С. Рахманинов әҫәрҙәренән төҙөлгән симфоник программа аса. 23 апрелдә К. Давыдовтың виолончель өсөн әҫәре премьераһы була. Виолончель партияһын халыҡ-ара конкурстар лауреаты Глеб Степанов башҡара. Фестивалдең өсөнсө кисе 27 апрелдә була. Йәш скрипкасы Никита Борисоглебский һәм дирижер Даррелл Анг (Сингапур) уртаҡ программа тәҡдим итә. 11 майҙа БР Дәүләт академия хор капеллаһы, Өфө дәүләт сәнғәт институты хоры, Башҡорт филармонияһы эргәһендәге Малайҙар капеллаһы сығыш яһаясаҡ.

# БЕҘҘЕКЕЛӘР - СИТ ИЛДӘ



**"Заман" этно-проекты "Liet international" халыҡ-ара музыкаль конкурсының 8 финалисы исемлегенә ингән. Конкурс Норвегияның Кеутукейну ҡалаһында апрель урталарында үтәсәк.**

Коллектив башҡорт телендә төшөрөлгән "Һыуытма" (Ф. Янбаева һүҙҙәре, А. Хәмзин музыкаһы) клибы менән һайлап алыу туры ағзаларын хайран иткән. Композицияның стиле - этно-денс, йырҙың русса варианты ла бар (Е. Муфтахина һүҙҙәре, А. Хәмзин музыкаһы).

"Беҙҙең өсөн был ҙур яуаплылыҡ, сөнки беҙ Башҡортостанды юғары профессиональ кимәлдә күрһәтергә, тамашасыларҙы башҡорт теле менән таныштырырға уйлайбыҙ. Сит ил бәйгеләре - һәр ваҡыт ҙур тәжрибә, бында киләсәктә ижад итеү өсөн яңы бәйләнештәр булдырырға, тәжрибә уртаҡлашырға мөмкин. Беҙ еңеү менән ҡайтасағыбыҙға ышанабыҙ", - ти коллективтың солисы Елена Муфтахина.

Конкурс шарттары буйынса, ҡатнашасаҡ композиция туған телдә яңғырарға тейеш. Ул Европала туған телдәрҙе нығытыу һәм һаҡлау буйынса иң ҙур сараларҙың береһе. Конкурсҡа хәҙерге Германия менән Нидерландтар территорияһында йәшәгән фриздар тигән этнос. Бәйгенең финалы 13 апрелдә үтә һәм унда Германия, Франция, Норвегия, Нидерландтар һәм Рәсәйҙән музыканттар ҡатнаша.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1438 һижри йыл.*

| Апрель (Рәжәб) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 10 (13) дүшәмбе | 4:57 | 6:27 | 13:30 | 18:38 | 20:08 | 21:38 |
| 11 (14) шишәмбе | 4:55 | 6:25 | 13:30 | 18:40 | 20:10 | 21:40 |
| 12 (15) шаршамбы | 4:53 | 6:23 | 13:30 | 18:42 | 20:12 | 21:42 |
| 13 (16) кесе йома | 4:50 | 6:20 | 13:30 | 18:44 | 20:14 | 21:44 |
| 14 (17) йома | 4:48 | 6:18 | 13:30 | 18:46 | 20:16 | 21:46 |
| 15 (18) шәмбе | 4:45 | 6:15 | 13:30 | 18:48 | 20:18 | 21:48 |
| 16 (19) йәкшәмбе | 4:43 | 6:13 | 13:30 | 18:50 | 20:20 | 21:50 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

Решением Арбитражного суда Республики Башкортостан от 09.03.2016 г. по делу № А07-23795/2015 **Коновалова Наталья Юрьевна** (07.06.1962 г. р., место рождения: г. Уфа, Республика Башкортостан, место жительства: Республика Башкортостан, г. Уфа, Демский район, СНТ "Лесная поляна", д. 16, СНИЛС 079-236-243-86, ИНН 027720508675) признана несостоятельной (банкротом), введена процедура реализации имущества гражданина. Финансовым управляющим утвержден **Попов Игорь Евгеньевич** (ИНН 027812328312, СНИЛС 078-048-006-69, почтовый адрес: 450077, г. Уфа, ул. Чернышевского, д. 104, кв. 211, e-mail: popov-igor-1965@mail.ru, тел. 89173549297, рег. №14675), член ассоциации арбитражных управляющих СРО "ЦААУ" г. Москва (119017, г. Москва, ул. 1-й Казачий переулок, д. 8, стр. 1, офис 2, ИНН 7731024000, ОГРН 1107799028523).

Финансовый управляющий Попов И.Е. - организатор торгов сообщает, что повторные торги в форме открытого аукциона (сообщение № 02210004878 в газете "КоммерсантЪ" № 31 от 18.02.2017, стр. 119) по Лоту № 1 назначенные на 04.04.17 г. в 10.00 ч. в электронной форме, в сети интернет на электронной площадке "Альфалот" (http://www.alfalot.ru) **признаны несостоявшимися** так как не было допущено заявок.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**8 апрель "Ғәфү ит мине"** (И. Герман), мелодрама 16+

Салауат дәүләт башҡорт драма театры гастролдәре **13 апрель "Әллә яңылыш, әллә яҙмыш"** (Т. Миңнуллин), мелодрама 12+ **14 апрель Шукшин** (В. Шукшин), хикәйәләр 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**8 апрель "Тылсымлы тирмән"** (М. Кәрим), әкиәт. Башлана 12.00 0+

**11 апрель "Ханума"** (А. Цигарели), музыкаль комедия 12+

**12 апрель "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. Башлана 12.00 0+

**13 апрель "Аҡса булһа бер муҡса"** (М. Багаев), музыкаль комедия 12+

**14 апрель "Диңгеҙ ярын иңләй ала эт..."** (С. Айытматов), драма 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**8 апрель "Лесная ярмарка"** (А. Рахманкулова) 0+. Башлана 12.00, 14.00 0+

**8 апрель "Тысяча и одна ночь"** (П. Васильев). Башлана 19.00 16+

**9 апрель "Игра в прятки"** (Н. Шувалов). Башлана 12.00, 14.00 0+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**14 апрель "Күңелле йәшәйбеҙ"** (Н. Ғәйетбаев), комедия 12+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**12 апрель "№13"** (Р. Куни), комедия 16+

*ЯҢЫ КИТАП*

# ҠАМУСТЫҢ ЯҢЫ ТОМЫ




**"Башҡорт энциклопедияһы"ның башҡорт телендәге бишенсе томы донъя күрҙе.**

Баҫмала "П", "Р", "С" хәрефтәренә башланған 2300-ҙән ашыу мәҡәлә иҫәпләнә. Улар Башҡортостан тәбиғәтенә, төбәктең иҡтисадына, уның тарихына, фәнгә, техникаға, халыҡ ижадына, киң мәғлүмәт сараларына бағышланған. Шуларҙың 1000-гә яҡыны - күренекле дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәренең биографияһы.

Китапҡа 600-ҙән ашыу иллюстрация, нота, административ һәм физик карта, Башҡортостандағы тораҡ пункттар һәм башҡорттар тығыҙ йәшәгән Рәсәй төбәктәре тураһында өс йөҙләгән мәҡәлә ингән. Баҫмала республика биләмәһендә йәшәгән сыуаш, поляк халыҡтарының, Пермь башҡорттарының тормошо һәм көнкүреше һүрәтләнгән. Шулай уҡ энциклопедияла Башҡортостандың Урал аръяғын һәм тау сәнәғәтен үҫтереүгә тос өлөш индергән алтын приискыһы хужалары һәм меценаттар Рәмиевтарға арналған мәҡәләләр ҙә бар. 1917 йылғы ваҡиғалар тураһында мәғлүмәттәр бирелгән.

Баҫма рус телендәге "Башҡорт энциклопедияһы" мәҡәләләре нигеҙендә әҙерләнгән һәм яңы мәғлүмәттәр менән тулыландырылған. Энциклопедия өҫтөндә эштә республиканың билдәле ғалимдары һәм белгестәре, яҙыусылар, журналистар, тыуған яҡты өйрәнеүселәр ҡатнашҡан.

✓ *Егеттәр Әхмәтзәкиҙең яратҡан йырын башҡарған. Бына шул дәүерҙән башлап башҡорт хәтеренә инеп, был йыр тарих көйләй. Иптәштәренең башлыҡтары менән хушлашыуы ла, данлау һүҙҙәре лә сағыла йырҙа.*

*БЕР ЙЫР ТАРИХЫ*

# СИТ ИЛДӘРГӘ КИТЕП...



**Ҡартатайым Мөхәмәт Ғәли улы Байдәүләтовтан Әхмәтзәки Вәлидиҙең беҙҙең яҡтарҙа - Хәйбулла районында булып китеүе тураһында ишеткәнем бар ине. Әҙләнеүҙәрем һөҙөмтәһендә "Ирмәк" йырының тарихына барып юлыҡтым.**

Хәйбуллала Әхмәтзәки Вәлиди тураһында иҫтәлектәр һаҡлаған кешеләр күп. Мәҫәлән, күптәр мәғариф ветераны, хәҙер инде баҡыйлыҡҡа күскән Әсмә Мәүләмбирҙе ҡыҙы Усманова тураһында ишетеп беләләр. Уның атаһы - Торомтаев Мәүләмбирҙе Ғәбделәхәт улы районда танылған йырсы була. Ул һәр саҡ бер йыр йырлар булған. Уны ҡыҙы Әсмә лә отоп ала. Тик атаһы уға был йырҙы йырлауҙы тыя.

Бер ваҡыт Йомабай Иҫәнбаев көндәре үткәндә халыҡ Мәүләнбирҙенән "Урал"ды йырлауын үтенә. "Быға са ишетелмәгән йыр йырларға теләйем", тип, ул "Ирмәк" йырын йырлап ебәрә.

*Ирмәк кенә тауҙың, ай, башында,*
*Ана, ултыра яңғыҙ бер ҡайын.*
*Сит илдәргә китеп, мәхрүм итеп,*
*Ҡалдыраһыңмы, ғәзиз йәнкәйем?*
*Ирмәк кенә тауҙың, ай, башында,*
*Бары ла ере уның еләкле.*
*Башҡорттарҙа ғына тыуа икән,*
*Һинең кеүек батыр йөрәкле!*

Аҙаҡ "Урал" башҡорт халыҡ үҙәге ойошторолған осорҙа, "Аҡ тирмә" йыйынында Мәүләмбирҙе Торомтаев та ҡатнаша. Шунда ул Ғәзим Шафиҡовтың Әхмәтзәки Вәлидиҙең фотоһын күрһәтеп: "Вәлиди исеме аҡланды, хәҙер уның тормошон өйрәнергә кәрәк, ул башҡорттоң ысын улы", - тигәнен ишетеп ҡайта. Ҡайтҡас, Вәлидиҙең исеме аҡланыуын ауылдаштарына еткерә. Был хәл 1989 йылдың декабрендә була. Шунда ғына Мәүләмбирҙе Торомтаев "Ирмәк" йырының тарихын һөйләй. 1919 йылдың февралендә атаһы Ғәбделәхәт Торомтаевҡа Һабыр ауылынан олоҫ старшинаһы Йомағужа Түләшевтан сапҡынсы килә һәм Әхмәтзәки Вәлиди килеүен хәбәр итә. Йомағужа Түләшев - Ырымбур губернаһы Орск өйәҙе Һабыр олоҫоноң аҙаҡҡы старшинаһы, Әхмәтзәкиҙең тоғро дуҫы, ярҙамсыһы була. Ғәскәргә, Әхмәтзәки Вәлидигә илдән сығып китергә ул аҡса йыйыуҙы ойоштора. "Ҡыя юл"дан бер ат - алдан, арттан егеүле аттар, 12-15 һыбайлы һаҡсы килгән. Сыбаталап егелгән көймәле санала хужа, ил ҡунағы Әхмәтзәки Вәлиди ултырған. Осрашып күрешкәс, Ғәбделәхәт Торомтаевтың йортонда мәжлес башланған: ҡурайсы, йырсы башҡорт яугирҙары үҙ оҫталығын күрһәткән. "Ҡурайсы булғас, йырсы ла барҙыр", - тигән йорт хужаһы. Шул саҡ егеттәр Әхмәтзәкиҙең яратҡан йырын башҡарған. Бына шул дәүерҙән башлап башҡорт хәтеренә инеп, был йыр тарих көйләй. Әбйәлилдә ҡалған Нәфисәнең зары ла, иптәштәренең башлыҡтары менән хушлашыуы ла, данлау һүҙҙәре лә сағыла йырҙа. Әммә был хушлашыу йыры оҙаҡ тыйылып килә.

Әхмәтзәки менән иптәштәре төндә Утарбайҙан сығып китә, Бикбауҙа ауылдың имамы Кинйәғәли муллала ҡуна. Бикбау ауылында өс көн була улар, йыйылған аҡсаның килеп еткәнен көтә. Халыҡтың башҡорт ғәскәренә тип йыйған аҡсаһы Ҡаҙырша ауылы мәсетендә һаҡланған була. Шул аҡсаны алырға барғанда "Ирмәк" йырына тағы бер куплет өҫтәлә, күрәһең:

*Ике генә егет юлға сыҡҡан,*
*Бер тин аҡса тапһаҡ та, файҙа, тип.*
*Бара торғас, ултырып илаштылар,*
*Яҙған яҙмышыбыҙ ҡайҙа, тип.*

Әхмәтзәки Вәлидиҙең Башҡортостандан киткән һуңғы юлы - тарихи юл. Хәйбулла районындағы ауылдар - Утарбай, Бикбау, Кәрһе, Йәнтеш, Аҡһыйыр, Аҡназар, Сик уны бөгөн дә хәтерләй кеүек. Ошо юлдан - Ырымбурға, артабан Ҡаҙағстанға, унан инде Төркөстанға йүнәлеп, мәңгелеккә үҙ иленән сығып китергә мәжбүр була олуғ шәхесебеҙ. Йырҙы Розалиә Солтангәрәева 1988 йылда яҙып ала. Вәлидиҙең улы Субидәй, ҡыҙы Иҫәнбикә уны 1990 йылда яҙҙырып ала һәм Төркиәлә, аҙаҡтан Америкала ишеттерә.

**Гөлназ ҠОЛСОНБАЕВА,**
**Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты уҡыусыһы.**

*ӨФӨЛӘ БАР БЕР ЙОРТ*

# МИЛЛИ ОПЕРА...

## ошо бинала тыуа

**1938 йылдың 14 декабрендә асыла Башҡорт дәүләт опера студияһы (Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры) һәм унда иң тәүҙә башҡорт телендә Д. Паизиеллоның "Тирмәнсе һылыуҡай" операһы күрһәтелә. Унда Опера театрының тәүге йондоҙҙары, Мәскәү консерваторияһын тамамлап ҡайтыусы Б. Вәлиева, Ш. Вәлиәхмәтова, Х. Ғәлимов, В. Галкин һәм башҡалар уйнай.**

Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры РСФСР-ҙа асылған 416-сы театр, беренсе милли опера театры булып тарихҡа инә. Бөгөн был бина мәҙәни мираҫ объекты, архитектура ҡомартҡыһы ғына түгел, ә үҙенең төп тәғәйенләнешен лайыҡлы дауам иткән театрҙарҙың береһе. Уның төҙөлөү тарихы 1909 йылға барып тоташа: Өфө губернаһында тыуған урыҫ яҙыусыһы С. Т. Аксаковтың вафат булыуына 50 йыл тулғанда, губернатор тәҡдиме менән Өфөлә халыҡҡа сәнғәт, мәҙәниәт, мәғрифәт таратырлыҡ Аксаков халыҡ йорто төҙөргә ҡарар ителә. Бөтә Өфө, хатта күрше губерналарҙан да аҡса йыйыла. Һуғыш та, революциялар ҙа Ленин (Үҙәк) һәм Пушкин урамдары мөйөшөндә ҡыҙыл кирбестән бина ҡалҡып сығыуға ҡамасаулай алмай. Бында башҡорт драма, урыҫ, йәш тамашасы, ҡурсаҡ театрҙары эшләй башлай, хатта данлыҡлы ғәскәровсылар халыҡ бейеүҙәре ансамбле лә тәүге аҙымдарын ошо сәхнәлә яһай. Бөтөн донъяға билдәле балет артисы Рудольф Нуриевтың ижади карьераһы ошонда башлана, 1993 йылдан күренекле хореограф Юрий Григорович инициативаһы менән Р. Нуриев исемендәге балет сәнғәте фестивале үткәрелә.

Башҡортостан балетының донъя баҫҡыстарына сығыуы ла тап Юрий Григоровичтың исеме менән бәйләнгән. Коллектив сит ил һәм ватан классикаһының иң яҡшы өлгөләрен сәхнәләштереүгә йүнәлеш тота. Беҙҙең опера йондоҙҙары Асҡар һәм Илдар Абдразаҡовтар, Йәмил Әбделмәнов, Раил Кучуков, Светлана Арғынбаева, Геннадий Родионовтың, балет солистары Гүзәл Сөләймәнова, Гөлсинә Мәүлекәсова, Елена Фомина, Руслан Мөхәмәтов, Илдар Манапов, Римма Закирова, Гөлнара Хәлитова һәм башҡаларҙың исемдәре киң билдәле.

**Земфира ХӘБИРОВА әҙерләне.**



*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КӨЙӨНӨС КҮРМӘГӘН...

## һөйөнә белмәҫ

Өрөп килгән түрәнән ҡурҡма, көлөп килгән түрәнән ҡурҡ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Илай-илай тыуабыҙ, зарлана-зарлана йәшәйбеҙ, донъянан төңөлөп үләбеҙ.

**(Томас Фуллер).**

Зоопарк - кеше булырға өйрәнеү өсөн бынамын тигән урын.

**(Эван Эзар).**

Бөйөк эштәргә хеҙмәт иткән кеше был эштәрҙе үҙенә лә хеҙмәт иттерә ала.

**(Томас Элиот).**

Ҡайһы ваҡытта бәхетһеҙлекте кисереүе еңелерәк? Һинең дошмандарыңдың тағы ла бәхетһеҙерәк икәнен күргән саҡта.

**(Фалес).**

Иң ҡурҡыныс ышанмаусанлыҡ - ул үҙ-үҙеңә ышанмау.

**(Томас Карлейль).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер эфиопия ҡәбиләһендә ике йәш кеше, тормош иптәштәрен юғалтҡас, бер-береһе менән яңы ғаилә ҡорорға уйлаған. Ирҙең улы ғына һәләк булған әсәһен юҡһынған, ә үгәй әсәйҙе күрә алмаған. Йәш ҡатын малайҙы төрлөсә әүрәтергә тырыша: тәмле ризыҡтар бешерә, бүләктәр һатып ала, ләкин малай уға был ваҡыт арауығында бер һүҙ ҙә ҡушмай.**

**Аптыраштан ҡатын шаманға килеп, кәңәш һорай.**

**- Малай мине ҡабул итһен өсөн нимәләр эшләргә?**

**- Миңә өс арыҫлан мыйығы килтер, шунан ғына һиңә ярҙам итә аласаҡмын.**

**Ҡатын ҡайтып китә, юл буйы нисек арыҫландың мыйығын йолҡоп, өҫтәүенә тере ҡалыу тураһында уйлай. Ләкин кире сигенеүе юҡ: ғаиләне нисек тә булһа нығытырға кәрәк.**

**Джунглиға барып, арыҫланды таба ул. Оҙаҡ ҡына ҡыймайынса уны ситтән күҙәтеп йөрөй. Ләкин бер саҡ ҡатындың башына уй килә: йыртҡысҡа аҙыҡ тәҡдим итергә кәрәк.**

**Ул йыртҡысҡа яҡыныраҡ килеп, уның алдына ит киҫәге һала. Көн һайын шулай эшләй. Йыртҡыс йәнә ҡатынға өйрәнеп, уны тормошоноң бер өлөшө итеп ҡабул итә башлай.**

**Бер ваҡыт, арыҫлан йоҡоға сумған саҡта, ҡатын уның эргәһенә килеп, йыртҡыстың өс мыйығын йолҡоп ала. Шаманға барыр алдынан ул был дәрестең һабағына төшөнә. Проблема үҙенән-үҙе юҡҡа сыҡҡан, ниһайәт, ҡатын сыҙамлы булырға өйрәнде бит!**

**Малай менән дә сыҙамлы булырға, уның тормошон ихтирам итергә, уға йәйләп, бәләкәй аҙымдар менән, ашыҡмайса барырға кәрәк икән..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәррирмәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 7 апрель 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5057
Заказ - 688/04